Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Һеҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, гәзитебеҙҙе туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәрегеҙгә, мәктәптәргә, мәсеттәргә, дуҫтарығыҙға һәм таныштарығыҙға яҙҙырып бүләк итә алаһығыҙ. Был юлы матур йолабыҙҙы күтәреп алып, Өфөнән БДУ профессоры Әхәт Мостафин - Яҙыусылар берлегенә, Ҡала госпиталенә, Әбйәлилдән "Коммунальник" йәмғиәте директоры Дамир Аллаяров - район ветерандарына, Баймаҡ районы Икенсе Этҡол ауылынан эшҡыуар Айбулат Ғүмәров ауылдаштарына бер нисә дана "Киске Өфө" гәзитен яҙҙырып бүләк итте. Афарин, егеттәр!

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

20 - 26 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2014 йыл

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№51 (625)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Кем ҡотҡо тарата,**

йәки Айыуҙы сынйырға ултыртырға тырышаларммы?



3

**Минең ҡыҙым булаһыңмы?**



6

**Ҡурҡыуыңды еңер өсөн...**



8-9 тап ошо минуттан үҙенде үҙгәртә башла!

**Ауылдарҙа...**



һуғым мәле башланды

12

14 ТВ-программа

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### "Башҡортостан Республикаһында граждандарҙың закон сығарыу инициативаһы тураһында" закон проекты көн тәртибенә ҡуйылды. Ул ҡабул ителгән хәлдә, ниндәй тәкдимдәр менән сығыш яһарға теләр инегеҙ?

***Спартак ИЛЬЯСОВ, тарихсы, публицист, Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы:*** Беренсенән, һәр дәүләттең үҙенең эске резервтарын көүҙәләндереүсе таяныстары булырға тейеш. Мәҫәлән, илдең аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген тәьмин итеүсе дәүләт программаһы. Өлкән быуын вәкилдәре, бәлки, хәтерләйҙер, 1982 йылда донъя баҙарында нефтҡә хаҡтарҙың осһоҙланыуы менән бәйле, илдә ауыр иҡтисади хәл килеп тыуғас, партияның Үҙәк Комитеты Пленумы ҡарары менән 1990 йылға тиклем СССР-ҙың Аҙыҡ-түлек программаһы ҡабул ителгәйне. Был ҡарар аҙыҡ-түлек етештереү мәсьәләһен генә түгел, ә тотош ауыл хужалығы өлкәһен үҫтереү буйынса комплекслы сараларҙы үҙ эсенә алды. Бөгөн үҙегеҙ күреп тораһығыҙ: тарих ҡабатлана түгелме? Ярай ҙа әлегә шөкөр - магазин кәштәләре һығылып ята, ләкин артабан да Америка менән Евросоюз санкцияны дауам итһә, иртәгә нимә булырын кем белә? Ана бит, Луганск менән Донецкиҙағы ғибрәт хәлдәрҙе көнө буйы телевизорҙан күрһәтеп торалар: асығыусылар бер һыныҡ икмәкте бүлешеп ашай башланы. Беҙҙә лә шундай бер-бер хәл була ҡалһа... Ситтән бер ни ҙә килмәһә? РФ Президенты Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа быйылғы Мөрәжәғәтнамәһендә билдәләп китеүенсә, илдә эре аграр комплекстар, фермер хужалыҡтары һөҙөмтәле эшләй, әлбиттә. Ә шулай ҙа дәүләт ҡарамағындағы хужалыҡтарҙы ла аяҡҡа баҫтырыу законлаштырылһын ине, сөнки ул ваҡытта аграр сектор тулыһынса дәүләт контролендә буласаҡ һәм маҡсатлы дәүләт программаһы буйынса үҙебеҙҙе үҙебеҙ аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү тулыһынса яйға һалыныр ине, тип уйлайым.

Тағы бер әйтергә теләгәнем - ер, һыу ятҡылыҡтары, урман һәм башҡа тәбиғи ресурстарҙы тулыһынса дәүләт ҡарамағына кире ҡайтарыу мәсьәләһе. Мин аңламайым: әлеге законларҙағы, әйтәйек, ер йәки урмандарҙы 49 йылға файҙаланыуға алыу тигән положение нимәне аңлата? Ярты быуаттан һуң ул ер йәки урмандан нимә тороп ҡала ла уның милексеһе ҡайҙа була? Киләсәктә закондарҙың ҡайһы берҙәрендәге ана шундай сәйерерәк йә әйтеп бөтөлмәгән пункттарға ҡарата ла граждандар үҙ мөнәсәбәтен белдереп, төҙәтмәләр индерергә хоҡуҡ алыр, бәлки?

(Дауамы 2-се биттә).

## КЕМ АЛЫҠ!



Декабрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияbыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан кемдәрҙер шулай уҡ **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, **"История башкирского народа"**, Нияз Мәжитовтың **"История Башкортостана"**, **"Антология поэзии Башкортостана"**, Ә. Әсфәндийәровтың **"История сел и деревень Башкортостана"**, башҡортса **"Дини календарь"**, Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, **"Рәми Ғарипов тормошо һәм ижады"**, **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, башҡорса **"Ҡөрьән Кәрим"** китаптарын алып ҡыуаныуы ихтимал.

## ЙЫЛ ЙОМҒАҒЫ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ - ҺУЛДА,

## рус теле - уңда



"Башҡорт телендә һөйләшәм..."

**Өфө ҡала округы хакимиәтендә "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса комиссияның сираттағы ултырышы булып үтте.**

Хакимиәт башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов билдәләүенсә, бөгөн дәүләт телдәрен ғәмәлдә ҡулланыу буйынса ҡала хужалығының барлыҡ тармаҡтарында ла планлы эш алып барыла. Әммә, шуға ҡарамаҫтан, алтаҡталарҙы, ойошмаларҙың һәм предприятиеларҙың эш ваҡыттарын, юл күрһәткестәрен, реклама ҡоролмаларын дәүләт телдәрендә яҙғанда һаман да хаталар ебәреүгә юл ҡуйыла. Бында, әлбиттә, ошо эштәрҙе башҡарыусыларҙың башҡорт телен белмәүе сәбәпсе. Шулай уҡ, законға ярашлы, дәүләт телдәрендә яҙылған алтаҡталарҙың урынлаштырылыуы ла һаманғаса күптәрҙең аңына барып етмәй. Ә бит быны иҫтә ҡалдырыуы һис ауыр түгел - башҡорт телендәге текст һәр саҡ һул яҡта йәки өҫтә, ә рус телендәгеһе унда йәки аҫта торорға тейеш.

Былар - дөйөм хаталар, ә баш ҡалала туған телдәрҙе һәм дәүләт телдәрен уҡытыу буйынса хәл-торош менән Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова таныштырҙы. Уның белдереүенсә, был мәсьәлә Өфөнөң милли мәғарифы өсөн тәүге урында торған бурыс. "Бөгөн баш ҡалала 40 милли мәғариф учреждениеһы селтәре эшләй, - тине ул. - Мәктәпкәсә, башланғыс, урта белем биреү учреждениеларында белем биреү башҡорт, рус, татар телдәрендә алып барыла. Мәктәпкәсә мәғариф учреждениеларында 7529 бала туған телендә уҡый йәки туған телен өйрәнә. Бөгөн дөйөм белем биреү учреждениеларында 13669 башҡорт балаһы уҡый. Был дөйөм һандың 13,7 процентын тәшкил итә. 18,5 процент башҡорт балаһы башҡорт гимназияларында йәки лицейҙарында белем ала. 21 проценты үҙ телен - туған тел, 47 проценты дәүләт теле булараҡ өйрәнә. Йәмғеһе 92,7 процент башҡорт балаһы башҡорт телендә уҡый йәки өйрәнә. Былтырғы уҡыу йылында был күрһәткес 97,2 процент булған. Был йүнәлештә иң юғары күрһәткестәр Калинин (95,3 процент), Орджоникидзе һәм Совет (94,2-шәр процент) райондарында.

(Дауамы 4-се биттә).

БАШ ЙОРТТА



# БУЛЫП ҮТКӘН ТАНТАНАҒА... саҡыра бит афишалар

**Өфөлә йәшәүемә быйыл өс тиҫтә йыл. Теүәл 30 йыл элек, ҡыштың тәүге көнөндә баш ҡалабыҙға аяҡ баҫтым һәм уны мәңгелеккә яраттым. Йылдар уҙа, ә мин Өфөмә һөҡланыуҙан туҡтамайым. Бихисап ҡалаларҙа булырға тура килде, ләкин Өфө кеүек күңелгә яҡыны осраманы.**

Нимәһе менән шул тиклем арбай һуң Өфө? Ошо һорауҙы үҙемә һәр ваҡыт бирәм һәм бер ҡасан да яуапһыҙ ҡалғаным юҡ. Тәү сиратта, ҡаланың мөһабәт булыуы оҡшай. Мөһабәт, әммә шул уҡ ваҡытта ябай ҙа, изге лә, хисле лә. Өфө халҡының һауалы булмауы күҙгә нығ бәрелә - бөтөнләй таныш булмаған кешеләр ҙә ярҙам итергә әҙерҙәр. Был да мөһим, сөнки бер кешенең тупаҫ ҡылығы тотош ҡала, хатта төбәк хаҡындағы тәьҫораттарҙы боҙорға мөмкин.

Өфөлә республиканың ғына түгел, ә тотош донъяның төрлө төбәктәренән килеүселәр йәшәй. Ләкин уларҙың береһе лә бында яңғыҙ түгел, сөнки был ҡала һәр ваҡыт үҙ ауылындың, районындың, иленден, континентындың бер өлөшөн табырға, осратырға була. Шуныһы менән дә күптәрҙең йөрәгенә Өфө йылылыҡ өләшәләр, тип уйлайым.

Ләкин күңелгә ятып бөтмәгән күренештәр ҙә бар, ҡыҙғанысҡа күрә. Мин көн һайын кисен йәйәүләп урам буйлап йөрөргә яратам. Бындай ял минуттарында, кеше һирәк булған саҡта ҡаланың йөҙө асылыбыраҡ китә кеүек. Һәм көндөҙ күрмәгән ҡайһы бер күренештәр күҙгә ташлана. Мәҫәлән, ҡалабыҙҙа әллә ҡасан уҙған концерт һәм башҡа төрлө саралар хаҡында белдергән афишаларҙың ваҡытында алып ташланмауы асыуҙы килтерә. Тәҙрә артында декабрь уртаһы, ә урамда октябрь, хатта сентябрь айҙарында "буласаҡ" концерттарға саҡырған белдереүҙәр тора. Элеүен элгәс, ваҡытында алып ташлай белеү ҙә кәрәктер ул. Ҡалаға килеүсе менәрләгән ҡунаҡтарҙа аңлашылмаусанлыҡ, аптырау тыуҙырған был афишалар, етмәһә, йыртылып бөтөп, елдә елберләйҙәр. Былай итеп Өфөбөҙҙөң йәмен ебәрмәһәк ине, тип теләгем килә.

Нияз ҒАТАУЛЛИН.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *"Башҡортостан Республикаһында граждандарҙың закон сығарыу инициативаһы тураһында" закон проекты көн тәртибенә ҡуйылды. Ул ҡабул ителгән хәлдә, ниндәй тәҡдимдәр менән сығыш яһарға теләр инегеҙ?*

(Башы 1-се биттә).

***Фәрит ӘХМӘРОВ, журналист, Сибай ҡалаһы:*** Күптән түгел Татарстан депутаттары РФ Дәүләт Думаһына илдә байрам көндәрен ҡыҫҡартыу тәҡдиме менән мөрәжәғәт иткәйне. Хәҙергә улар шәмбе һәм йәкшәмбегә тура килгән байрам көндәре өсөн өҫтәмә ял биреүҙе туҡтатыуҙы һорай. Был тәҡдимгә кем нисек ҡарайҙыр, әммә минә ул бик оҡшай, мин дә тап ошо хаҡта уйлап йөрөй инем әле. Күршеләр иҫәпләп сығарыуынса, беҙ йылына 27-28 көн байрам итәбеҙ икән. Шуға бер айлыҡ отпуск менән шәмбе, йәкшәмбеләрҙе лә ҡушһаң, өс айға барып баҫа. Шулай итеп, беҙ бер йылдағы 12 айҙың өсәүһен "байрам итеп" үткәрәбеҙ. Бына тиҙҙән Яңы йыл каникулдары башланасаҡ - 11 көн буйы "эт һуғарырға" йыйынабыҙ. 11 көн хатта иң ялҡау, эш һөймәгән әҙәмдең дә үҙәгенә үтер. Ни эшләп ятмаҡ кәрәк! Фекер ебе үҙенән-үҙе икенсе бер мөһим мәсьәләгә барып тоташа: беҙ хәҙер былай ҙа эшкә өйрәтмәй, ялҡау балалар үҫтерәбеҙ, шуға күрә мине йәштәрҙең яҙмышы бик борсой. Белгәнен-белмәгәнен дә, наҙанын да, ялҡауын да институттарға алып барып тығабыҙ. Ике-өс вуз бөтөрөү модаға әйләнеп бара. Ошо мәсьәләне лә закондар ҡулланып яйға һалырға кәрәктер, тигән уйҙамын. Аныҡ тәҡдимдәрем дә бар. Мәҫәлән, хәрби хеҙмәт срогын ҡабаттан ике йылға оҙайтыу кәрәк, сөнки, ни генә тимә, армия тәрбиә һәм сыныҡтыу мәктәбе булыуын дауам итә. Дедовщинанан ҡурҡырға ярамай: С. Шойгу армияның бөсен күтәреүгә, тәртип булдырыуға күп көс һала. Егеттәр Тыуған илен һаҡларға бурыслы, ә бер йыл эсендә генә хәрби теорияны ла, анау тиклем ҡеүәтле техника һәм электроника серҙәрен дә үҙләштереү мөмкин түгел. Өҫтәүенә, донъяла барған сәйәси хәлдәр ҙә тап шуға ишаралай кеүек.

***Искәндәр ӘЛМӨХӘМӘТОВ, хеҙмәт ветераны, Баймаҡ районы:*** Еренә еткереләп, һөҙөмтәле эшләнә, ғәмәлдәге закондар ҙа баштан ашҡан да бит. Халыҡ һүҙе юғарыға, өҫтәүенә, закон проекты булараҡ, барып еткәнсә - айһай... Белеүемсә, ниндәйҙер һәйбәт, файҙалы идеяны закон кимәленә еткереүе еңел генә түгел икән шул, уның процедураһы ярайһы ҡатмарлы: эште закон башланғысын яҡлау буйынса төркөм булдырыуҙан башлап, артабан проект идеяһын депутаттар ҡарауына сығарыу өсөн 30 кешенән торған ойоштороу төркөмө 30 көн эсендә 150 мең ҡултамға йыйырға тейеш. Ә ғөмүмән, берәй бик тә кәрәкле идеяны бойомға ашырырға кәрәк булһа, уныһына ғына ҡарап тормайһың инде, тотонаһың, тик ахыры ни менән бөтөрөн генә белеп булмай. Әгәр был башланғыс депутаттарҙа яҡлау тапмаһа? Мин бына әле үк бер законға өҫтәмә индерер инем дә бит. Мәғлүм булыуынса, күптән түгел "Алкоголь етештереү һәм әйләнешен дәүләт көйләүе тураһында" РФ законына магазиндарҙа алкоголле эсемлектәр һатыуҙы сикләү, балиғ булмағандарға спиртлы эсемлектәр һатыуҙы тыйыу, граждандарға үҙҙәре йәшәгән урындарҙа шулай уҡ араҡы менән сауҙаны тыйыу мөмкинлеге бирелеү хаҡында төҙәтмәләр, закон боҙоусыларға ҡарата ҡулланыласаҡ административ һәм енәйәт яуаплылыҡтары хаҡында өҫтәмәләр индерелгәйне. Шул законда мөһим бер пункт төшөп ҡалды: мин унда көмөшкә эшләп һатыуҙы ҡәтғи тыйыу, көмөшкәселәргә ҡарата ҡаты яза саралары күреү хаҡында өҫтәмә индерелеүен талап итер инем. Шунһыҙ ярты-йорто был закондың файҙаһы юҡҡа тиң. Көмөшкә һатыусылар иң кәрәкле, иң бай, иң "абруйлы" кешегә әйләнгән ауылдар күп беҙҙә. Күрһәгеҙ, аптырар инегеҙ: улар йортонаң ҡапҡаһы тәүлек әйләнәһенә ябылмай. Кеше һәм ғаиләләр бәхетһеҙлегенә, ҡатын-ҡыҙ һәм балалар күҙ йәштәренә сәбәпсе бындай оятһыҙҙарға, ғөмүмән, аныҡ закон нигеҙендә аяуһыҙ саралар күрелһен ине!

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы тамамланыуға табан бара.**

● Шулай итеп, 2015 йылдың беренсе яртыһы өсөн **50665** индекслы "Киске Өфө"гә **513 һум 72 тингә** яҙылырға мөмкин. Предприятиелар һәм ойошмалар өсөн билдәләнгән **50673** индекслыһының хаҡы - **543 һум 72 тин**.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға - **252 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **252 һум**.

● **Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу** мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында **"Яҙылыу"** тигән төймәгә баҫып, **"Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу (540 һум 78 тин)"** һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

● Гәзитебеҙгә яҙылып, бүләккә китаптар алыу тураһында 1-се биттә иғланды ҡарағыҙ. Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

МӨХӘРРИРИӘТ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич киң мәғлүмәт саралары етәкселәре менән матбуғат конференцияһы уҙғарҙы. Осрашыуҙа Башҡортостандан "Башинформ" агентлығының баш мөхәррире Шамил Вәлиев ҡатнашты. Финанс баҙарындағы хәл һөйләшеүҙең төп темаларының береһе булды. Михаил Бабич һүҙҙәренсә, округтың бөтә төбәктәрендә кризисҡа ҡаршы штабтар булдырылған, улар башҡа эштәрҙән тыш, иң кәрәкле тауарҙарҙың хаҡын күҙәтеп бара.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Өфөнөң транспорт системаһын үҫтереүгә арналған кәңәшмә үткәрҙе. Өфө хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡала транспорт системаһын үҫтереүҙең перспективалары һәм ошо йүнәлештә башҡарылған эш һөҙөмтәләре тураһында һөйләне. Тикшереү барышында саҡырылған эксперттар - РФ Юғары иҡтисад мәктәбенең Транспорт иҡтисады институты транспорт моделләштереү үҙәге директоры Павел Козлов, "Инженерная группа БЕБ" немец компанияһы башлығы Бернард Блюмель үҙ фекерен белдерҙе.

✓2013 йылда ҡала эсендә кешеләрҙе транспорт менән тәьмин итеү һәм пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереүҙең сифатын күтәреү маҡсатында Дим - Өфө - Шаҡша участкаһында "Ҡала электричкаһы" проектын тормошҡа ашырыу башланды. Транспорт-күсеп ултырыу комплексын төҙөп,"Дим" һәм "Шаҡша" станцияларын сафҡа индереү буйынса юл карталары әҙерләнгән. "Гастелло", "Ҡала мәҙәниәт һарайы", "Воронки - Көнъяҡ автовокзал", "Правая Белая - Телеүҙәк" транспорт-күсеп ултырыу үҙәктәрендә эскалатор, траволатор һәм лифттарҙы сафҡа индереү ҡаралған. 30-ға яҡын күсеп ултырыу пункттары Өфөлә йәшәүселәргә һис ниндәй ҡыйынлыҡһыҙ ҡаланың теләһә ҡайһы нөктәһенә барып етергә мөмкинлек бирәсәк.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Максим Михайловты Башҡортостан Президенты Хакимиәте Етәкселегенең эске сәйәсәт буйынса урынбаҫары итеп тәғәйенләү тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Максим Михайлов 1978 йылдың 10 ғинуарында Өфөлә тыуған. Юридик фәндәр кандидаты. 2013 йылдың октябрендә Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының республика бүлексәһе рәйестәштәренең береһе итеп һайланды.

КӨНАУАЗ

# КЕМ ҠОТҠО ТАРАТА,

## йәки Айыуҙы сынйырға ултыртырға тырышалармы?

**18 декабрҙә Рәсәй Президенты Владимир Путин матбуғат конференцияһы үткәрҙе. Мәскәүҙең Халыҡ-ара сауҙа үҙәгендә уҙған сарала ил башлығы өс сәғәттән ашыу 38 Рәсәй һәм сит ил журналисының 53 һорауына яуап бирҙе. Түбәндә шуларҙың ҡайһы берәүҙәренә күҙ һалып үтәйек.**



● Матбуғат конференцияһын Владимир Путин күпселек рәсәйлене борсоған теманан - илдең иҡтисади хәленән башланы. "Бөгөнгө ситуациянан сығыу һәм Рәсәй иҡтисадының үҫеше ҡотолғоһоҙ. Иң уңайһыҙ шарттарҙың бергә тура килеү мөмкинлеген иҫәпкә алып һүҙ йөрөткәндә, быының өсөн ике йыл кәрәк буласаҡ", тине ул. Шулай уҡ Президент бөгөнгө ситуацияның барлыҡҡа килеүе, тәү сиратта, тышҡы факторҙарға бәйле булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм Рәсәй Үҙәк банкы һәм Хөкүмәт тарафынан ҡабул ителгән сараларҙы көн талабына ярашлы, тип иҫәпләүен дә белдерҙе.

● Валюта баҙарында барған хәл-ваҡиғаларға ҡағылышлы һорауға яуап биреп, Владимир Путин: "Әгәр ҙә Үҙәк банк валюта интервенцияһын алдараҡ туҡтатҡан булһа, төп ставканы 17 процентҡа тиклем күтәрергә тура килмәс ине", тип билдәләне (миҫал өсөн - 2013 йылдың 13 сентябренән ул йылына 5,5 процент, 2014 йылдың 25 июленән 8,0 процент тәшкил иткән). Ил башлығы фекеренсә, Рәсәй Федерацияһы биржаһында валюта спекуляцияһы менән сит ил компаниялары ла, Рәсәй компаниялары ла шөғөлләнергә мөмкин.

● Бензинға һәм аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙың артыуын контролдә тотоу мотлаҡ, тине Президент. "Быының менән көн һайын, аҙна һайын шөғөлләнеү мөһим. Етештереүселәр, сауҙа нөктәләре, нефть компаниялары менән осрашырға һәм бергәләп эшләргә кәрәк. Шулай уҡ Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәт тә был йәһәттән үҙ эшен тейешенсә башҡарырға тейеш", тине ул үҙ сығышында.

● Көнбайыш менән мөнәсәбәттәргә туҡталып, ил башлығы уларҙың "үҙҙәрен империя, ә башҡаларҙы ҡыҫымға алып була торған вассалдар кеүек тойоуҙарын" белдерҙе. Ләкин Рәсәй менән Көнбайыш араһындағы диуарҙың бөгөн генә барлыҡҡа килмәүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Шул уҡ ваҡытта Рәсәйҙең көрсөклө хәл буйынса үҙ алдына ҡуйған ҡәтғи позицияһы сит ил партнерҙарына хәүефһеҙлек буйынса дөйөм арауыҡ булдырыу мөһимлеген аңлатырға тейеш, тип билдәләне.

Көнбайыштың Рәсәйгә ҡарата булған мөнәсәбәте айыуҙы сынйырға ултыртырға тырышыуҙы хәтерләтә, тине Владимир Путин. Һәм был мөнәсәбәт, ил башлығы фекеренсә, Ҡырымдың Рәсәйгә ҡушылған ваҡытынан алып түгел, ә күп йылдар алдан барлыҡҡа килгән. "Беҙ нимә генә эшләһәк тә һәр саҡ проблемалар, ҡаршылыҡтар һәм беҙгә ҡаршы икһеҙ-сикһеҙ көрәш менән осрашабыҙ. Мин Валдай клубында сағыштырыу килтергәйнем. Әгәр ҙә айыуыбыҙ тайга буйлап суҫҡа балаһын ҡыумайынса, тыныс ҡына ултырһа, уны тыныслыҡта ҡалдырырҙар ине микән? Юҡ, ҡалдырмаясаҡтар. Уны һәр саҡ сылбырға ултыртырға тырышасаҡтар", тине Владимир Владимирович. Был оҡшашлыҡты дауам итеп,шулай тине: "Әгәр ҙә Көнбайыш айыуҙы сылбырға ултыртыу яйын тапһа, уның шунда уҡ тештәрен дә, тырнаҡтарын да йолҡоп аласаҡтар. Был хәлдән һуң инде айыуҙың кәрәге ҡалмаясаҡ. Унан ҡарасҡы эшләйәсәктәр. Ә унан һуң тайганы үҙ ҡулдарына ала башлаясаҡтар. Көнбайыштағы рәсми кешеләр ауыҙынан, Себерҙең һәм уның иҫәпһеҙ байлыҡтарының Рәсәйҙеке генә булыуы ғәҙел түгел тип асыҡтан-асыҡ әйткәндәрен ишеткәнебеҙ бар".

● Украинаның көнсығышында Рәсәй ғәскәрҙәренең булыуы хаҡындағы һорауға яуап итеп, ил Президенты, Украиналағы хәрби бәрелештәрҙә ҡатнашыусылар унда үҙ иректәре менән, тип белдерҙе.

● Матбуғат конференцияһында В.Путиндың Украиналағы көрсөктөң хәл ителеү юлын нисек күреүе хаҡында ла һорау яңғыраны. Уға яуап итеп ил башлығы: "Беҙ көрсөктөң ҡасан да булһа хәл ителеүенән сығып һүҙ йөрөтәбеҙ. Һәм ул ни тиклем тиҙерәк хәл ителә - шул тиклем яҡшыраҡ. Икенсенән, ул ниндәйҙер ҡыҫым ярҙамында түгел, ә сәйәси әмәлдәр менән хәл ителергә тейеш", тине. Шулай уҡ ул сәйәси диалог ваҡытында Рәсәйҙең аралашсы булып сығыш яһау әҙерлеге хаҡында ла белдерҙе. Ә Киевтың Донбасты иҡтисади блокадала тотоуҙың перспективаһыҙ һәм Украина дәүләтселеге өсөн зыянлы икәнлеген билдәләне. Владимир Путин шулай уҡ Рәсәйҙең Донбасс халҡына ярҙам күрһәтеүҙе дауам итәсәген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

● Журналистар менән осрашыуҙа Рәсәй - Ҡытай мөнәсәбәттәре лә ҡуҙғатылды. Ағымдағы йылдың майында "Газпром" һәм Ҡытайҙың CNPC компанияһы араһында 30 йылға иҫәпләнгән килешеүгә ҡул ҡуйылды. Уға ярашлы Рәсәй Ҡытайға йыл һайын "Себер көсө" үткәргес торбаһы буйлап 38 миллиард кубометр газ "ҡыуасаҡ". Президент белдереүенсә, был килешеү, үҙара ташламаларға ҡарамайынса, бер яҡ өсөн дә зарарлы түгел. Ил башлығы Рәсәйҙең Көнсығышҡа ҡарай боролоуын сәйәсәт менән түгел, ә донъя иҡтисадында күҙәтелгән хәл менән аңлатты. "Азия - Тымыҡ океан төбәге донъяның башҡа өлөштәренә ҡарағанда тиҙерәк үҫешә. Яңы мөмкинлектәр барлыҡҡа килә. Энергетика күҙлегенән сығып ҡарағанда, Ҡытай, Һиндостан, Япония һәм Көньяҡ Кореяның энергия ресурсҙарына ихтыяжы ете миль оҙонлоғондағы аҙымдар менән алға бара. Шулай булғас, ни өсөн әле беҙ унан баш тартырға тейешбеҙ?" - тине Рәсәй лидеры.

● Илдә ҡатмарлы иҡтисади хәл булғанда Рәсәйҙә 2018 йылда футбол буйынса чемпионат уҙғарыу кәрәкме?" тигән һорауға Владимир Путин был сара Рәсәйгә үҫеш бирә һәм быының өсөн аҡса йәл түгел, тип яуапланы.

● Журналистарҙы илдә "һарай түңкәрелеше" була ҡалһа, Президенттың планы ла ҡыҙыҡһындырҙы. "Тынысланығыҙ, беҙҙә бындай түңкәрелештәр булмаясаҡ, сөнки беҙҙә һарайҙар юҡ. Беҙҙә рәсми резиденция - Кремль бар һәм уның яҡшы һаҡланыуы ла дәүләт тотороҡлоғон тәьмин итеүсе фактор", - тине ил башлығы. Шулай ҙа тотороҡлолоҡ нигеҙе, Президент белдереүенсә, Рәсәй халҡының таянысында.

● Рәсәй ВВС-тарының көнбайыш сиктәре эргәһендә осоуҙарының йышайыуы тураһында һорау биргән журналисҡа: "Һеҙ әлеге ваҡытта донъяла күҙәтелгән көсәргәнешлеккә Рәсәй үҙенең өлөшөн индерҙе, тинегеҙ. Эйе, ләкин ул өлөш Рәсәйҙең үҙенең милли мәнфәғәтен ҡатыраҡ һәм ҡатыраҡ яҡлауға ғына ҡайтып ҡала", - тине. Нәҡ ошо, уның фекеренсә, көнбайышта ризаһыҙлыҡ тыуҙыра ла инде. "Беҙ һуңғы өс йылда ғына был осоштарҙы яңынан тергеҙҙек, ә быға тиклем османыҡ. Кем ҡотҡо тарата һуң? Беҙме ни?" тип журналистың үҙенә ҡайтарып һорау бирҙе. Ул Рәсәй Оборона министрлығының икенсе йылда бюджеты артасағын һәм уның 50 миллиард доллар тәшкил итәсәген белдерҙе һәм сағыштырыу өсөн 575 миллиард доллар тәшкил иткән Пентагон бюджетын миҫалға килтерҙе. Владимир Путин Рәсәйҙең бер ниндәй ҙә баҫып алыу сәйәсәтен уҙғармауын һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Ипотека ставкаларының үҙгәреү мөмкинлеге хаҡында һорау ҡуҙғатылғас, ил башлығы банктар ипотека буйынса кредитлау ставкаларын яңынан ҡарарға ашыҡмаç, тигән ышаныс белдерҙе. Шулай уҡ әгәр ҙә Үҙәк банк тарафынан билдәләнгән төп ставка күпмелер ваҡытҡа 17 процентта ҡала икән, Рәсәй Банкы һәм Хөкүмәт ипотеканы һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итеүсе махсус инструменттар хаҡында уйларға тейеш буласаҡ, тине ул.

● 2018 йылда буласаҡ Президент һайлауҙарында үҙ кандидатураһын ҡуйыу-ҡуймауҙы башҡарылған эш һөҙөмтәләренән сығып хәл итәсәкмен, тип хәбәр итте Владимир Путин. "Был хаҡта һүҙ йөрөтөү иртәрәк әле. Рәсәй Федерацияһы граждандары мәнфәғәттәренән сығып ныҡышмалы эшләргә кәрәк. Эш һөҙөмтәләре һәм йәмғиәттең кәйефенә ҡарап,2018 йылғы Президент һайлауҙарына кем барасағы тураһында һиҙмәх яһарға мөмкин буласаҡ", - тине ул.

● Матбуғат конференцияһында, әлбиттә, илдең социаль-иҡтисади яҡтан үҫеш йомғаҡтары ла барланды. "Быйылғы йылда федераль бюджеттың килеме сығымдан 1,2 триллион һумға күберәк буласаҡ. Был Эске тулайым продукттың (ВВП) 1,9 проценты", - тип белдерҙе В.Путин. Ул шулай уҡ сәнәғәт етештереүенең үҫеше тураһында ла әйтеп үтте. Социаль йәһәттән демографик динамиканың позитив булыуын оло ҡаҙаныш итеп билдәләне.

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әҙерләне.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓1 ноябргә Башҡортостандың тупланма бюджетының килеме - 136 миллиард һум. Төбәк бюджеты дефициты 1,6 миллиард һум тәшкил иткән. Республиканың Финанс министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 1 ноябргә дәүләт бурысы 24, 2 миллиард йәки 17,8 процент килем тәшкил иткән, шул иҫәптән 13,1 миллиард һум - ҡиммәтле ҡағыҙҙар, 6,1 миллиард һум - бюджет кредиттары, 4,5 миллиард һум - һумлыҡ банк кредиттары, 458,8 миллион һум - дәүләт гарантиялары.

✓Башҡорт дәүләт университеты Берләшкән Милләттәр ойошмаһының Мәскәүҙәге Мәғлүмәт үҙәге менән хеҙмәттәшлек итәсәк. Рәсми партнерлыҡ тураһында документҡа БДУ ректоры Николай Морозкин менән Үҙәк директоры вазифаһын башҡарыусы Юрий Шишаев ҡул ҡуйҙы, тип хәбәр иттеләр вуздың матбуғат үҙәгенән. Советник Владимир Павинский Башҡорт дәүләт университетында уҡыу йортоноң ректоры һәм БДУ-ның Хоҡуҡ институты вәкилдәре менән осрашты. Эшлекле осрашыуҙа ҡатнашыусылар ғинуарҙа Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының Мәскәүҙәге Мәғлүмәт үҙәгендә БДУ-ның иң яҡшы студенттарына стажировка үткәреү тураһында һөйләште.

✓Башҡортостандың эшлекле даирәләр делегацияһы эш сәфәре менән Ҡырғыҙстанға юлланды. Уның составында 19 кеше. Сәфәр сиктәрендә ике республика эшҡыуарҙары араһында һөйләшеүҙәр алып барыласаҡ. Делегация ағзалары "Бишкәк" ирекле иҡтисади зонаһына барасаҡ, "Башҡортостан Республикаһы миҫалында Рәсәй Федерацияһында бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа ярҙам итеү институттарын булдырыу" темаһы буйынса түңәрәк өҫтәлдә ҡатнашасаҡ. Бөгөнгө көндә үҙара сауҙа итеү күләме буйынса Башҡортостандың партнеры булған илдәр араһында Ҡырғыҙстан 21-се урынды биләй.

✓Ауыр тормош хәлендә ҡалған балаларҙы яҡлау фонды "Бөтә балалар ҙа ҡәҙерле" тип исемләнгән Бөтә Рәсәй конкурсына йомғаҡ яһаны. Унда 53 субъекттан 160-тан ашыу ҡала ҡатнашты. Рәсәй субъекттарының административ үҙәктәре араһында Ижевск ҡалаһы еңеү яуланы. Өфө Архангельск ҡалаһы менән бергә икенсе урында. "Мин - ата-әсә!" порталында уҙғарылған онлайн-тауыш биреү һөҙөмтәләре буйынса Өфө лидер булып тора.

**"Башинформ"дан.**

ҮӘТ БИТ ӘЙ!

# БЫЛ - ХАЛЫҠ ФЕКЕРЕ

**Социологик һорау алыуҙар һөҙөмтәһе буйынса, өфөләрҙең 60 проценты баш ҡалалағы хәл-торош менән ҡәнәғәт. Ике йыл эсендә был күрһәткес 10 процентҡа артҡан.**

Торлаҡ һатып алыуға (58%) һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәренә хаҡтарҙың юғары булыуы иң көнүҙәк мәсьәләләр рейтингының юғары баҫҡысында тора. Шулай уҡ өфөләр киҫкен проблемалар рәтенә эскелек һәм алкоголизмды (35%), коррупцияны (33%), эшһеҙлекте (31%), юлдарҙағы тығындарҙы (29%) индерә.

Халыҡты торлаҡ менән тәьмин итеүҙе "яҡшы" һәм "ҡәнәғәтләнерлек" тип 15 һәм 47 процент баһалай. Уҙған йылдар менән сағыштырғанда, хәл-торош яҡшы яҡҡа үҙгәргән: 1,5 - 2 тапҡырға насар баһалар кәмеһә, яҡшы һәм ҡәнәғәтләнерлек баһалар һиҙелерлек артҡан. Мәҫәлән, 2008 йылда торлаҡ менән тәьмин итеү буйынса хәл-торошто ыңғай баһалаусылар һаны ике тапҡырға кәмерәк булған. Шулай уҡ үҙҙәренең йәшәү шарттарын ыңғай баһалаусылар күләме лә арта бара. 2008 йылда улар 30 процент булһа, 2011 йылда - 41, 2014 йылда - 65.

Ҡаланың торлаҡ-коммуналь хужалығы эшен респонденттарҙың 61 проценты ыңғай баһалай. Улар күрһәткән хеҙмәттәрҙең сифаты менән 67 процент ҡәнәғәт. Был өлкәләге төрлө проблемалар араһында хеҙмәттәргә түләүҙәрҙең юғары булыуы киҫкен тора (63%). Был проблема йыл ярым тирәһе иң көнүҙәк булып ҡала. Өфөләрҙең өстән бер өлөшөн (34 процент) хеҙмәттәрҙең сифаты түбән булыуы һәм түләүҙәрҙе билдәләү тәртибе аңлашылмауы борсой. Сирек өлөшөн идарасы компаниялар тарафынан алдашыу һәм хаҡтарҙы күтәреү хәүефләндерә. Шул уҡ ваҡытта һәр икенсе өфөлә (44%) адреслы социаль түләүҙәрҙе юллап мөрәжәғәт итмәгән һәм йыйынмай ҙа. 35 процент иһә әлегә мөрәжәғәт итмәгән, әммә планлаштыра. 8 процент ҡына октябрҙә мөрәжәғәт итеп, түләүҙәрҙе алған.

Һуңғы 2-3 йылда ҡалала төҙөкләндереү эштәре киң йәйелдерелде. Скверҙар һәм парктар ҙа күҙ унынан ситтә ҡалманы. Яуап биреүселәрҙең 45 проценты үҙгәрештәрҙе күрә, әммә ял итеү урындарына барыбер ҙә бик йөрөмәй. 16 процент иһә, киреһенсә, скверҙарға һәм парктарға йышыраҡ йөрөй башлаған. 15 процент бер ниндәй ҙә үҙгәреш тоймаған.

Өфөлә йәшәүселәрҙең күпселеге баш ҡала экологияһын төп бысратыусыларҙың береһе тип транспортты атай: 60 процент йәмәғәт һәм йөк транспортын, 40 проценты - граждандарҙың шәхси автотранспортын күрһәтә. 53 процент экология бысраныуында - "нефть химияһы заводтарын", 46 проценты "башҡа заводтарҙы" ғәйепләй. Яуап биреүселәрҙең яртыһы, халыҡ үҙе иң төп бысратыусы, тип баһалай. Ҡала халҡының 64 проценты сүп-сар сығарыу яҡшы ойошторолған, ти (60%). 69 процент көнкүреш ҡалдыҡтарын айырып йыйыуҙы хупларға риза. Күпселек Өфөнө - таҙа ҡала тип баһалаһа (61%), 26 процент быының менән риза түгел.

"Росгосстрах" компанияһы үткәргән тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһенә ярашлы, Өфөлә Рәсәйҙең иң оптимист кешеләре йәшәй. Яуап биреүселәрҙең 82 проценты тулыһынса йәки нигеҙҙә тормошонан ҡәнәғәт. Ҡала хакимиәте үткәргән һорау алыуҙар ҙа баш ҡала халҡының оптимист булыуын раҫлай - 66 процент тормошо менән ҡәнәғәт һәм алдағы йылдарҙа йәшәү тағы ла яҡшырыр, тип өмөт итә. Бында шуны ла иҫәпкә алырға кәрәк: ҡала халҡының күпселеге һәм власть эшмәкәрлегенә баһа биреүгә йыл миҙгелдәре лә йоғонто яһай. Март-апрелдә, мәҫәлән, кире баһалар күберәк булһа, август-сентябрҙә ыңғай баһалар арта. Октябрь-декабрҙәге баһалар буйынса иһә ысынбарлыҡ ныҡлыраҡ сағыла.

ЙЫЛ ЙОМҒАҒЫ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ - ҺУЛДА,

## рус теле - уңда

**(Башы 1-се биттә).**

Һуңғы ваҡытта башҡорт йәмәғәт ойошмалары тарафынан уҡыусыларҙы башҡорт гимназияларына һәм лицейҙарына ҡабул итеү мәсьәләһе әүҙем күтәрелә. Ғәмәлдә, башҡорт мәктәптәрендә уҡыусылар һаны артыуы күҙәтелә. Һуңғы өс йылда был һандар 4484, 4605, 4943 бала тәшкил итә. Мәктәптәрҙең барыһы ла, 2-се башҡорт лицейынан башҡа, тулы проект ҡеүәтенә эшләй йәки уларҙа балалар һанының артыуы күҙәтелә. Әммә мәктәптәр уҡыусыларҙы микрорайондар буйынса ҡабул иткәнлектән, уларҙа башҡорт милләтенән булмаған балалар һаны ла күбәйә. Әлеге ваҡытта башҡорт мәктәптәрендә башҡорт уҡыусылары 53 проценты алып тора.




Уҡыу йылы башында рус телле 93 дөйөм белем биреү учреждениеһында башҡорт телен туған тел булараҡ уҡытыу ойошторолған. Былтыр был һан 109 булған. Был күрһәткестең кәмеүен финанс средстволарын оптималләштереү, туған тел булмаған уҡыу планын һайлау, 10-11-се синыфтарҙа туған телдәр уҡытыу күсәгилешлеген һаҡламау, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүгә өҫтөнлөк бирелеү сәбәптәре менән аңлатырға мөмкин. Әммә "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы законға ярашлы, мәғариф учреждениелары туған телдәрҙе уҡытыу өсөн шарттар тыуҙырырға тейеш икәнен оноторға ярамай.

Рус телле барлыҡ мәғариф учреждениеларында ла башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү ойошторолған. Әммә башланғыс синыфтарҙа дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙы ойоштороу проблемалар тыуҙыра. Әлбиттә, беҙ мәғариф тураһындағы республика һәм федераль законды тормошҡа ашырырға тейешбеҙ. Ә уларҙа дәүләт телдәрен өйрәнеү яҙылған, икенсенән, башланғыс белем биреүҙә республикаларҙың дәүләт телдәрен өйрәнеүҙе федераль дәүләт белем биреү стандарттары ла күҙаллай. Аңлатмалы записскала: "Уҡыу пландары РФ мәғариф тураһындағы ҡануниәттә ҡаралғанса, субъекттарҙың дәүләт телдәрендә һәм рус теле булмаған туған телдә уҡытыуҙы һәм уларҙы өйрәнеү мөмкинлеген, синыфтар буйынса һәр йыл уларҙы өйрәнеү сәғәтен билдәләүҙе тәьмин итә", - тиелә. Шулай итеп, федераль дәүләт белем биреү стандарттарын тормошҡа ашырғанда баш-

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БЕРЛӘШӘЛӘР...



**Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы ҡарамағында булған 103 дәүләт унитар һәм ҡаҙна предприятиеларын БР "Республика Башкортостан" Нәшриәт йорто дәүләт унитар предприятиеһына ҡушасаҡтар. 15 декабрҙә республика Хөкүмәтендә ошоға ярашлы ҡарар ҡабул ителде.**

- Реформаның маҡсаты - килеп тыуған иҡтисади хәлдә төбәктәге мәғлүмәт өлкәнен һаҡлап ҡалыу һәм матбуғат тармағы хеҙмәткәрҙәренә лайыҡлы эш хаҡы түләү өсөн шарттар булдырыу, - тине Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе Борис Мелкоедов. - Һәләтле, әүҙем хеҙмәткәрҙәргә үҫеш өсөн мөмкинлек һәм юғары эш хаҡы булырға тейеш. Миненсә, әлеге система редакцияларға бер-береһенә ярҙам итергә, тәжрибә уртаҡлашырға, матди базаны бергәләп файҙаланырға һәм арттырырға ярҙам итәсәк.

Яңы система әлеккеһенән күпкә һығылмалыраҡ, тип иҫәпләй Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы етәксеһе, ул "тармаҡтағы хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәрергә ярҙам итәсәк".

- Беҙҙең редакцияларҙың һәм полиграфистарҙың эше һөҙөмтәһендә Башҡортостан күп йылдар Рәсәйҙә иң күп гәзит-журнал уҡыусы төбәк һанала. Шуға ҡарамаҫтан, баҫма киң мәғлүмәт сараларының килеме йылдан-йыл кәмей. Быға тираждың кәмеүе, реклама материалдарының аҙ булыуы, интернет-баҫмалар менән конкуренция, "Рәсәй почтаһы"на баҫмаларҙы ташыуға субсидиялар бөтөрөлөүе сәбәпсе. Эш хаҡы артмай тиерлек. Әгәр ҙә беренсе яртыйыллыҡта республика буйынса уртаса эш хаҡы 23 581 һум тәшкил итһә, республика гәзиттәрендә - 19, 2 мең һум, районда-рҙа - 16, 9 мең. Система үҙгәртеп ҡороу талап итә ине. Дәүләт тармаҡҡа ярҙам итте һәм итәсәк. Күп предприятиеларҙы бер дәүләт унитар предприятиеһы базаһына туплау бер үк эште ҡабатлау тип ҡабул ителмәйәсәк. Бюджет саралары һөҙөмтәлерәк файҙаланыласаҡ. Редакция хеҙмәткәрҙәренә нимә кәрәк һуң? Карьера үҫеше, уҡытыу, уңайлы эш шарттары һәм, әлбиттә, лайыҡлы эш хаҡы һәм торлаҡ мәсьәләһен хәл итеү мөмкинлеге. Яңы модель быының өсөн күберәк мөмкинлек бирәсәк, - тип ышана Борис Мелкоедов.

# ПАССАЖИРҘАРҒА - УҢАЙЛЫ ЙӨРӨШ

**Өфөлә йәмәғәт транспорты йөрөгән урамдарҙы категорияға бүлергә тәҡдим**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Конгресс-холда донъя операһы йондоҙҙары - Барбара Фриттоли (Италия) һәм Башҡортостандың халыҡ артистары Аҫҡар һәм Илдар Абдразаҡовтар менән берлектә матбуғат конференцияһы уҙҙы. Һүҙ күп һанлы ижади проекттар һәм Өфөлә үтәсәк концерттар тураһында барҙы. Артистар 17 декабрҙә Конгресс-холда атаһының, легендар башҡорт кинорежиссеры Әмир Абдразаҡовтың Хәтер кисәһендә сығыш яһаны, 28 декабрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында сығыштары көтөлә.

✔Өфөлә "Байыҡ" республика телевизион конкурсы финалистары билдәләнде. Сара Ҡала мәҙәниәт һарайында үтте. Ир-егеттәр араһында Гран-при Ишембай районынан Эмил Һөйәрголовҡа, ҡатын-ҡыҙҙар араһында - Баймаҡ районынан Рәмзиә Солтановаға тапшырылды. Ансамблдәр араһында Гран-при - Әбйәлил районынан "Йәшлек" һәм Баймаҡтан "Ирәндек" ансамблдәрендә. Гала-концертта республиканың төрлө төбәктәренән 500-гә яҡын бейеүсе, шулай уҡ Һамарҙан, Чечнянан, Төньяҡ Осетиянан, Тыванан, Ҡырғыҙстандан килгән ҡунаҡтар сығыш яһаны.

✔Пекинда барған Бөтә донъя интеллектуаль уйындарында халыҡ-ара шашкаларҙа рапид (тиҙ уйнау) буйынса турнир уҙҙы. Рәсәйҙең йыйылма командаһы составында ике Башҡортостан вәкиле - Тамара Таныҡҡужина менән Александр Георгиев сығыш яһай. Ҡатын-ҡыҙҙар араһындағы турнирҙа Тамара Таныҡҡужинаға етеүсе булманы. Ул мөмкин булған 14 мәрәйҙең унауһын йыйып, алтын миҙал яуланы. Ирҙәр араһында ғәмәлдәге чемпион Александр Георгиев, донъяның экс-чемпионы Гунтис Валнеристан (Латвия) ҡалышып, дүртенсе урында.

✔Силәбе өлкәһенең боронғо башҡорт ауылы Ҡоншаҡта халыҡтар форумы үтте. Осрашыуҙа көнүҙәк, шул иҫәптән милләт-ара толерантлыҡ мәсьәләләре тикшерелде. Форум сиктәрендә биҙәү-ҡулланма сәнғәте күргәҙмәһе һәм башҡорт үҙешмәкәр сәнғәт коллективтарының концерты ойошторолдо. Халыҡтар форумы беренсе тапҡыр Ҡоншаҡ районында былтыр декабрь айында уҙҙы.

✔Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә тарих һөйөүселәр өсөн яңы китап-альбомдар баҫылып сыҡты. Светлана Шитова менән Гүзәл Данукалованың "Тарихи Өфө: Архитектура биҙәлеше сәнғәте" китап-альбомында иҫке ҡаланың матур һурәттәре бирелгән. Китапта йөҙҙәрсә төҫлө һәм аҡлы-ҡаралы фотолар, губерна осоронда ҡаланың үҫеше хаҡында мәҡәлә һәм архитектура, биҙәү эштәренең төрҙәре тураһында ҡыҫҡаса аңлатма-

ҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәтеү башланғыс дөйөм белем биреүҙең базис уҡыу планының вариатив өлөшөндәге сәғәттәр сиктәрендә уҡытыла.

Дәүләт теле булараҡ башҡорт телен өйрәнеү һуңғы йылдарҙа тотороҡло кимәлдә һаҡлана. Быйылғы уҡыу йылында ул 0,9 процентҡа артып, 81,5 процентҡа етте".

Мәғариф учреждениелары квалификациялы кадрҙар менән тәьмин ителгән. Мәктәптәрҙә, гимназияларҙа һәм лицейҙарҙа 568 туған тел уҡытыусыһы эшләй. Милли мәғариф системаһында этномәҙәни йүнәлеш һаҡлана, туған телдәрҙе һәм мәҙәниәттәрҙе үҫтереү буйынса планлы эш алып барыла, туған тел уҡытыусыларын гранттар менән хуплау һәм улар өсөн конкурстар ойоштороу системаһы ла һөҙөмтәле эшләй, туған телдәрҙе уҡытыуҙың методик базаһы камиллаштырыла.

Артабан сығыш яһаусы, ҡала хакимиәтенең Сауҙа һәм хеҙмәт күрһәтеүҙе көйләү идаралығы начальнигы Ольга Завьялова сауҙа өлкәһендә "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР законын тормошҡа ашырыу барышы менән таныштырҙы. Әлеге ваҡытта Өфөлә 8 меңдән ашыу сауҙа предприятиеһы, йәмәғәт туҡланыуы урыны, көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү һәм туриндустрия ойошмаһы бар. Уларҙың 95 процентында яҙмалар ике телдә башҡарылған. Йылына өҫтәмә рәүештә тағы ла 100 яңы объект асыла. Улар асылғанға тиклем етәкселәре менән һөйләшеүҙәр алып барыла һәм предприятиеларҙың атамаһын башҡортса ла теркәү тәҡдим ителә. Бөгөнгә Өфөлә 800 сауҙа предприятиеһы башҡортса атама менән йөрөй. Даими рәүештә райондарҙың сауҙа белгестәре араһында аңлатыу эштәре алып барыла һәм тикшереүҙәр ойоштороla. Йыл дауамында шундай 100 кәңәшмә, 80 рейд үткәрелгән, хаталарҙы төҙәтеү кәңәштәре менән 150 предприятиеға хат ебәрелгән.

"Ҡала дизайны үҙәге" директоры Павел Әмиров белдереүенсә, был өлкәлә хаталар, нигеҙҙә, алтаҡталарҙың килешеүһеҙ урынлаштырылыуы йәки раҫланған эскиз буйынса эшләнмәүенә бәйле. Үҙәккә алтаҡталарҙы урынлаштырыу буйынса йылдың 11 айы эсендә 4657 мөрәжәғәт булһа, 2947 эскиз буйынса ғына ризалыҡ бирелгән.

Ултырышта район хакимиәттәренә һәм комиссия ағзаларына асыҡланған хаталарҙы төҙәтеү, ҡаланы хаталарһыҙ итеү мәсьәләләренә тағы ла нығыраҡ иғтибар бүлергә тәҡдим ителде.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазованың: "...мәктәптәр уҡыусыларҙы микрорайондар буйынса ҡабул иткәнлектән, уларҙа башҡорт милләтенән булмаған балалар һаны ла күбәйә. Әлеге ваҡытта башҡорт мәктәптәрендә башҡорт уҡыусылары 53 процентты алып тора", - тигән һүҙҙәрендә, ысынлап та, баш ҡаланың башҡорт йәмәғәтселеген бик ныҡ борсоуға һалған хәҡиҡәт ята. Ошо көндәрҙә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының киңәйтелгән ултырышында ла һүҙ күтәрелде был хаҡта. Ошо ҡағыҙә арҡаһында баш ҡаланың 140-сы, 102-се, 158-се башҡорт гимназияларында, мәҫәлән, бөтә уҡыусыларҙың яртыһынан саҡ ҡына күберәге - башҡорт, ҡалғандары - рустар, башҡа милләт балалары һәм был уҡыу йорттарында башҡорт теленән башҡа бөтә предметтар ҙа рус телендә алып барылыуы, кластан тыш саралар ҙа рус теленә күсеп бөтөп барыуы тураһында билдәләнде. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бындай хәүефле хәл, йәғни балаларҙы тотошлайы менән рус телендә уҡытыуға күсереү күренештәре республиканың башҡа райондарында һәм ҡалаларында ла күҙәтелә. Бөтөн донъя башҡорттары Башҡарма комитеты ултырышында булған һөйләшеүҙе гәзитебеҙҙең киләһе һандарында уҡырһығыҙ.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

**итәләр. Был турала Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов баш ҡаланың транспорт системаһын үҫтереүгә арналған кәңәшмәлә белдерҙе. Уны республика Президенты Рөстәм Хәмитов алып барҙы.**

Кәңәшмәлә БР Хөкүмәте ағзалары, Өфө хакимиәте вәкилдәре, профилле министрлыҡтар һәм ведомство етәкселәре, шулай уҡ илебеҙҙең һәм сит илдәрҙән саҡырылған ҡала төҙөлөшө өлкәһе экспертары ҡатнашты.

Ирек Ишмөхәмәт улы беренсе категориялы ҡала урамдарында, шул иҫәптән айырым һыҙатта аҙ һыйҙырышлы пассажир автобустар хәрәкәте тыйыласаҡ, тип белдерҙе. Йәмәғәт транспорты туҡталыштарында маршруттың номеры һәм автобустың килеү ваҡыты күрһәтелгән мәғлүмәт таблоһын, башҡа мөһим белешмәләр ҡуйыу планлаштырыла. Өфөләге автобустар хәрәкәтенең ҡалған схемаларын төп магистралдәргә алып барыу сифатында файҙаланыу өсөн үҙгәртергә ниәтләйҙәр. Проектты тормошҡа ашырғандан һуң светофорҙарҙы көйләүсе интеллектуаль транспорт системаһын төҙөүгә күсеү ҡаралған. Бынан тыш, әлеге юл ғәмәлгә ашырылғанда газ-мотор яғыулығы ярҙамында эшләгән автобустар һатып алыу программаһын әҙерләргә мөмкин. Төп магистраль аша үтеүсе маршруттар күсеп ултырыу үҙәген барлыҡҡа килтерә, пассажирҙар икенсе транспортҡа ултырып, кәрәкле йүнәлештә китә ала. Ошо маршруттарға аҙ һыйҙырышлы автобустарҙы йүнәлтеү зарур.

Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов был тәҡдимде хупланы.

## БАЙРАМДЫ ҠАРШЫЛАП...

**2015 йылда Өфөлә 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 70 йыллығына арналған бик күп саралар уҙғарыу планлаштырыла. Бөгөн үк урамдарҙы һәм майҙандарҙы, биналарҙы һәм йорттарҙы, учреждениеларҙы, предприятие һәм ойошмаларҙы оло ваҡиға алдынан байрамса биҙәү концепцияһы әҙерләнә.**

Шуға бәйле ҡала округы хакимиәте баш ҡала халҡына ғаилә альбомдарын ҡарап, унан туғандарының, яҡын кешеләренең хәрби формала, хәрби техника йәки фронтташ дуҫтары эргәһендә төшкән сифатлы фотоларын сканерлап, 1945@ufacity.info адресы буйынса ебәреүҙәрен һорап мөрәжәғәт итә. Фотоға һалдаттың исем-шәрифтәрен, адресын, ҡайҙа, ниндәй ғәскәрҙә хеҙмәт иткәнен һәм герой хаҡында ҡыҫҡаса (2-3 абзац) белешмә яҙырға кәрәк. Иң сифатлы фотоһүрәттәр ҡаланы биҙәйәсәк баннерҙарҙа урын алһа, ҡалғандары Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналып асыласаҡ махсус сайтта урынлаштырыласаҡ. Хаттар 31 декабргә тиклем ҡабул ителә.

*КӨН ҠАҘАҒЫ*

# НИ ХӘЛДӘҺЕҢ...
## Бойондороҡһоҙ дәүләттәр берләшмәһе?

**Ошо көндәрҙә Бойондороҡһоҙ дәүләттәр берләшмәһенең (СНГ) тыуған көнө билдәләнде. Бынан 23 йыл элек РСФСР, Беларусь һәм Украина башлыҡтары 1922 йылғы берләшмә килешеүенең туҡтатылыуы һәм СССР-ҙың тарҡалыуы хаҡында белдереп, Бойондороҡһоҙ дәүләттәр берләшмәһен барлыҡҡа килтергән килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Составына элекке совет республикаларының күбеһе ингән был берләшмә бөгөн ни хәлдә?**

Дөрөҫөн әйткәндә, был проекттың ғүмере бөткән, тиергә була. Әлбиттә, сәйәсмәндәр һәм дипломаттар уның ғәйәт ҙур мөмкинлектәре хаҡында, яуланған ҡаҙаныштар, документтар, килешеүҙәр, саммиттар, перспективалы пландар тураһында оҙаҡ һәм "тәмләп" һөйләүен дауам итәсәк. Тәртип шулай. Сөнки бындай ҙур халыҡ-ара проекттарҙы бер көндә һәм бер һүҙ менән генә ябып булмай. Ләкин трибуна артынан һөйләнгән ялҡынлы телмәрҙәр менән генә "хәле мөшкөл" берләшмәне тергеҙеү бик шикле.

Оптимистар БДБ-ны, элекке СССР-ҙың күпселек республикаларын яңы шарттарҙа бергә туплаясаҡ конфедератив дәүләт ойошмаһы буласаҡ, тип ҡараны. Һәм ҡайһы берәүҙәр, бәлки, ошоға ынтылғандыр ҙа. Ләкин БДБ-ның әлеге ваҡыттағы торошо СССР-ҙың ярылып селпәрәмә килгән төрлө өлөштәрен бергә йыйырға тырышып та, уңышҡа өлгәшелмәгән аҙым булыуын асыҡ күрһәтә. Бөгөнгә тиклем дә әле БДБ составында булған илдәрҙәге төрлө ваҡиғалар был берләшмәнең яҙмышын ҙур һорау алдына ҡуя килде. Мәҫәлән, Урта Азияла дәүләт-ара хәрби конфликттар тыуҙыра яҙған бер-нисә граждандар (гражданский) низағтары, Кавказдағы илдәрҙе граждандар һуғышына йәлеп иткән хәрби бороloштар - барыһы ла Берләшмәнең тотороҡлоғон ҡаҡшатты. Шулай уҡ Карабах конфликты һәм 2008 йылдың августағы Грузия менән Көньяҡ Осетия, Абхазия һәм Рәсәй араһында булған хәрби бәрелештәр ҙә Берләшмә яҙмышында үҙенең юйылмаҫ тәрән эҙен ҡалдырҙы. Бөгөн иһә Украиналағы граждандар һуғышы БДБ-ны тарҡалыуға алып барған аҙымды тиҙләтә генә.

Тарҡау, ағзалары төрлө статуста булған (Украина БДБ-ны ойоштороусыларҙың береһе, ләкин уның Уставына, Төркмәнстан кеүек үк, ҡул ҡуймаған; Украина менән Рәсәй БДБ-ны булдырыу тураһындағы Килешеүҙең Протоколын раҫламаған) һәм бер-береһенең ил сиге ҡайҙан үтеүе хаҡында аныҡ ҡына ҡарарға килә алмаған дәүләттәр союзы бөгөн Бойондороҡһоҙ дәүләттәр берләшмәһен барлыҡҡа килтерә. Халыҡ-ара ойошма, билдәле, бындай шарттарҙа "йәшәй" алмай. Был сәйәси яҡтан да, иҡтисади йәһәттән дә үҙен аҡламай. Шуға күрә, иртәме-һуңмы, сәйәси механизм булараҡ юҡҡа сығасаҡ Берләшмә үҙенең һуңғы битен ябасаҡ, тигән фекерҙә күпселек эксперттар. Тик, нисек кенә булмаһын, күпме ғүмер бергә тын алған, бер-береһе менән тығыҙ бәйләнгән һәм бер-береһенә кәрәк булған илдәрҙең тырым-тырағай йәшәүен күҙ алдына килтереүе ауыр.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Андыҙ

❖ Ныҡ йүткергәндә андыҙ тамырын ҡулланыу яҡшы һөҙөмтә бирә. Андыҙ тамыры урынына үләнен ҡулланырға ла була. Эмаль кәстрүлгә 1 ҡалаҡ кипterелгән андыҙ үләнен һалып, өҫтөнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. 10 минут талғын утта ҡайтҡас, һыуытырға, һөҙөргә, 1 ҡалаҡ бал өҫтәргә (аллергия булмаһа). Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Гастрит

❖ Әселек түбән булғанда гастритты дауалау өсөн юл япрағы һуты ҡулланыла.

❖ 80 грамм балға 15 мл каланхоэ һуты ҡушып, 7 мл прополистың спирттағы төнәмтәһен (10 процентлы) өҫтәп, был һауытты ҡайнар һыулы кәстрүлгә ҡуйып, 30 минут торорға, болғатып торорға. 2-3 ай буйына көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә.

❖ Түбән әселекле гастриттарҙы, ашҡаҙандың сей яраһын, бауыр ауырыуҙарын яңы һығылған кәбеҫтә һуты менән дә дауаларға була. Ашарҙан 30 минут алда ярты стакан йылы һут эсергә. Кәбеҫтә һутын һыуытҡыста 1 тәүлектән артыҡ һаҡларға ярамай.

❖ Хроник гастрит мәлендә көн һайын ас ҡарынға 8 грамм прополис йоторға. Дауаланыу курсы - 1 ай.

### Бронхит

❖ 2 ҡалаҡ бәйғәмбәр тырнағы үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 15 минут төнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр 1-2 ҡалаҡ эсергә.

❖ Түште аҡ шыршы майы менән ыуырға һәм эмаль һауытта ҡайнаған һыуға 3-4 тамсы май тамыҙып, ингаляция эшләргә.

❖ Эмаль һауытҡа 1 стакан һөт ҡойоп, 1 ҡалаҡ шалфей үләнен һалырға. Талғын утта ҡайнатып сығарырға, бер аҙ һыуытырға һәм һөҙөргә. Йоҡлар алдынан йылы көйөнсә эсергә. Дауаланған ваҡытта өшөмәҫкә тырышырға, елдән һаҡланырға кәрәк.

### Коньюктивит

❖ Күҙгә каланхоэ һуты тамыҙырға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҠОЯШ АПАЙ...

## Ай инәй

**Үткән һанда һүрәтләнгән "Күк бүре" йола уйыны элементтары ҡоҙаларҙы ҡаршылау йолаһында ла осрай. Ҡыҙ яғында туй тамамланып, ҡоҙалар егет яғына килергә сыҡҡас, уларға ҡаршы һыбайлы егеттәр китә. Уларҙың ҡулына ҡыҙыл сепрәк бәйләнә. Йола "Ҡот алып ҡаршы сығыу" тип йөрөтөлә. Ҡунаҡтарҙы осратҡас та, егеттәр кире боролоп, сабып китә. Ҡоҙалар үҙ аттарында уларҙы ҡыуып, ҡыҙыл сепрәкте - ҡотто алырға тейеш.**

Был йоланың боронғораҡ варианты Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районында теркәлгән. Егет яғынан килгән ҡунаҡтарҙы ҡаршы алғанда ҡыҙҙың туғандары уларҙың баштарынан бүректәрен алып ҡасырға тырышҡан. Ҡунаҡтар өйгә ингәс, үҙенең бүреген һатып алырға тейеш була. Әгәр ҙә ҡыҙҙың йортонан ҡайтырға сыҡҡанда ҡоҙалар йыйылған халыҡҡа аҡсаны һәм тәмтомдо әҙ һипте, тип иҫәпләнһәләр, был йола туйҙың аҙағында тағы ҡабатланған. Сөнки ҡоҙалар мотлаҡ ҡот ҡалдырырға тейеш.

Әҙәбиәттә ирҙәрҙең баш кейеме бүрек һәм ҡатын-ҡыҙҙың бөркәнсеге "бүре" һүҙе менән бер нигеҙҙән, тигән фараздар бар. Борон башҡорттар бүре йәки төлкө тиреһенән бүрек тегеп кейгән, ә йәнлектәрҙең ҡойроғо бүректең арҡҡы өлөшөнә беркетелгән. Ҡойроҡло был баш кейемен бөгөн сәхнәлә йыш күрәбеҙ. Ошондай уҡ баш кейемдәре сыуаштар, гректарҙа осраған. Бүрәт шамандары, мәҫәлән, бүре башының тиреһенән тегелгән башлыҡ кейгән. Ындай уртаҡлыҡтар башҡа халыҡтарҙа ла бар. Тимәк, бөгөнгә көнгә тиклем һаҡланған йолалар бүре культы менән бәйле һәм унда ҡатнашыусылар боронораҡ ҡыҙыл сепрәк йәки бүрек өсөн түгел, ә уларҙың башындағы бүре битлеге, ә унан да алдараҡ тотембүре өсөн ярыша.

Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары араһында таралған легенда буйынса, уларға бүре юл күрһәтеп, Урал тауҙарына алып килә. Үҫәргәндәрҙең ата-бабалары бүрене "ҡорт" тип йөрөткән. Тимәк, баш бүре артынан эйәреп килгәнгә, халыҡ башҡорт атамаһын йөрөтә. Әйле ырыуы башҡорттары шәжәрәһендә Тажетдин Ялсығол яҙыуынса, Ханты исемле миссионер Мәзинәнән Болғарға тиклем бүрегә эйәреп бара, ул аҙаҡтан әйләләрҙең ырыу башлығы булып китә. Уға юл күрһәтеүсе бүрегә бағышлап, Хантылар нәҫеле башҡорт тип йөрөтөлә башлай. Төркмән-ҡыпсаҡтар (Әлшәй районы) легендаһы буйынса, йәш егет, бүре артынан барып, буласаҡ ҡайныһы менән осраша һәм кәләшле була. Бүре-юл күрһәтеүсе мотивы фольклорҙа күп осрай. Шуға ла бүрене күктә йәшәүсе зат итеп ҡабул иткәндәр. Мифологиялағы донъяның өс ҡатлы вертикаль моделендә бүре (инә бүре) Тәңре менән бер рәттә. Күп халыҡтарҙың космогоник мифтарында Күк "атай" тәшонсәһенә тигеҙ. Шул уҡ ваҡытта, башҡорттарҙа Күк - әсә-ҡатын-ҡыҙ, "анам-һауа", "ҡояш апай", "ай инәй" итеп һүрәтләнә. "Урал батыр" эпосында Ҡояш менән Ай - Самрау батшаның ҡатындары, Һомай - Ҡояш менән Самрауҙың ҡыҙы. Легендаларҙа Венера планетаһы - Зөһрә ҡыҙ, "Етегән" йондоҙлоғо - ете ҡыҙ. Һауа, Көнбикә, Айһылыу, Таңһылыу, Айбикә, Зөһрә, Йондоҙ, Шәфәҡ, Хөмәйрә ("Бәхет ҡошо") кеүек ҡатын-ҡыҙ исемдәре лә бына раҫлай.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова.**
**"Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

МАТУР ХӘТИРӘ

# МИНЕҢ ҠЫҘЫМ БУЛАҺЫҢМЫ?



**Икенсе синыфта минең ҡаты ауырып китеүемә беҙҙең балалар йортондағы "Дамка" исемле этебеҙ сәбәпсе булды. Һәр баланың карауаты янына йәйелә торған, сепрәк кисәктәренән тегелгән кескәй келәмдәрҙе йыйып, пальтомды ла кейеп тормай, урамға сығарып ҡағырға булдым.**

Ул көндө мин дежур инем. Урамға сыҡтым да, келәмдәрҙе ап-аҡ ҡарға һалып та өлгөрмәнем, "Дамка" келәмдәр өйөмөнә килде лә ятты. Эттәргә һелтәнергә ярамай икәнен яҡшы белгәс, берәйһе юҡ микән, тип, тирә-яғыма ҡаранам. Юҡ. Берәй кешенең килеүен көтөргә булдым. Ә "Дамка", рәхмәтле ҡарашын миңә төбәп, ята бирә. Бер аҙҙан эт урынынан тороп, үҙ юлы менән китеп барҙы - келәмдәрҙе йыйып бөткәндәр инде. Келәмдәрҙе тиҙ-тиҙ генә ҡаҡҡылап, бүлмәбеҙгә йүгерҙем. Тик икенсе көнөнә хәлем хөртәйҙе. Дәрестәр бөтөүен көс-хәл менән көтөп алдым да, йоҡо бүлмәһенә ашыҡтым. Барып етеп, ауа яҙып торғанда, "Карауаттарға көпә-көндөҙ ятырға ғына түгел - ултырырға ла ярамай!" тигән ҡағиҙә иҫемә төштө. Шулай ҙа башым эшләне - иң төптәге карауат аҫтына индем дә яттым. Кис еткәнсә, шунда ятҡанмын. Кемдер һепертке менән миңә тейҙе лә: "Бына ул, табылды!" - тип шатланды. Кем тиһәм, Факиһа икән. Бөгөн ул бүлмәлә дежур - иҙән һеперә. Карауат аҫтынан сыҡһам, "Йөҙө ҡып-ҡыҙыл..." тип, тәрбиәсене саҡырҙылар. Кемдер шәфҡәт туташын саҡырҙы. Ул һәм тәрбиәсе апай мине етәкләп, изоляторға алып киттеләр. Шәфҡәт туташы тән температурамды үлсәне лә, "Гәзит уҡы" тип, гәзит тотторҙо. Уҡыйым тип гәзиткә төбәлгәнем, хәрефтәр йүгерешеп, түңәрәккә йыйылып, өйөрөлә башланы. Уҡый алмауымды аңланым. Тәрбиәсе апай, пальтомды алып килеп, мине кейендерә башланы. Йөҙө борсоулы, ә үҙе, йылмайырға тырышып: "Һин ниндәй кәнфит яратаһың?" - тип һораған була. Бик хәлһеҙмен, кәнфит ҡайһыһы ла юҡ бит. Апай һорауын ҡабатлай: "Әйтсе, һин ниндәй кәнфит яратаһың?" Мин, һинә һорау бирәләр икән, мотлаҡ яуап ҡайтарырға кәрәк икәнлеген дә беләм, шуға, ҡылт итеп иҫемә төшкән хәбәрҙе әйтеп ҡотолдом: "Апай, мин түңәрәк кәнфиттәр яратам..."

Урамға сыҡһаҡ, беҙҙе, ул машинаһын мотор өлөшө алғараҡ сығып торғанға үҙ-ара "бульдог" тип атаған ҡыҙыл тәреле машина көтөп тора. Ул машинала бик оҙаҡ барҙыҡ (әле уйлаһам, Красин менән Туҡай урамдары ныҡ алыҫ ара ла түгел һымаҡ). Бальниста ҡабул итеүсе табип апай: "Һинең ҡайһы ерең ауырта?" - тип һораны. Зыр әйләнгән башымды уйлатырға тырышам. Башыма: "Ҙур машинаға ултырып килеп, алыҫ ер үтеп тә, бер ерем дә ауыртмаһа, оят булыр бит", - тигән уй килде. Табип апай: "Һин русса аңлайһыңмы? Ҡайһы ерең ауырта?" - тип ҡабатлай. Һорау бирәләр икән, яуап бирергә тейешһең. Мин ашығып: "Эсем ауырта", - тим. Сөнки беләм: балаларҙың эсе йыш ауыртыусан. Табип апайҙың, күлдәгемде күтәреп: "Ошо ерең ауыртамы? Ошо ереңме? Ошо ереңме әллә?" - тип һорауына: "Юҡ. Юҡ. Юҡ", - тип яуаплайым. "Ә ниңә улай булғас, эсем ауырта, тиһең һуң?" - тигәс, мин апайға илай яҙып ҡарап: "Белмәйем шул..." - тинем.

Мине дауаханаға кейемдәренә кейендереп, ҡабул итеү бүлмәһенең тап-таҙа карауатына һалдылар. Ятыуым булды, йоҡоға талдым. Төшөмдә, имеш, мине тәрән соҡорға төшөргәндәр ҙә, өҫтөн томалап, ябып ҡуйырға йыйыналар икән, тип күрәм. "Томаламағыҙ, томаламағыҙ!" - тип ҡысҡырам. Шул саҡ тимер ҡапҡас асылып китте, тәрбиәсе апайҙың йөҙө күренде, ул: "Мин һинә түңәрәк кәнфиттәр алып килдем", - тип йылмайҙы. Ҡаты ауырыһаң, һаташаһың инде ул. Бер-ике көндән мине дөйөм палатаға күсерҙеләр. Ҡараһам, беҙҙең балалар бакҫаһынан Ғилминур менән Маһинур ауырып, был дауахана ла күптән яталар икән. Уларҙан тыш, бүлмәлә тағы ике ҡала ҡыҙыҡайы бар. Балалар йортонда беҙ бик күмәк, шуға бер-ике баланың юҡлығына иғтибар ҙа итмәгәнмен икән.

Табип апай минең һаулығымды тикшергәндә: "Эсем ауырта", - тип, мине ҡабатлап, көлөп алды. Ә мин, ҡап-ҡара күҙҙәремдә, ап-аҡ тештәремдә йылтыратып йылмайҙым да: "Ул саҡта хәлһеҙ инем бит", - тинем. Дауаланабыҙ, балалар йортонан синыфташтар аҙна һайын күстәнәс алып килә. "Дауалаусы табип талабы буйынса шулай итәбеҙ", - тине Факиһа. 100 грамм май, бер ҡап печенье һәм матур ялтыр ҡағыҙҙарға төрөлгән шоколадлы кәнфиттәр. Ул кәнфиттәрҙең матур атамалары ла бар икән: "Весна", "Чио-чио-сан", "Ласточка" һәм башҡалар. Беҙ Факиһаны ла һағынабыҙ. Дауалау курсы үтһә лә, беҙҙе һаман сығармайҙар. Йөҙҙәребеҙ күҙгә күренеп түңәрәкләнде. Яҙҙар етте. Кескәй баҡсала йөрөп килергә лә рөхсәт бирҙеләр. Бер көн табип апай миңә: "Минең балаларым юҡ шул, ҡыҙым булыр инеңме? Һине өйөмә алып ҡайтыр инем", - тип әйтеп һалды. Был һүҙҙәрҙе ишетеп, телһеҙ ҡалдым. Апай: "Ашыҡмай ғына уйларһың, йәме..." - тине.

Дауахананың кескәй баҡсаһы йәшеллеккә күмелде. Сирень ҡыуаҡтарының күпереп сәскә атыуын тәү тапҡыр күреп, һушым китте. Бер көн санитарка апай миңә: "Һине ҡабул итеү бүлмәһенә табип апай саҡыра", - тип еткерҙе. Табип апай унда яңғыҙы ғына. Ул миңә йылмайҙы ла: "Бөгөн 8 март байрамы, һинә бүләк алып килдем", - тип, бер төргәк тотторҙо. Төргәкте асҡайным, унда балҡып торған алһыу төҫтәге атлас таҫмалар ята. Табип апай: "Ҡап-ҡара толомдарыңды марля менән үрмә", - тине. Шатлыҡтымдың сиге юҡ ине. Апайҙың ҡосағына ташланырға ҡыйманым (ҡосаҡлашыу, үбешеүҙе белмәйбеҙ бит). "Рәхмәт! Рәхмәт!" - тип әйттем дә, бүләгемде ҡыҙҙарға күрһәтергә йүгерҙем. Тик оҙон коридорҙың яртыһын үткәс, "Мин алһыу таҫмалар тағырман, ә ҡыҙҙар?" - тигән уйым аҙымдарымды әкренәйтергә мәжбүр итте. Палатабыҙҙың ишеген асып индем дә: "Ҡыҙҙар, табип апай беҙгә таҫмалар бүләк итте, сәстәрегеҙҙе сиратлап үрерһегеҙ, тине", - тип әйтеп тә бөтмәнем, Ғилминур: "Мин беренсе!" тип ҡысҡырып та өлгөрҙө. Маһинур - икенсе, мин өсөнсө урындарға ҡалдыҡ. Килһә көн табип апай беҙҙең һаулығыбыҙҙы күҙәтергә инһә, тулҡынланып торған көлһыу төҫтәге сәстәрен алһыу таҫмалар менән үреп, ҡурсаҡтай балҡып, Ғилминур йылмайып ултыра. Апай миңә күҙ һирпеп кенә ҡарап алды. Ә мин, унайһыҙланып, башымды түбән эйҙем. Икенсе көн мине тағы ҡабул итеү бүлмәһенә саҡырып алдылар. Ҙур ишекте ҡурҡып ҡына асып индем. Табип апай: "Һеҙ бит, бер кем дә бер кемдән кәм түгел", - тигәнгә күнегеп үҫәһегеҙ. Был хәҡиҡәтте иҫтән сығарғанмын", - тип, миңә яңы төргәк тотторҙо. Асһам, унда ҡып-ҡыҙыл ғына таҫмалар янында зәңгәр төҫтәге сағыу таҫмалар ята. "Был фантик кемгә?" тип уйнап, Ғилминурға - зәңгәр, Маһинурҙың етендәй һары сәстәренә - ҡыҙыл, ә миңә алһыу таҫмалар эләкте...

Тамам һауығып, ҡайтып китергә йыйынып йөрөгән саҡта табип апай беҙҙе оҙатырға сыҡты ла, минең арҡамдан һөйөп: "Йә, ҡыҙым, уйланыңмы?"- тип һораны. Был һүҙҙәрҙе беренсе тапҡыр ишеткәндә "Апай былай ғына әйтәләр" тип, ныҡлап иғтибар бирмәгәйнем (Беҙ кескәй саҡта 1-се һанлы мәктәпкәсә балалар йортонда үҫкәнгә, бала алырға килгән апайҙарҙы күреп, күнегеп бөткәйнек. Барғыбыҙ килмәй. Беҙгә күмәкләшеп уйнап үҫеүе күңеллe). Ә әле табип апайҙың ҡабатлап һорауын ишетеп, бөтөнләй ҡаушап ҡалдым. Тик саҡ ҡына тынып торғас, ҡарашымды ерҙән күтәрмәй генә: "Апай, мин ризалашыр инем дә ул, тик һеҙҙең минең әсәйем түгел икәнегеҙҙе беләм бит..." - тинем. Апай минең сәстәремде йомшаҡ ҡына итеп һыйпаны ла: "Беләһең шул..." - тине. Беҙ ҡайтып киттек. Мин артыма әйләнеп ҡараманым. Әйләнеп ҡараһаң, дауаханаға тағы эләгәһең, тигән һынамыш бар. Бер кемдең дә ҡыҙы булмауың бигерәк ауыр икәнлеген тик студент булғас, эшләп уҡыған ҡына аңланым. Өфөгә каникулға ҡайтҡас, Туҡай урамындағы балалар дауаханаһына барып, ул табип апайҙы табып, рәхмәт әйтермен, тигәйнем, оло йәштәрҙәге санитар апай: "Эйе, бында эшләне ул табип, уң битендә мине бар ине. Тик күп йылдар элек ул икенсе ҡалаға күсеп китте шул", - тине. Ҡайҙалыр алыҫта йәшәһә лә, апай минең рәхмәт хистәремде һиҙәләр, тип уйлайым мин әле лә...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**"Башҡорт ырыуҙары тарихы" серияһының тәүге томдары сыға башлауы тураһында хәбәр иткәйнек инде. Бөтә башҡорт ырыуҙарын да үҙ эсенә аласаҡ күләмле хеҙмәттең йәнәй, балыҡсы, гәрәй (кирәй, гирей) ырыуҙарына ҡараған өс томы сыҡты ла инде, яҡын арала унлар һәм ҡанлы ырыуҙарына арналған томдарҙың тиражы әҙер буласаҡ. Салауат Хәмиҙуллин, Юлдаш Йосопов, Рәфил Аҫылғужин, Рөстәм Шәйхиев, Радик Рысҡолов, Айгөл Ғүмәрова һәм башҡаларҙан торған авторҙар коллективының хеҙмәте халыҡта лайыҡлы баһаһын табып, күптәргә үҙ тамырҙарын белергә тырышыуға, өйрәнә башлауға, аңлауға һәм таныуға этәргес булыр, тип ышанып ҡалабыҙ. Тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостан юлдаш телеканалының билдәле журналисы Салауат ХӘМИҘУЛЛИНдың "Башҡорт ырыуҙары тарихы" серияһы, халҡыбыҙ тарихының ҡайһы бер биттәре тураһындағы яҙмаларын дауам итәбеҙ.**

# ҠАН БУЙЫНСА БАШҠОРТТАР...

## тамырҙарын иҫкә төшөрһәң




### Йәнәй ырыуы башҡорттары

Йәнәй - башҡорт этносының иң боронғо ырыуҙарының береһе. Йәнәй ауылдары бөгөнгө көндә күп ҡалмауына ҡарамаҫтан, уларҙың ата-бабалары Урал-Иҙел буйындағы күп тарихи ваҡиғаларҙа ҡатнашҡан.

XX быуат дауамында йәнәйҙәрҙең күп өлөшө милли үҙенсәлектәрен юғалтып, үҙҙәрен татар тип һанай башлаған. Уларҙың татар милләтенән булыуын нигеҙләү өсөн Ҡазан этнографтары Ҡазан татарҙары араһында типтәр-башҡорт этнографик төркөмө тураһында теория уйлап сығара. Был теория бик бәхәсле, әлбиттә. Һуңғы бер нисә тиҫтә йыл эсендә килеп сыҡҡан үҙгәндәге айырмалыҡтарға ҡарамаҫтан, Кама буйында һәм Кама аръяғында йәшәгән халыҡтың бер өлөшө башҡорттоң боронғо ырыуы - йәнәйҙәргә ҡарай. Яҙма сығанаҡтар буйынса, йәнәйҙәрҙең тарихы IX-X быуаттан башлап 1 мең йылдан ашыу ваҡытты үҙ эсенә ала, ә уның яңы "татар" осоро бер нисә тиҫтә йыл менән генә иҫәпләнә. Бөгөнгө көндә йәнәйҙәрҙең 99,9 проценты Татарстан территорияһында тороп ҡалған. Башҡортостанда улар бер нисә ауылда ғына йәшәй.

### Башҡорт-мадьяр туғанлығы хаҡмы?

Башҡорттарҙың килеп сығыуы хаҡындағы иң иртә һәм иң билдәле теория - ул башҡорттар нигеҙендә угыр компоненты булыуы тураһындағы ҡараш. Был теория Иоанн де Плано Карпини менән Вильгельм де Рубрука исемле кешеләрҙең хеҙмәттәренә нигеҙләнә. Тәүгеһе Рим Папаһы Иннокентий IV монгол ханы һарайында илсе булһа, икенсеһе Франция короле Людовик IX-ҙың илсеһе була. Тәүгеһе үҙенең сәйәхәте тураһындағы яҙмаларында Бөйөк Венгрия хаҡында яҙһа, икенсеһе ошо ерҙә йәшәгән "паскариттарҙың" теле венгр теленә яҡын булыуын билдәләй. Ысынында, ике сәйәхәтсе лә Башҡортостандан үтмәгән. Уларҙың юлы аҫтанығраҡ үткән, тимәк, уларға башҡорттарҙың һәм венгрҙарҙың уртаҡлығы хаҡында һөйләү өсөн төп сығанаҡ булып венгр монахтары Отто менән Юлиандың яҙмалары ғына хеҙмәт итә алған.

Венгр хроникаларынан күренеүенсә, уларҙың тәүге төйәге әлеге йәшәгән ерҙәренән күпкә көнсығыштараҡ була. XIII быуатта Рихард исемле монах Рим Папаһы Григорий IX исеменә доклад яҙа. "Венгрҙар тарихында икенсе, боронғораҡ Венгрия бар, тигән мәғлүмәт табылған.... Унан ете башлыҡ сығып, үҙҙәренең халҡы менән яңы ерҙәр эҙләй башлаған..." Рихард яҙыуы буйынса, XIII быуаттың 30-сы йылдарында венгрҙарҙың тәүтөйәген табыу маҡсатында 4 монах көнсығышҡа юл тота. Уларҙың тик береһе, Юлиан исемлеһе генә кәрәкле урынға барып етә.

"Бөйөк Болғар - бай ҡалалары булған бөйөк һәм ҡеүәтле дәүләт. Әммә бөтәһе лә унда мәжүсиҙәр... Бер ҙур ҡалала Юлиан венгр ҡатынын таба... Был ҡатын Юлианға юл күрһәтә һәм шул юл буйлап ике көн барғандан һуң венгрҙарҙы табырға була, ти. Шулай килеп сыға ла, монах ике көндән Иҙел йылғаһы буйында йәшәгән венгрҙарға килеп юлыға. Тегеләр уны күреп һәм венгр икәнен танып, бик нығ ҡыуаналар... Татарҙар (монголдар) уларҙы яуҙа еңә алмағандар, хатта тәүге яуҙа үҙҙәре еңелгәндәр. Шуға күрә лә уларҙы үҙ-ҙәренә иптәш итеп алып, бергә ҡушылып, 5 дәүләтте ҡырғандар", тип яҙа Рихард Юлиандың яҙмаларына нигеҙләнеп.

Юлиан монгол-венгр яуы хаҡында өҫтәмә мәғлүмәттәр ҙә бирә: "Кумандарҙы яулағандан һуң, монголдар беҙҙең ата-бабаларыбыҙ сыҡҡан Бөйөк Венгрияға юл тота. 14 йыл һөжүм иткәндән һуң, ун бишенсе йылына уларҙы яулап алалар. Уларҙы яулағандан һуң бер йыл эсендә монголдар биш ҙур дәүләтте яулап ала". Плано Карпини менән Рубруканың фекерен ҡабул иткән һәм, венгрҙар менән башҡорттарҙы оҡшаш халыҡтар булған, тип иҫәпләгән Л.Н.Гумилев: "Монголдар менән кумандарҙың (ҡыпсаҡтар) һуғышы оҙаҡҡа һуҙыла, сөнки улар араһында бөгөн Башҡортостан тип аталған этник картә - Бөйөк Венгрия була. Был дәүләт Ағиҙел йылғаһы буйында урынлаша. Монголбашҡорт һуғышы 14 йылға, йәғни Хорезм солтанаты һәм Бөйөк көнбайыш походына ҡарағанда күпкә оҙағыраҡҡа һуҙыла" .

Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк: Юлиан менән Рихард икеһе лә көнсығыш венгрҙарҙы бер тапҡыр ҙа башҡорттар тип телгә алмай, ә был ҡараш үрҙә телгә алынған Карпини, Рубрук, Полонус һығымталары нигеҙендә йәшәй башлай. Ә улар Иҙел буйынан Юлианға ҡарағанда 30 йылға һуңғараҡ үтәләр. Улар, Бөйөк Венгрия менән Башҡортостан оҡшаш булған, тигәндә нимәгә нигеҙләнгәндәр, ул бөгөнгө көнгә тиклем билдәһеҙ булып ҡала. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, был башҡорт халҡының сығышын угыр менән бәйләү хаҡындағы теорияға этәргес була.

Был теорияға Филипп-Иоганн Страленберг (1676-1747) башланғыс һалыусы булып тора. Ул күрше төрки халыҡтары башҡорттарҙы һары истәктәр тип атауҙарынан сығып, башҡорттарҙың угыр тамырлы булыуы хаҡында һығымта яһай. Татищев, Карамзин да ошо уҡ ҡарашта була. Һуңғыһы башҡорттарҙың тәүге теле венгр теле була, һуңынан ғына төрки һөйләштә аралаша башлайҙар, тип яҙа. Уның ҡарашы буйынса, башҡорттар төрки һөйләшкә Батыйҙың яулап алыуҙарынан һуң ғына күсә. Әммә был ваҡытта, XIII быуатта, монголдар үҙҙәре әле ҡыпсаҡ һөйләшенә күсмәгән була, ә болғарҙар бөгөнгө сыуаш теленә яҡын телдә аралаша. Бер һүҙ менән әйткәндә, телгә алынған осорҙа был ерҙәрҙәге хәҙерге төрки телдәргә оҡшаш һөйләштә аралашҡан берҙән-бер халыҡ башҡорттар була. Шулай итеп, башҡорт халҡының килеп сығышының угыр теорияһы Плано Карпини, Бенедикт Полонус, Гильома де Рубруканың бер нәмәгә лә нигеҙләнмәгән шәхси һығымталарына ғына ҡоролған теория икәнлеген әйтергә була.

Әммә ваҡыт үтеү менән бер нисә тиҫтә йыл хакимлыҡ иткән угыр теорияһы яңы асылған фактар менән инҡар ителә башланы. Мәҫәлән, XI быуат филологы Мәхмүт Ҡашғариҙың 1915 йылда Истамбулда сыҡҡан "Диван лөғәт әт-төрк" әҫәрендә башҡорттар алдынғы төрки милләттәр исемлегендә телгә алына һәм уларҙың теле венгр түгел, ә төрки телдә тәшкил итеүе билдәләнә. "Ҡырғыҙ, ҡыпсаҡ, оғуҙ... ҡәбиләләренең берҙәм теле - төрки тел. Уларға йәмәктәр менән башгирттарҙың (башҡорттарҙың) теле яҡын", - тип яҙа Ҡашғари. Ҡашғариҙың мәғлүмәттәре башҡорттарҙың ниндәй телгә ҡарауҙары хаҡындағы һорауҙа шик ҡалдырмай. Сөнки ул Юлианға ҡарағанда ике быуатҡа алдынараҡ йәшәй һәм шул ваҡытта уҡ башҡорттар төркиҙәрҙән һанала. Раил Кузеев: "Боронғо венгрҙар һәм башҡорттар, күренеүенсә, төрлө халыҡтар булалар, тимәк , "башҡорт-мадьяр туғанлығы" теорияһы тарихи-этнографик материалдарҙа раҫлау тапмай", - тип был дискуссияға нөктә ҡуя.

**Азамат САЛАУАТОВ яҙып алды.**
**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

И.И. Лепехин һабантуйҙы һүрәтләп, былай ти: тамашасыларҙан бер ни тиклем ситтә йәш егет йәки ҡыҙ һайғауға ситтәре сигелгән аҡ яулыҡ бәйләп тотоп тора. Бәйгелә иң алдан килгән һыбайлы яулыҡты алырға тейеш. Әгәр ҙә ике һыбайлы бер үк ваҡытта килеп, бер үк ваҡытта яулыҡҡа тотонһалар, бүләкте улар көрәшеп йәки уктан атышып ярышып үҙ-ара бүлешергә тейеш була. XX быуат башында бәйге еңеүселәренә ҡиммәтле бүләктәр бирелә: беренсе килеүсегә - ҡолон, икенсегә - 5 тәңкә аҡса, өсөнсөгә - таҫтамал.

Һабантуйҙың башҡа ярыштары араһында ҡымыҙ йәки һыуға көрпә һалынған табаҡтан ауыҙ менән тәңкә алыу, арҡан тартышыу киң таралған. Арҡан тартышыуҙа ике кеше арҡандан яһалған тоҡондо муйындарына кейеп, арҡанды аяҡ араларынан үткәреп, бер-береһенә арттары менән тубыҡланып тороп тартышҡан. Кем дә кем билдәләнгән һыҙыҡтан икенсеһен тартып сығара, шул еңеүсе була.





Көрәш ваҡытында майҙандан бер ни тиклем ситтәрәк аш-һыу әҙерләнә. Оҙон, ләкин бик тәрән булмаған соҡорға ут яғып, ҡаҙандар ултыртылып, ит бешерелә. **(һүрәт)**. Бер нисә кеше аш бешкәнен ҡарап тора. Икенсе төркөм ҡаҙылыҡ әҙерләү менән мәшғүл була. **(һүрәт)**.

Бешкән ит бишбармаҡ өсөн ваҡ киҫәктәргә турала. Ҡатын-ҡыҙ бишбармаҡ өсөн һалма ҡырҡа. Бишбармаҡ әҙер булғас, барса халыҡ табын янына ултыра. Табын тамамланғас, кис етәрәк өйҙәренә таралалар.

Яландағы табын, көрәш һәм бәйге шулай уҡ ҡорбан байрамында ла, әгәр ул йәйгелеккә тура килһә, ойошторола. Был байрам ваҡытында ла ҡыҙыҡлы ярыштар була. М. Байышевтың һүҙҙәренсә, көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында ҡорбан байрамында йәш егеттәр күрше ауыл йәштәре өсөн мәжлес ойошторғандар. Һарыҡ ите бешерелеп, ҡымыҙ, сәй әҙер булғас, бер саҡырыусы ебәрелгән. Сапҡын ҡунаҡтар килә, тигән хәбәр менән әйләнеп ҡайтҡас, табын әҙерләгән егеттәр барыһы ла һыбай килеш уларға ҡаршы сыҡҡан. Ҡаршы барып, үҙ-ара сәләмләшкәс, егеттәрҙең иң яҡшы атты әйәрләгәне ҡулындағы яулыҡты елберҙәтеп, алдан сапҡан. Бер төркөм яулыҡты тартып алырға тырышһа, икенсе төркөм уны һаҡлаған. Яулыҡты ҡулына төшөрөүсе төркөм еңеүсе булған. Башҡорттарҙа был ярыш ҡот алыу тип аталған. Артабан ҡунаҡтар һый әҙерләнгән йортҡа барып ҡунаҡ булған, йырлап-бейеп күңел асҡан.

Шуға оҡшаш "һоро бүре" ярышын П. С. Назаров та һүрәтләй. Бында яулыҡ урынына кәзә файҙаланылған. Бер кеше һуйылған кәзәне алып сапҡан, башҡалар уның артынан ҡыуа төшкән. Кемдер кәзәнең аяғынан эләктерһә, ике арала тартыш киткән. Әгәр икенсе егет кәзәнең аяғын айырып алып сапһа, бер төркөм уның артынан баҫтыра төшкән. Икенсе төркөм кәзәне һаҡлаған. Был ярыш кәзә өҙгөсләнеп бөткәнгә тиклем дауам иткән.

***✓ Насар, кире тойғолар булды икән, кеше үҙенең аураһын бысрата. Ә организм ошо ауралағы энергия менән туҡлана. Аура бысраҡ икән, тимәк, эске ағзалар ҙа бысрана һәм сирләй башлай.***

# ҠУРҠЫУЫҢДЫ

## тап ошо минуттан үҙеңдә

**Тарих китаптарында, әҙәби әҫәрҙәрҙә башҡорттарҙы ҡурҡыу белмәҫ, ғәййәр халыҡ итеп һүрәтләйҙәр. Хәйер, был сифатҡа миҫал эҙләп әллә ҡайҙа алыҫҡа ҡараш ташларға ла кәрәкмәй: Бөйөк Ватан һуғышында милләттәштәребеҙҙең һыбай килеш танкыларға ҡаршы барыуы, тылдағы рейдтары, дошман амбразураһын күкрәктәре менән ҡаплауҙары һәм башҡа тиңһеҙ батырлыҡтары хаҡында күпте беләбеҙ. Улар менән ғорурланабыҙ, уларға һоҡланабыҙ. Әммә ҡурҡыу тойғоһо йылдан-йыл көнөлдәребеҙҙә ныҡыраҡ яулай бара һымаҡ, хатта үҙ фекере, үҙ һүҙен әйтергә ҡурҡып йөрөүселәр ҙә бар арабыҙҙа. Был нилектән килеп сыға һуң? Һәр кешелә генә түгел, ә һәр тере йәндә булған ҡурҡыу хисе тыумыштан, булмыштан, тәбиғәттән киләме, әллә беҙ уны үҙебеҙ яһалма рәүештә тыуҙырабыҙмы? Ошондай һорауҙарҙы бөгөн педагогика фәндәре докторы Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВҡа һәм космоэнергет Рауфан МОРТАЗИНға төбәйбеҙ.**

**Самат Мөхәмәтйәнов:** Мин был һорауҙы ике өлөшкә бүлер инем - ҡурҡыу һәм ҡурҡаҡлыҡ. Ысынлап та, барлыҡ тереклектә ҡурҡыу сифаты бар һәм беҙ уны бер ваҡытта ла юҡҡа сығара алмайбыҙ. Барлыҡ тере йән эйәләре был ерҙә үҙҙәренең тоҡомон, нәҫелен ҡалдырырға теләй һәм тәбиғәттән һалынған башланғыстарын һаҡлап ҡалыр өсөн бер урынға тупланырға, бер урынға тартылырға тейеш. Әгәр ниндәйҙер сәбәп менән ситкәрәк китһә, уны Йыһандың көстәре юҡҡа сығарырға мөмкин. Шуның өсөн дә һәр тере йән ҡурҡҡан ваҡытта юлдарын өйөмләшеп дауам итәләр. Мәҫәлән, балыҡтар көтөү булып, барыһы бергә үҙҙәренең тыуған еренә китә, береһе лә артта ҡалмай. Берәүһе лә, миңә ошо ерҙә еңелерәк бит әле, тип, шунда ыуылдырыҡ сәсмәй, тәғәйен еренә барып етә. Был осраҡта ҡурҡыу булмай, сөнки барып етергә тейешмен, тигән маҡсат ҡуйылған. Шул уҡ ваҡытта, әсәйҙәр-атайҙар, хатта хайуандар ҙа, ниндәйҙер хәл иткес мәлдә, балаларына хәүеф янағанда, үҙҙәрен йәлләмәйенсә, ғүмерҙәрен хәүеф аҫтына ҡуйып, ҡаһарманлыҡҡа баралар һәм тәбиғи ҡурҡаҡлыҡты еңеп сығалар. Хатта ошо мәлдә ғүмере өҙөлгән кеше үҙенең тормошон дауам итеү көсөн һаҡлап алып ҡалған кешеһенә биреп ҡалдыралыр, тип тә уйлайым.

Ә ҡурҡаҡлыҡ - ул бер мәлдәге, ҡапыл ғына килеп тыуған хәл-торош. Мәҫәлән, мин китеп барғанда ҡапыл алдымдан бер нәмә үтеп китте икән, ти, шул ваҡытта мин ҡапыл артҡа сигенәм. Сөнки ниҙер килеп сығыуына мин әҙер түгелмен, уны көтмәйем. Әгәр хәүефле мәл килеп тыуһа, мин икенсе, хәүефһеҙ ергә күсәм. Бына был сифаттың ҡайҙан килгәнен, ниңә улай икәнен аңлата алмабыҙ, тип уйлайым. Был мәсьәләлә минең шәхси фекерем шул - бында ике сәбәп бар: береһе - Йыһан менән, икенсеһе кешенең үҙенә бәйле.

**Рауфан Мортазин:** Ҡурҡыу тойғоһон алғанда, уны яҡшы тип тә, насар тип тә әйтеп булмай. Ниндәйҙер осраҡта ул кәрәк тә, сөнки ҡурҡыу үҙ-үҙеңде һаҡлау инстинкты нигеҙендә килеп тыуа. Тик торғанда, ҡыҙыҡ өсөн генә боҙло һыуға индең икән, сирләүең, ул ғына ла түгел, үпкәңә сир эләктереүең мөмкин. Бындай ҡыйыулыҡтың кәрәге лә юҡ. Икенсе яҡтан, әгәр кеше һәр саҡ ҡурҡып йөрөй икән, мәҫәлән, эштә - етәксеһенән, өйөндә - иренән йәки ҡатынынан, мәктәптә - уҡытыусыларҙан, урамда - эттәрҙән йәки торға ярамай. Мәҫәлән, әсәһе, бөгөн боҙлауыҡ, балам һаман ҡайтмай, моғайын, юл сатында йығылғандыр, өҫтөнән машина үтеп киткәндер, шуның өсөн шылтыратмайҙыр, тип уйлай икән, бер нисә тапҡыр шулай кире уйлағандан һуң, ысынлап та, шул ваҡиға булыуы мөмкин. Ә был ваҡытта бала, ҡайтыуын да онотоп, урамда уйнап йөрөүе ихтимал.

Уйҙың матдиләшеүе элек-электән билдәле. Хәҙерге осорҙа был бигерәк тә актуаль, сөнки нимә уйлайбыҙ, шунда ҙур соҡорҙо ла "һә" тигәнсе һикереп сығыуы мөмкин. Хатта төлкө уның артынан ҡыумаһа ла, ул саба ла саба. Ул саҡта адреналин организмға насар тәьҫир итмәй. Ә кеше һәр ваҡыт нимәнәндер ҡурҡып йөрөһә, бөйөр өҫтө биҙҙәре адреналин эшләп сығара һәм ул адреналин бөйөрҙәргә бәрә. Шунан инде бөйөр ауырыуҙары килеп сыға, мәҫәлән, таш барлыҡҡа килә. Ташты хәҙерге үҫешкән медицина ваҡлай, бер йылдан һуң тағы таш барлыҡҡа килә. Ни өсөн? Сөнки ҡурҡыу тойғоһо юҡҡа сыҡмаған.

Ә бына кеше йыһан ҡанундарын белеп, уларҙы ихтирам итеп йәшәһә, ул саҡта, бәлки, нимәнәндер ҡурҡыуҙың мәғәнәһе лә юҡ. Сағылыш ҡануны буйынса, беҙ йыһанға нимә ебәрәбеҙ, шул беҙгә кире ҡайта. Үҙеңде һаҡлау инстинкты өсөн ҡурҡыу тойғоһо булырға ла тейеш, әммә һәр ваҡыт нимәнәндер ҡурҡып йөрөргә лә ярамай.

**▸ Ошо һөйләшеү үҙе үк кешене ҡурҡыуға һалмаймы: мәҫәлән, мин ниҙер уйлап, ҡурҡып йөрөйөм икән, ул тойғо ҡайҙа, нимәгә бәрелеп кире ҡайта? Йыһанда бит көҙгө һымаҡ нәмә йәки шаршау кеүек ҡаҡлыҡтырып торған әйбер юҡ...**

**Рауфан Мортазин:** Ысынлап та, йыһанда беҙҙең ҡурҡыуыҙ, эскеселәрҙән, янғыҙлыҡтан һ.б. - бындай тойғолар насар. Кеше ҡайһы ваҡытта, мәҫәлән, белеме етмәгәнлектән ҡурҡа. Бәләкәй бала ҡараңғынан ҡурҡа, әммә үҫә килә ҡараңғынан да ҡурҡмай башлай, сөнки утты яндырһаң, яҡты буласағын белә. Киләсәк тураһында уйлап, туғандары, балалары өсөн ҡурҡырға мөмкин бәғзеләр. Шул уҡ ваҡытта уйҙарҙың матди икәнен дә оно- уҡ тормошҡа аша. Шуға күрә, уй-тойғолар һәр саҡ ыңғай һәм матур булырға тейеш. Насар уй - ул бысраҡ, ҡара энергия, тип иҫбат итә ғалимдар. Насар, кире тойғолар - нәфрәтме, көнләшеүме, ҡурҡыуымы, үпкәләүме - булды икән, кеше үҙенең аураһын бысрата. Ә организм ошо ауралағы энергия менән туҡлана. Аура бысраҡ икән, тимәк, эске ағзалар ҙа бысрана һәм сирләй



башлай. Әгәр ниндәйҙер ағза тирәһендә энергия таҙа икән, ул саҡта ағза ла таҙа була.

Икенсе яҡтан, кеше ҡурҡҡанда уның бөйөр өҫтө биҙҙәре адреналин бүлеп сығара.

Быны ҡуяндар миҫалында аңлатыуы урынлы. Мәҫәлән, төлкөнө күреү менән уларҙа адреналин ҡанға һикерә. Адреналин - ул энергия. Ҡуян төлкөнән ҡасып барғанда башҡа кире уйҙарҙы ҡаҡлыҡтырыр күҙгә күренгән матди нәмә юҡ, әммә йыһандың үҙ ҡанундары бар. Улар ныҡ ҡатмарлы, беҙ уны беләбеҙме-белмәйбеҙме, әммә улар ғәҙел. Кеше ниндәй ғәмәл ҡыла - ул мотлаҡ уның үҙенә әйләнеп ҡайтасаҡ. Кем менәндер әрләшә икән - уның үҙен дә әрләйәсәктәр, кемдер үпкәләтә икән - үҙен дә үпкәләтәсәктәр. Әгәр кеше башҡаларҙы ихтирам итһә, уларҙы рәнйетмәһә, уның үҙенә лә шундай мөнәсәбәт буласаҡ. Насар тойғолар, насар уйҙар беҙҙең ауораны бысрата. Физик тән - ул эфир тәндең күсермәһе. Менталь тән - тойғолар тәне. Ул тәндәрҙең барыһы ла физик тән торошона йоғонто яһай.

***Башҡорттар борон-борондан тәбиғәт балаһы булған, Рауфан әйткәнсә, йыһан ҡанундары буйынса йәшәгән. Етеш йәшәгән, тәбиғәт менән аралашҡан, уның телен аңлаған ата-бабаларыбыҙ ниндәйҙер ҡурҡытыу-тыйыуҙарҙы ҡабул иттеме икән? Ана шул асылыбыҙҙан, тәбиғәттән айырылыу төрлө ҡурҡыу-өркөүҙәргә, фиғелебеҙҙең башҡа төрлө үҙгәрештәренә алып килгәндер ҙә инде ул. Беҙ үҙебеҙгә тәғәйен үҫештә, йыһанда, Ер шары әйләнешендә ниндәйҙер бер көрсөккә килеп еттекме икән әллә ошо һуңғы 50 йыл эсендә? Ни өсөн тигәндә, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарҙа ҡурҡыу көслө. Улар үҙҙәре өсөн түгел, ә яҡындары: бигерәк тә балалары һәм ейәндәре өсөн ҡурҡа һәм төндәрен йоҡлай алмай сыға. Беҙ бит йыһанда үҙебеҙ генә түгел, беҙҙән башҡа әллә күпме йән эйәһе бар һәм уларҙың ҡайһыларылыр йыһан гиҙгәндә беҙгә ҡурҡыу хисен таратып, беҙҙән көс аламы икән, тип тә уйлап ҡуям.***

**Самат Мөхәмәтйәнов:** Башҡорттар борон-борондан тәбиғәт балаһы булған, Рауфан әйткәнсә, йыһан ҡанундары буйынса йәшәгән. Етеш йәшәгән, тәбиғәт менән аралашҡан, уның телен аңлаған ата-бабаларыбыҙ ниндәйҙер ҡурҡытыу-тыйыуҙарҙы ҡабул иттеме икән? Ана шул асылыбыҙҙан, тәбиғәттән айырылыу төрлө ҡурҡыу-өркөүҙәргә, фиғелебеҙҙең башҡа төрлө үҙгәрештәренә алып килгәндер ҙә инде ул.

Беҙ үҙебеҙгә тәғәйен үҫештә, йыһанда, Ер шары әйләнешендә ниндәйҙер бер көрсөккә килеп еттекме икән әллә ошо һуңғы 50 йыл эсендә? Ни өсөн тигәндә, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарҙа ҡурҡыу көслө. Улар үҙҙәре өсөн түгел, ә яҡындары: бигерәк тә балалары һәм ейәндәре өсөн ҡурҡа һәм төндәрен йоҡлай алмай сыға. Беҙ бит йыһанда үҙебеҙ генә түгел, беҙҙән башҡа әллә күпме йән эйәһе бар һәм уларҙың ҡайһыларылыр йыһан гиҙгәндә беҙгә ҡурҡыу хисен таратып, беҙҙән көс аламы икән, тип тә уйлап ҡуям.

**Рауфан Мортазин:** Гүзәл заттарҙа, ысынлап та, балалары һәм тыуасаҡ сабыйҙары өсөн ҡурҡыу тойғоһо ныҡ көслө, сөнки бөгөн йәш ҡатын-ҡыҙҙарҙың 20 проценты бала таба алмай. Был күрһәткес биш процент булғанда уҡ тауыш күтәрергә кәрәк ине лә бит. 20 процент булһа та әле өндәшеүсе юҡ, шулай 50 процентҡа ла барып етербеҙ, ахры. Ә медицинала, беҙ 1 миллион ЭКО операцияһы эшләнек, тип маҡтаналар. Был бит көрсөк! Балалар тәбиғи юл менән яралып, тәбиғи юл менән тыуырға тейеш. Ә әле Рәсәйҙең генофонды аңлы рәүештә юҡҡа сығарыла. Ҡыҙҙар беренсе тапҡыр 13-14 йәштә ҡатын-ҡыҙҙар консультацияһына барҙы икән, уға "Һинә аналыҡ яман шешен профилактикалап, прививкана эшләргә кәрәк", тиҙәр. Әгәр ҙә бындай прививканы өс тапҡыр эшләһәләр, был ҡыҙҙың балаһы булмаясаҡ. Сөнки прививка шундай һөҙөмтәгә килтерә. Һәм тағы: телевизорҙан көн-төн прокладка-тампондар рекламалайҙар. Был әйберҙәр ҙә түлһеҙлеккә алып килә. Шуның өсөн күптәрҙең балалары юҡ. Космоэнергеттар съезында Себерҙән килгән педиатр, медицина фәндәре докторы Кожевникова "Себерҙә һау-сәләмәт тыуған бер генә бала ла юҡ, тотош Рәсәйҙә лә шулайҙыр тип уйлайым", тип белдергәйне. Ни өсөн? Сөнки ауырлы ҡатын-ҡыҙҙарҙың барыһын да хәҙер ультратауышлы аппараттарҙа нурландыралар. Йәнәһе лә, тыуасаҡ баланың енесен асыҡлайҙар. Хатта бер тапҡыр ғына нурландырғанда ла бала 100 проценты менән сәләмәт булып тыуымай. Петр Гаряев үткәргән

***✓ Ҡурҡыу - үҙ-үҙеңде ихтирам итмәү билдәһе, тиер инем. Сөнки асылың, булмышың бөтөнләй икенсе йүнәлештә барырға теләй, әммә кемгәләр яраҡлашыу маҡсатынан, ҡурҡып, үҙеңә-үҙең ҡаршы килергә мәжбүрһең.***



тикшеренеүҙәр УЗИ нурландырыуының кеше организмында ДНК  ептәрен өҙөүен асыҡлай. Ә бит ДНК-ла мәғлүмәт яҙылған. Мәғлүмәт өҙөлгәс, бала нисек сәләмәт булһын?

Һуңғы 5-6 йылда бәләкәй балаларға йөрәктәге физик кәмселек диагнозын ҡуя башланылар. Баҡтиһәң, яңы КТГ тигән аппарат уйлап сығарғандар икән. Уның менән 40 минут буйына донъяға тыуасаҡ яралғының йөрәген тикшерәләр. Бындай тикшереүҙең, әлбиттә, зыянынан башҡа файҙаһы юҡ. Был - алкоголь, наркотик кеүек үк, генофондты аңлы рәүештә юҡҡа сығарыу.

**▶ Ҡурҡмайынса йәшәп булмай, сөнки ҡурҡыу аша кешегә, өлкәндәргә ихтирам сағыла, тигән фекер ҙә йәшәй. Ошоға ҡарашығыҙ?**

**үтеп, тере ҡалып, кисергәндәрен тасуирлай. Шунда ул бараҡтарға овчаркалар эйәртеп килеп ингән, ҡандары ташып торған фашистарҙыңябыҡ, хәлһеҙ әсирҙәрҙең нәфрәтле, ныҡлы ҡарашы менән осрашып, хатта күтәргән ҡулын һуҡмайынса төшөрөп, кире боролоп сығып китергә мәжбүр булыуы тураһында яҙа. Бына ни өсөн шундай шарттарҙа ла кешеләр үлемдең күҙенә тура ҡарарға ҡурҡмаған икән? Ә ни өсөн бөгөн хатта һүҙ әйтергә лә, нимәлер эшләргә лә ҡурҡабыҙ, кеше ни әйтер, тигән фекер менән ҡоралланып, үҙебеҙҙе сикләйбеҙ?**

**Рауфан Мортазин:** Ҡурҡыуҙан алда борсолоу барлыҡҡа килә. Бигерәк тә хәҙерге ваҡытта. Әгәр ошо борсолоуға иғтибар итмәй йөрөһәң, артабан

үҙгәргән осраҡтар бар. Быны фәнни медицина ла раҫлай. Әле күптән түгел Өфөлә лә бер ҡатын үҙенең ейәнсәренең ҡаны бишенсе төркөм булыуын хәбәр итте.  Тимәк, кеше Аллаға ышаныу ғына түгел, Уның бар икәнен аңларға һәм Уны яратырға, ҡурҡыу хисенән сығып, мөхәббәт хисенә инергә тейеш. Йәғни ул Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡмай, ә уны ярата. Быға тиклем бит Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡытып йәшәткәндәр һәм балаларҙы әле лә, Алла бабай башыңа һуға, тип ҡурҡытабыҙ. Артабан инде "Был ярамай, теге ярамай" тип тыябыҙ. Аллаһы Тәғәләнән ҡурҡыу хисе бар, ә уны яратыу хисе юҡ. Беҙ аҡрынлап Алланы яратыу хисенә күсәсәкбеҙ. Шундай ваҡытҡа килеп еттек. Әгәр кеше Алланы яратыу хисенә күсеп, үҙенең ҡол түгел икәнлегенә ышанһа,

һәм һәр нәмәне ихтирам итергә өйрәнергә кәрәк. Бер нәмәгә лә үпкәләргә, башҡаларҙы әрләргә ярамай. Нимәнән башларға, тигәндә, шундай кәңәш: үҙегеҙҙең йөрәкте күҙ алдына килтерегеҙ, йөрәгегеҙ уртаһында мөхәббәт хисен туплағыҙ. Ошо мөхәббәтте бәләкәй ҡояш-шар кеүек итеп күҙ алдына килтерергә лә, уның йылыһынмы, яҡтылығынмы, тирбәлешенме тойорға кәрәк. Йөрәктә мөхәббәт ҡояшы туплағас, уның нурын һәм йылыһын башҡаларға өләшергә өйрәнеү зарур. Быны өсөн мөхәббәт-ҡояштың нурҙарын ерҙең уртаһына ебәреп, бөтөн ерҙе мөхәббәт менән тултырырға кәрәк. Унан тәнегеҙҙе көсөргәнештән арындырып, ерҙән кире килгән тулҡынды һиҙергә тырышығыҙ. Ошо күнекмәне көн һайын эшләһәгеҙ, һеҙ үҙгәрә,

# ЕҢЕР ӨСӨН...

## үҙгәртә башла!

**ғыла, тигән фекер ҙә йәшәй. Ошоға ҡарашығыҙ?**

**Самат Мөхәмәтйәнов:** Етәксеңдән, үҙеңдән көслөрәк кешенән ҡурҡыу, мәҫәлән, бер нисек тә ихтирам билдәһе була алмай. Сөнки һин ул кешенең һинең кеүек үк йән эйәһе, Аллаһы Тәғәләнең яратҡан балаһы икәнен белеп тораһың, әммә уның биләгән вазифаһынан йәки көсөнән ҡурҡаһың, уның бер һүҙе йәки бер хәрәкәте яҙмышыңды хәл итеүе мөмкин, тип уйлайһың. Ә был идара итеү өсөн иң ҡулай алым: ҡурҡаҡтар, бахырҙар, ҡулайлаша белеүселәр менән идара итеү еңелерәк. Бөгөнгө көрсөк заманында барлыҡ кешелә эштән ебәрелеү, килем сығанағынан яҙыу ихтималлығы ҙур хәүеф уята. Һәм үҙенең эш урынын һаҡлап ҡалыу өсөн кеше ниндәй генә сүрәткә кермәй.

Икенсе яҡтан, ҡурҡыу - үҙ-үҙеңде ихтирам итмәү билдәһе, тиер инем. Сөнки асылың, булмышың бөтөнләй икенсе йүнәлештә барырға, телең бөтөнләй икенсе һүҙҙәр һөйләргә теләй, әммә кемгәләр яраҡлашыу маҡсатынан, дөрөҫөн әйткәндә, ҡурҡып, үҙеңә-үҙең ҡаршы килергә мәжбүрһең. Һөҙөмтәлә кеше үҙ-үҙе менән килешмәй башлай, үҙе менән көрәшә, үҙен эстән ашай һәм былар барыһы ла ҡәнәғәтһеҙлек булып, теге йәки был ағзала үҙен һиҙҙертә башлай. Был хаҡта Рауфан әйтеп китте инде.

**▶ Вәли Бикташев тигән ағайҙың "Мы старше своей смерти" тигән китабы бар. Ул үҙе фашистик концлагер аша**

ҡурҡыу тойғоһо барлыҡҡа килеүе мөмкин. Ни өсөн шулай һуң? Сөнки 1987 йылдан алып Ерҙең тирбәлеше күтәрелгәндән-күтәрелә бара. Был хаҡта, шулай уҡ ерҙең магнит үҙәге үҙгәреүе тураһында ла элек-электән мәғлүмәт бар ине. Хәҙер ғалимдар Ер тирбәлеше 8 процентҡа үҙгәргән, ти. Шул уҡ ваҡытта ныҡ һәләтле балалар тыуасаҡ, тип тә иҫкәрткәйнеләр. Бөгөн шундай бала-

һүҙ көсөн кире ҡайтарһа, ул аңы менән төрлө мөғжизә тыуҙыра аласаҡ.

**▶ Минеңсә, ҡурҡыу хисе кешенең үҙ-үҙенә ышанысы булмауҙан килеп тыуалыр. Ышаныс булһын өсөн, бәлки, тәүҙә үҙеңде яратырға өйрәнергә кәрәктер. Үҙеңде яратырға өйрәнһәң, Аллаһы Тәғәләнең бер өлөшө булараҡ, Алланы ла, башҡаларҙы ла  яратасаҡбыҙ.**



***Сөнки 1987 йылдан алып Ерҙең тирбәлеше күтәрелгәндән-күтәрелә бара. Был хаҡта, шулай уҡ ерҙең магнит үҙәге үҙгәреүе тураһында ла элек-электән мәғлүмәт бар ине. Хәҙер ғалимдар Ер тирбәлеше 8 процентҡа үҙгәргән, ти. Шул уҡ ваҡытта ныҡ һәләтле балалар тыуасаҡ, тип тә иҫкәрткәйнеләр. Бөгөн шундай балалар бар. Беҙ мәктәптә уҡығанда, ҡандың дүрт төркөмө бар, тип өйрәнә инек, хәҙер ғалимдар бишенсе һәм алтынсы төркөмдәрҙең дә булыуын билдәләй. 5-6-сы төркөм оло кешеләрҙә юҡ, бәләкәй балаларҙа ғына бар. Әгәр ҡатын-ҡыҙ ауырлы ваҡытта УЗИ үтмәй, балаларға прививкалар эшләнмәй икән, уларҙан тыуған балаларҙың ҡаны 5-6-сы төркөмгә тап килә. Тимәк, яйлап ҡына беҙҙең бишенсе раса алтынсы расаға күсә бара. Оло кешеләрҙең дә ҡан составы үҙгәргән осраҡтар бар. Быны фәнни медицина ла раҫлай. Әле күптән түгел Өфөлә лә бер ҡатын үҙенең ейәнсәренең ҡаны бишенсе төркөм булыуын хәбәр итте.***

лар бар. Беҙ мәктәптә уҡығанда, ҡандың дүрт төркөмө бар, тип өйрәнә инек, хәҙер ғалимдар бишенсе һәм алтынсы төркөмдәрҙең дә булыуын билдәләй. 5-6-сы төркөм оло кешеләрҙә юҡ, бәләкәй балаларҙа ғына бар. Әгәр ҡатын-ҡыҙ ауырлы ваҡытта УЗИ үтмәй, балаларға прививкалар эшләнмәй икән, уларҙан тыуған балаларҙың ҡаны 5-6-сы төркөмгә тап килә. Тимәк, яйлап ҡына беҙҙең бишенсе раса алтынсы расаға күсә бара. Оло кешеләрҙең дә ҡан составы

**Самат Мөхәмәтйәнов:** Әле беҙ кешенең ни өсөн ҡурҡа икәнен асыҡларға, был һорауҙың төбөнә "тоҙ ҡойорға" маташабыҙ. "Һинең ҡурҡҡаныңды беләбеҙ, һин ҡурҡма", тибеҙ. Ә бит ошо ҡурҡыуҙан арындырыр өсөн тәүҙә уны кәметергә, һуңынан бөтөнләй юҡҡа сығарыу өсөн нимәлер тәҡдим итергә тейешбеҙ. Әйҙәгеҙ, ҡурҡыу тойғоһон еңһен өсөн кешегә ниндәйҙер кәңәш бирәйек.

**Рауфан Мортазин:** Тәү сиратта беҙҙе уратып алған мөхиттең тере булыуын аңларға

мөхәббәттең нимә икәнлеген аңлай башлайһығыҙ. Ошоно аңлағас, беҙҙе уратып алған барлыҡ мөхитте аңларға була. Ошо ябай ғына күнекмәне ҡабатлап, үҙеңде үҙгәртергә мөмкин.

**Самат Мөхәмәтйәнов:** Ә мин былай тим: йоҡлар алдынан тыныслан, барлыҡ арыу-талыуҙарыңдан арын, кире хис-тойғоларыңды ситкә ҡуйып тор ҙа, күкрәк уртаһында ҡояш яндыр. Ул ҡояш, бәлки, беренсе тапҡырҙан янмаҫ та, ике көндә лә яндыра алмаҫһың. Йөҙ көндә лә яныуы ике-

ле. Ә бына йөҙ ҙә беренсе көндә ул ҡояш мотлаҡ балҡып китеүе мөмкин.

Тағы шул. Һин гел бер төрлө генә йәшәйһең һәм бер төрлө генә уйлайһың. Шуның өсөн бөгөндән башлап, мәҫәлән, битеңде йыуыу тәртибен үҙгәрт. Теләйһеңме, теләмәйһеңме, кискеһен һәр ваҡыт тешеңде таҙалайһың бит инде. Бөгөндән уң ҡулың менән түгел, һулы менән атҡар был ғәмәлде. Үҙеңде яйлап ҡына, ябай ғына ғәмәлдәр башҡарып,  үҙгәртә башларға тейешһең. Быға тиклем уң ҡулың менән генә яҙһаң, бөгөндән һул ҡул менән яҙа башла. Шул ваҡытта уң яҡ ярымшар хәрәкәткә килә һәм әүҙемләшә башлай. Был ысул һинән икенсе кеше яһаясаҡ. Әммә был бер көндә өлгәшә торған үр түгел, уларҙы оҙаҡ, кәм тигәндә өс ай эшләргә кәрәк. Шулай яйлап быға тиклем эшләп өйрәнгәндәреңдән ҡотолорға кәрәк. Эйе, бәлки, элеккесә йәшәү уңайлыраҡтыр, әммә элеккесә йәшәп, икенсе төрлө һөҙөмтәгә өлгәшеү мөмкин түгел. Сөнки элек  эшләгәндәреңде йылдар дауамында автоматик рәүештә ҡабатлау һине ошо кимәлгә, ошо дәрәжәгә алып килеп еткергән бит инде.

Мин көн һайын иртән йүгерәм. Сәләмәтлек өсөн түгел, ҡасандыр үҙем булдырған рухты, ихтыяр көсөн, үҙемә ышанысты кәметмәҫ өсөн генә булһа ла йүгерәм. Бынан егерме йыл элек беренсе тапҡыр йүгерергә сыҡҡайным. Бөгөн дә сыҡтым. Рухың, ихтыяр көсөң булһа, һин ҡурҡмайһың. Был донъяға йылмайып ҡарайһың. Көлмәйһең, ә йылмайып ҡарайһың. Сөнки һин был донъяға килдеңме - килдең, үҙеңде үҙгәртергә хәлеңдән килгәнсе тырыштыңмы - тырыштың, үҙгәртеү килеп сыҡмаймы  - юҡ, килеп сыҡмай. Әммә шулай булыуға ҡарамаҫтан, һин иртәнсәк тораһың да, тағы ла йүгереп китәһең. Тирә-яғыңдағылар, бәлки, һиңә алйот, тип ҡарар, был ғәмәлдәрең, бәлки, һиңә бер нәмә лә бирмәҫ, ләкин үҙеңде еңеп, 20 минут йүгергәндән һуң, башыңда кире уйҙар ҙа ҡалмай, күңел күтәрелә, бөтөнләй икенсе кешегә әйләнәһең...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмәне ҡурҡыу темаһынан башлаһаҡ та, һүҙ йомғағы барыбер ҙә үҙеңде үҙгәртеүгә барып тоташты. Бөгөн ниндәй генә әңгәмә ҡорма, ҡатнашыусыларҙың һәр кеме "Ғәмәлдәрҙе үҙебеҙҙән башлайыҡ" тип әйтеп һала. Ысынлап та, ниндәйҙер етешһеҙлегебеҙ,  кәмселегебеҙ йәки үҙебеҙҙе ҡәнәғәтләндермәгән сифатыбыҙ бар икән, быға бит эргә-тирәләгеләр түгел, ә үҙебеҙ ғәйепле һәм сәбәбе лә үҙебеҙҙә. Шуға ла яһалма ситлектәргә ҡыуалап индереү маҡсатынан махсус уйлап табылған ҡурҡыу һәм ҡурҡаҡлыҡ тойғоһонан арыныр өсөн үҙебеҙҙе үҙгәртә башларға кәрәктер. Яңы йылдан да, иртәгәнән дә түгел, ә бына тап ошо минуттан!**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**




Күҙ йәштәренә быуылып, тауышһыҙ һулҡылдап илай-илай атланы Ғәлиә. Битенә, сикәләренә һарлығып, игтибарҙы үҙҙәренә йүнәлтергә теләгән ҡар бөртөктәрен тойманы ла, күрмәне лә, гүйә. Ерҙең тик аҡлыҡтан, тик сафлыҡтан ғына торған был мәлендә ҡыҙ өсөн бөтә донъяны һөрөм баҫҡан, күңел күгән мәңге асылмаҫтай ҡара болоттар ҡаплап алғайны.

Подъезд ишеген магнит аҫҡысы менән асып ингәс, баҫҡыстарҙан күтәрелергә хәле етмәйенсә, ярымҡараңғыла һәрмәнеп килеп стенаға терәлде. Ҡалтыранған ирендәре субырлап аҡҡан йәштәрен йота-йота бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатланы: "Нишләп яраттың мине был донъяға, Аллам? Нишләп тыуҙырҙың..." Тик уға аулаҡлап күңелен бушатып алырға ирек бирмәнеләр, өҫтәге майҙансыҡта кемдәрҙер бар булып сыҡты, бына улар һаҡ ҡына итеп үҙара һөйләште:

- Ишетәһеңме, Шакир ағай, берәү илай әллә?..

- Бесәйҙер... Бында подъезд тулы эт тә бесәй...

Тынып ҡалдылар. Ғәлиә иһә үкһеүен быуырға тырышып, үҙ-үҙе менән көрәште.

Өҫтәгеләрҙең берәүһе тағы телгә килде:

- Ысынлап илайҙар, ахыры... ҡана ҡарайым әле.

Теге әҙәм аҫҡа ынғайлауға, ҡыҙ өркән илек ише баҫҡыстарҙан үргә йүгерҙе. Өс ҡатты һә тигәнсе елеп үтеп, дүртенсе ҡаттың баҫҡыс майҙансығында тегеләрҙең алдына килеп тә баҫты. Уға ярҙам ҡулы һуҙырға теләгәне бер ҡатты ла төшөп етә алмаған икән. Аптырарға ла түгел. Былар бит уның күршеһе - мәңге айыҡмаҫ Шакир ағайҙың дуҫтары. Үҙе кеүек үк һәр ваҡыт йә иҫереп, йә баш төҙәтергә эҙләп йөрөгән әтрәгәләмдәр. Күршеһен күргәс, сүгәләп ултырған Шакир ағайҙың былай ҙа ҡәнәғәт йөҙө тағы ла яҡтыра төштө:

- Аһ-аһ, ҡарындаш, кем тиһәк әле, һин икән дә...

Тик Ғәлиәгә был алсаҡлыҡ артыҡ тәьҫир итмәне:

- Тағы подъезда һабантуй үткәрмәксеһегеҙме?..

- Тартырға ғына сыҡтыҡ, ҡарындаш, бына, ҡустылар килгәйне ҡунаҡҡа...

- Ҡунаҡтарығыҙ бөтмәҫ! Тауыш сығарһағыҙ, бер һүҙһеҙ полиция саҡырам, һеҙҙең арттан подъезд таҙалап йөрөү етте!

- Ярай-ярай, ҡарындаш, өн дә сығармабыҙ, хәҙер инәбеҙ, хәҙер... - күршеһенең солтан хеҙмәтсеһеләй баш эйә-эйә сөсөләнеп һөйләнеүенә игтибар ҙа итмәҫтән, ҡыҙ сумкаһы төбөнән аҫҡыстарын соҡоноп табып, үҙ фатирын асты, бары һуңғы һүҙҙәр генә ишеккә ҡыҫылып өҙөлдө.

- Был минең күршебикәм ул, ҡустылар, уҡытыусы, институтта уҡыта, бик етди ҡыҙыҡай, шулай ҙа һәйбәт ул, һәйбәт...

Ғәлиә туп-тура залға үтте һәм өҫтөндәге ҡиммәтле тунын һаҡһыҙ сисеп, балаҫҡа ырғытып, итектәрен дә һалып бер яҡҡа бырағытырғас, бөхтә ябыулы диванына ауҙы ла, фатирындағы ҡотһоҙ яңғыҙлыҡтан, һалҡынлыҡтан һаҡланырға теләгәндәй, бесәй балаһы шикелле йомарланды. Бәлки, шулай итһә, был ҡотолғоһоҙ ауыр тойғолар, йөрәген тырнаған бахырлыҡ, кәмһенеү, түбәнһетелеү хисе уны ҡалдырыр?

...Элекке көн кис әхирәтенә ҡуна барғайны. Дөрөҫөрәге, әхирәте Гөлфиә телефондан балаларын алып ҡалып тороуҙы һорағайны, "һорағайны" тигәне лә, ғәҙәттәгесә, "Ғәлиә, балалар һиңә ҡала инде" йәки "Йортта ҡалдырырға һинән башҡа кеше юҡ", ул да булмаһа, "Һинән башҡаға ышаныс юҡ инде, әхирәт" тигәнерәк үтенескә ҡарағанда хәл ителгәндә хәбәр итеү генә була ул. Ул арала әхирәтенең ире Гәрәй машинала килә һалып елтерәтеп алып та китте. Дуҫтарын туйға саҡырғандар икән. Ғәлиә был йортта тәүге тапҡыр ғына донъя көтөп ҡалмай, шунлыҡтан, әхирәтенең күрһәтмәләрен тыңлап та тормаҫтан: "Йә-йә, сыға һалығыҙ, баланы илатаһығыҙ атыу", - тип, тегеләрҙе ашыҡтырып йыйындырып та ебәрҙе. Иркен ҡалғас, башта таныһығы ҡаңғансы ике бәләкәсте һөйҙә, уйнатты, унан мәктәп уҡыусыһы булған өлкәненең дәрестәрен тикшереп сыҡты. Бергәләшеп, гөрләшеп, киске аш ашап, тәнәйҙәрҙе ҡуйынына һалып еҫкәп кенә йоҡлатты. Икенсе көн дә төшкәсә ваҡытты уйын-көлкө менән үткәрҙеләр. Әнер ҡуйырыуға ата-әсә ҡайтты. Арманһыҙ булып арығандар, ир кеше арыуыҡ һуҡмышлап алған. Балаларҙы үҙ бүлмәләренә ебәргәс, өсәүләшеп туй мажараларын һөйләшеп, табынлап алдылар. Яйлап һүҙҙең осо етеп килгән Яңы йыл байрамына барып ялғанды. Гөлфиә, йылдағыса, әхирәтен байрамды үҙҙәре менән бергә ҡаршыларға саҡырҙы. "Балаларға һинең беҙҙә булыуың үҙе байрам. Яңғыҙың нишләп ултыраһың? Әйҙә, кил, бергә-бергә күңелле булыр", - тип өгөтләне. Шул ваҡыт балалар бүлмәһенән сар-сор иткән тауыштар килеп етте. Һуңғы көндә әсәй роленә ныҡ инеп киткән Ғәлиә "Ой, бәләкәстәр нуғыша!" тип торҙо ла йүгерҙе. Ысынлап та, ике һәм өс йәштәрҙәге сабыйҙар бер ҡурсаҡты бүлә алмай ыҙғыша икән. Уйынсыҡтар йәшнигенән шундайыраҡ тағы бер ҡурсаҡ табып алып, уның сәс-башын рәтләп, маҡтап-маҡтап ҡыҙҙарҙың берәүһенә тоттороп ла, аш бүлмәһенә килешләй, эстән Гәрәйҙең ярайһы тауышланып һөйләнгәненә ҡолаҡ һалып, туҡтап ҡалды.

- Нимәһен тағы быныңды саҡыраһың ул? Нишләп мин байрам һайын уға ҡарап ултырырға тейеш? Исмаһам, ире булһа икән!

- Һуң, Гәрәй, - Гөлфиә ирен тынысландырмаҡсы, - ул бит яңғыҙ...

- Уның яңғыҙлығында минең ней эшем бар? Әйҙә, улайһа, яңғыҙ булғандарҙың барыһын да йый. Йүнле булһа, ултырмаҫ ине әле.

- Балалар үҙен ярата, ураған һайын көн дә төшөп тора. Булмаған ирҙе ҡайҙан алһын инде...

- Ир менән йәшәр өсөн дә баш кәрәк, үҙең шулай тиергә яратаһың түгелме?

- Был осраҡта әйтмәйем бит.

- Ҡыҫҡаһы - все! Яңы йылда мин һинең яңғыҙ бисәңә ҡарап ултырырға теләмәйем! Ҡарарлығы булһа икән. Парлы берәйҙәрен саҡырабыҙ.

Гөлфиә иренә уны яҡлап нимәләр әйткәндерме-әйтмәгәндерме - Ғәлиә уларҙы артабан тыңлап тора алманы. Ишеткәндәренән яман эш өҫтөндә тотолған шикелле булып ҡалтыранып, ҡабалана-ҡарһалана шунда ишек төбөндә торған итектәрен кейҙе лә, элгестән йолҡоп алып тунын ябынғас, башлығын эҙләп тә тормаҫтан, тышҡа атылды. Уның сығып ҡасҡанын өйҙәгеләрҙең береһе лә аңғарып өлгөрмәне.

"Байрам һайын яңғыҙ бисәңә ҡарап ултырмайым", тейме шул Гәрәй, Уйлап ҡараһаң, дөрөҫ әйтә бит. Нишләп улар көтөп алған Яңы йылдарын минең менән үткәрергә тейеш? Үҙҙәре кеүек үк парлы, балалы ғаилә менән ултырһалар, күпкә күңеллерәк түгелме ни? Гөлфиә шул мине йәлләп саҡырған булалыр ҙа, мин - иҫәр, барыр ерем булмағас, һап итеп бара ла етәм инде..."

"Ҡарар ере булһа икән", тип тә дөрөҫ әйтә инде Гәрәй. Ҡарар ғына ере юҡ шул. Табаҡ битле тарҗыҡ танау ҙа, аран ауыҙ. Көлһә, тештәре ҡыйыш, күҙҙәре иһә иламаһа ла шешмәкләнеп, ҡабаҡһыҙ булып тора. Буйға ла бүкән шикелле бит ул, күпме генә аҙыҡ-түлекте самалап ашап, диеталар тотоп маташһа ла, тәне тын өрҙөргән кеүек тығыҙ, аяҡ-ҡулдары мускуллы, көслө..."

"Тимәк, башҡа ғаиләле дуҫтары ла уны, Гәрәйҙәр кеүек, кәрәк булғаны өсөн генә тоталар, саҡыралар. Ә башҡа нимәгә хәжәте бар уның - утыҙ бишкә еткән ямаҡ ҡарт ҡыҙҙың. Әхирәт тип йөрөгәндәренең ирҙәренә Ғәлиәнең аҡылы ла, физика фәндәре доценты булыуы ла кәрәк түгел, ә уның янында үҙҙәре менән аралашырлыҡ ире булыуы зарур. Шул булмаған ирҙең улар менән өҫтәл артында араҡы һемереүе йәки балыҡҡа йөрөүе, бик булмаһа, эшкинмәгән машиналарын соҡоп, тәмәке көйрәтеп гәп һатып ултырыуы һан!"

...Илап-көйөп ята торғас, ойоп киткән. Ишегенә "гөрҫ" итеп нимәлер килеп бәрелгән тауышҡа ҡурҡып уянып китте. Бүлмә дөмҡараңғы, теге көн фатирынан кис сығып киткәс, ҡорғандарын да асмаған. Ул арала ишеккә тағы ла бер һуҡтылармы, типтеләрме, әммә аңлайышһыҙ ҡысҡырыштылар.

"Ну, был алкаштар!" Ғәлиә утын ҡабыҙып та тормаҫтан, барып ишеген асып ебәрҙе лә, аяҡ аҫтында көрмәкләшеп ятҡан ирҙәргә ҡарап:

- Торогоҙ, давай! Юғалығыҙ күҙемдән! Шакир ағай, мин һиңә нимә тип әйттем?! - тип тауышын баҫа төшөп ҡаты өндәште.

Һуғышыусылар көрмәкләшеүҙән туҡтаһа ла, тора һалып баҫырға ашыҡманы, хәлдәре лә юҡтыр инде. Уларҙы айырып маташыусы, бая ҡайҙалыр илаусыға ярҙамға бармаҡсы булған йәшерәге, теге икәүҙе тартҡылап торғоҙҙо. Ғәлиә үтә тишерҙәй булып әлеге иргә төбәлде:

- Быныһына нимә ҡалмаған, йәш башы менән бабайҙар араһында эсеп йөрөмәгә!

Йәш ир унайһыҙланғандай итте, аҡланырға теләп, нимәләр әйтергә уҡталды ла, бары ауырлыҡ менән ыңҡылдатып тын юлына килеп ингән төйөрҙө генә йота алды. Унан ҡыҙҙың утлы ҡараштары аҫтында иптәштәрен алмаш-тилмәш һөйрәкләп, ҡаршылағы фатирға ташыны. Ишек алдындағы майҙансыҡ бушауға, Ғәлиә лә шап иттереп ишеген япты. Тик кире урынына етеп тә өлгөрмәне, һаҡ ҡына итеп тағы шаҡыныл ар. Быға ла аптырамана хужабикә. Ул бит эскесе күрше менән йәшәй. Шунлыҡтан, төнгә һәм көндөҙгә әллә ни төрлө сәйер хәлдәргә, ғауғаларға, ыҙғыш-һуғышҡа һәм бурысҡа аҡса теләнселәүҙәргә күнеп бөткән. Әле лә, Шакир ағаһының бик ныҡыш кеше һәм уны ишетмәмешкә һалышыуҙың файҙаһыҙ икәнлеген белгәнгә, боролоп килеп һелкетә тартып ишекте асты ла:

- Шакир ағай, үтенәм!.. - тип башлағайны ғына, алдында йыуаш йылмайып торған баяғы ирҙе күреп, албырғап китте.

- Ғәфү итегеҙ... Ней, һеҙҙән ғәфү үтенәйем тигәйнем... баяғы өсөн, - ир кеше уңайһыҙланыуҙан әле бер, әле икенсе аяғына аушаны.

Күршеһе ғауға сығарғанының иртәгәһенә һәр ваҡыт бына ошолай килеп тора ла, бөҙрә китап һүҙҙәре менән ғәфү үтенә, инде лә мәңге улай итмәҫкә ант итә, тағы ла шулай ҡылана, үҙен әллә нимәләр эшләтергә лә рөхсәттәр бирә лә... өс-дүрт көндән шундай уҡ мажараны ҡабатлай. Ҡыҫҡаһы, Ғәлиәгә бындай хәл дә бик таныш һәм өйрәнелгән.

- Ай, Аллам! Шайтанымамы миңә һинең килеп тороуың! Теләһә нишләгеҙ, хет суҡынып ултырығыҙ, тик минең ишек төбөндә түгел. Аңлашылдымы?..

- Эйе-эйе, тик шулай ҙа ғәфү итегеҙ инде, һылыу.

- Мин һеҙгә бер ниндәй ҙә һылыу түгел.

- Бәлки... Һеҙ бая илай инегеҙ шикелле...

- Вот это не твое дело! Алкаш! - Асыуынан сәсәп китә яҙған ҡыҙ тегенең танауы төбөндә ишеген шап иттерҙе лә, ғәрләгенән шунда уҡ һығылып төшөп илап ебәрҙе. "Алкаш! Хайуан! Хәҙер ошо эскесегә генә көләргә ҡалған..."

- Уф, Аллам, нишләп кенә дөмөктөрмәйһең... Нишләп кенә тыуҙырҙың был донъяға... - тип таҡмаҡлай-таҡмаҡлай буҙланы ул. Аҙмы-күпме шулай ултырып, бер аҙ ярһыуы баҫылғас та торорға ашыҡманы әле. Был фатирҙа ҡайҙа, күпме, нисек ултырһа ла, ятһа ла, торһа ла бер кемгә ҡамасауламаясаҡ! Сөнки бында уның үҙенән башҡа йән әҫәре юҡ!

- Һылыу... - ишек артынан һаҡ ҡына әйтелгән был һүҙҙән Ғәлиә йыландан ҡасҡандай тайшанды, йәһәт кенә усы менән танауын һыпырып, тауышына ҡатылыҡ бирергә тырышып:

- Кем бар унда? - тип өндәште.

- Мин, һылыу, Ғаяз.

- Ниндәй Ғаяз тағы?

- Яңы һеҙҙең менән һөйләшкән... Шакир ағайҙың...

- Аңлашылды. Нимә кәрәк?

- Миңә - бер нәмә лә... Һеҙ, һылыу, иламағыҙ...

- Ни-мә-ә?

- Иламағыҙ улай... Юҡ-барҙы күңелегеҙгә яҡын алмағыҙ. Һеҙ көләп-йылмайып ҡына йәшәй торған кеше.

- Кит бынан, хәҙер полиция саҡырам.

- Китәм-китәм, тик һин илама, йәме.

Ул арала ҡаршылағы ишек асылып-ябылды. Инеп китте шикелле. Ә Ғәлиә һаман да ишеткәндәренән шаҡ ҡатып, шул ерендә ултыра бирҙе. "Бына инде, хәҙер уны бер нәмә белмәй эсеп-туҙып йәшәгән эскеселәр ҙә йәлләй башланымы... Әллә нимәләр һөйләгән була бит әле... Йүнһеҙ..."

Таң һыҙылыуға ғына йоҡо дарыуы эсеп, саҡ йоҡлап киткәнлектән, төшкә генә күҙҙәрен көсләп аса алды Ғәлиә. Түшәмгә төбәлеп, тағы ла бер сәғәттәй ятты. Ә ҡайҙа ашығырға? Яңы йыл каникулдарына сыҡҡандар, бөтә донъя ял итә. Иртәгә байрам. Тик уның өйөндә байрам кәйефенең әҫәре лә юҡ. Киреһенсә, мәйет сыҡҡандағылай ауыр, ҡараңғы. Ул ике аҙналыҡ ялын ошолай ятып та үткәрә ала, быға берәү ҙә аптырамаясаҡ та, хатта был хаҡта берәү ҙә белмәйәсәк тә. Ҡыҙ шундай уйҙарға баҫылып ята бирҙе.

Телефон шылтыраны. "Кем өй телефонына шылтыратырға мөмкин? Ә кеҫә телефоны ҡайҙа һуң әле? Улар бит сумкаһы менән Гөлфиәләрҙә тороп ҡалды. Вот, иҫәр, алйот!"

Ныҡышып зыңлаған телефонды тороп алырға тура килде. Гөлфиә икән.

- Сәләм, әхирәт! - тип сағыу тауыш менән ҡысҡыра был.

- Сәләм.
- Нимә, ауырып тораһыңмы әллә? Ни булды?
- Юҡ, сәләмәтмен, яңы уяндым...
- Үәт, йоҡосо! Һиңә ней рәхәт, таң һарыһынан тырнап торғоҙған сабыйың булмағас, рәхәтләнеп йоҡо һимертәһең. Мин, бахыр, иҙерәп йоҡлау хаҡында хыялланам ғына.
- Ҡуй инде... - Ғәлиә трубканы һалып ҡуйырға ла иткәйне, тик ихлас һөйләшеп торған әхирәтен йәлләне.
- Ҡарале, Ғәлиә, кисә ҡалай сыға һалып ҡайтҡан да киткәнеңсе, сумкаң менән телефоның ҡалған, шапкаң да. Ай-һай, берәйһенә ашыҡҡанһыңдыр ул!
- Шулайтҡан тей.
- Ярай, бөгөн киләһеңдер бит, иртәгә Яңы йыл да инде, әҙерләнергә кәрәк. Мин бынау ыбырсыбырҙан бер бушай алмайым, аш-һыу араһында булашыр хәл дә юҡ, ике яҡтан аҫылынышып тик йөрөйҙәр. Йә, нисәгә киләң?
- Нисәгә тип... Нәмә бит әле, Гөлфиә... Мин килә алмаҫмын ул.
- Нисек инде?.. Ҡайҙа бараһың?
- Бармайым, өйҙә булам.
- Бер үҙеңме? Бәй, бер үҙең бире шикелле нишләп ултырмаҡ булаһың, иҫәр...
- ... Бер үҙем булмайым...
- Ә кем була тағы? - Гөлфиәнең матур күҙҙәрен түп-түнәрәк итеп аптырап китеүен күҙ алдына килтереүҙән Ғәлиәнең күңеле күтәрелеп китте. Ә теле үҙе теләгәнде бытылданы:
- Берәү була... килә...
- А-ах, шилма! Үәт, йомоҡ! Миңә лә һиҙҙермәй, кем менән танышып ятаһың унда? Хәҙер үк үҙем киләм, һөйләтәм, күрәм!
- Пока әйтә алмайым. Ныҡышма!
- Ярай атыу, ну үпкәләйем, ҡара аны. Һинең өсөн бик шатмын да бит, әхирәт, тик һинһеҙ нисек итеп байрамды үткәрермен икән, бөтә нәмәне магазиндан алмағанда, бынау балалар менән...
- Йә инде, үткәрерһегеҙ әле. Ҡабаланам, эшем күп.
- Аңлашылды-аңлашылды, әхирәт, етеп килгән Яңы йыл менән һине. Байрамдан һуң мотлаҡ беҙгә алып киләһең, күтәбеҙ! Пип-пип-пип...

Инде лә кире ятып булмаҫ, йоҡоһо ла осто. Аш бүлмәһенә үтеп, сәйнүк сыжлатты, үлән ҡушып сәй бешерҙе лә, сынаяғын тотоп, тәҙрә алдына килеп баҫты. Тышта шундай матур, елберләп кенә ебәк ҡар яуа, бар тирә- яҡ аҡлыҡҡа, сафлыҡҡа төрөнгән. Ҡаршылағы магазиндар, баҙар рәттәре мең төрлө төҫлө уйынсыҡтар, йүгерек уттар менән биҙәлгән. Ҡулдарына аҙыҡ-түлек, йылтыр ҡумталарға төрөлгән бүләктәр, шыршылар тотҡан кешеләр теҙеләй ҙә былай ҙа үтеп кенә тора. Тик уларҙың береһе лә уға ашыҡмай, уны бер ерҙә лә көтмәйҙәр...

Туҡта, нишләп Яңы йылды бер үҙе ҡаршылай алмай әле ул? Ҡапыл башына килеп төшкән ошо уйҙан ҡыҙҙың яурындары турайып, ҡараштары асылып китте. Ысынлап та! Ниңә уға шыршы ултыртып, өҫтәл япмаҫҡа?

**(Дауамы бар).**

*РУХИӘТЕБЕҘ*

# АНА КИЛӘ СӘСӘНЕ -

## унда бит ил хәстәре!

**"Әгәр кеше һәм фәрештә теле менән һөйләшеп тә, йөрәгемдә һөйөү булмаһа, мин бары тик буш яңғыраҡлы баҡыр ғынамын", - тигән Апостол Павел. Бөтә изгеләрҙең дә йөрәгендә кешеләргә, үҙ милләтенә ҡарата һөйөү тойғоһо булмаһа, улар һөйләгән һүҙҙәр быуаттар аша телдән-телгә күсә килеп, бөгөнгәсә халыҡ хәтерендә һаҡланмаҫ, буш яңғырауыҡлы баҡырҙан сыҡҡан тауыш кеүек сыңлап ҡына тымған булыр ине. Күпме тыйыуҙарға ҡарамаҫтан, Аҡмулланың ижады бөгөн дә халыҡ хәтерендә һаҡланып килә икән, тимәк, бөйөк мәғрифәтсенең үҙ халҡына ҡарата булған һөйөүе быуындарға етерлек булған. Ошо көндәрҙә Миәкә районында үткәрелгән "Аҡмулла вариҫы" сәсәндәр ярышы шәхестең халыҡ хәтерендә уйылып ҡалған изге һүҙҙәрен тағы бер ҡат иҫкә төшөрҙө.**

Быйылғы йыл "Мәҙәниәт йылы" тип нарыҡланыуы үҙ мөҙҙәтен көтөп, онотола бireп ятҡан күп кенә башҡорт халыҡ йолаларына, ғөрөф-ғәҙәттәренә, мәҙәни сараларына яңы һулыш биреп, рухиәтебеҙгә иғтибарҙы арттырып ебәреүгә береһенә лә сер түгел. Ошо сиктәрҙә Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовтың күрһәтмәһе буйынса Республика халыҡ ижады үҙәге ҡарамағында Башҡортостандың район һәм ҡалаларында сәсәндәр мәктәбе асыу буйынса Координация үҙәге булдырыласаҡ. Ә Сибай ҡалаһында Асия Ғәйнуллинаның сәсәндәр мәктәбе нигеҙендә "Урал батыр" Сәсәндәр үҙәге ойошторорға ҡарар ителде. Был үҙәк 2015 йылда эшләй башлай, унда сәсәнлек оҫталығына, ҡылҡумыҙ, ҡумыҙ, ҡурай кеүек уйын ҡоралдарында уйнарға өйрәтәсәктәр. Киләсәктә Сибай сәнғәт колледжында бюджет нигеҙендә "Халыҡ художество ижады" йүнәлеше буйынса уҡытыу яйға һалынасаҡ. "Глобалләшеү шарттарында мәҙәниәтебеҙҙең күп кенә үҙенсәлектәренә юғалыу хәүефе янай. "Урал батыр" Сәсәндәр үҙәге Рәсәйҙәге быуаттар буйына формалашҡан йолалары булған милләттәрҙең мәҙәниәте тергеҙелеүенең күрһәткесе буласаҡ", - ти Сибайҙағы Сәсәндәр мәктәбе етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Асия Солтан ҡыҙы.

Ә шулай ҙа ниндәйҙер эш башлар алдынан был өлкәләге белгестәрҙе барлап алыу кәрәктер. Ошо йәһәттән Миәкә районында "Аҡмулла нәсихәттәре" республика фольклор байрамы сиктәрендә "Аҡмулла вариҫы" сәсәндәр ярышы ла үткәрелеүе маҡсатҡа ярашлы булды. Бында Әбйәлил, Белорет, Бишбүләк, Ейәнсура, Ҡырмыҫҡалы, Миәкә, Салауат, Өфө райондарынан ҡырҡтан ашыу һүҙ оҫтаһы ҡатнашты. Сәмле конкурсанттар ярыштың тәүге өлөшөндә Аҡмулла шиғырҙарын, нәсихәттәрен һөйләне, үҙ ижады менән таныштырҙы. Ҡатнашыусыларҙың береһе, шағирә Гөлнур Ҡыуатова менән әңгәмәләшкәндә ул: "Сәсән һәм шағир икеһе лә һүҙ оҫтаһы булыуға ҡарамаҫтан, улар араһында айырма шул тиклем ҙур. Шағирҙар аҡыл, рух, ниндәйҙер идеялар, милләтенә ҡарата һөйөүен белдермәйенсә, хис-тойғоларына таянып ҡына ла ижад итә ала, ә сәсән ижады тәрәнерәк, ул мотлаҡ оло һөйөү, рух менән һуғарыла булыр", - тигәйне. Ошо айырма "Аҡмулла вариҫтары" сәсәндәр ярышында ла һиҙелде. Конкурстың икенсе яртыһында сәсәндәр араһында әйтеш ойошторолдо, жюри ағзалары тәҡдим иткән ике юллыҡтарҙы шиғри һүҙҙәр менән дауам итергә кәрәк ине.

- Ҡатнашыусыларҙың күсмә мәғәнәлә, образлы фекерләй алыуын тикшереп ҡарау ниәтендә "Бейек тауҙың үлгәне" тигән ҡобайырҙың ике юлын, Өфөнөң үҙәк урамдарының береһендә ҡуйылған ҡурайсы малай һынына ҡарата һорау тәҡдим иткәйнем, ауыр һынау булды, - тине "Аҡмулла вариҫтары" ярышының жюри ағзаһы, БДПУ профессоры, билдәле фольклорсы, филология фәндәре докторы Әхмәт Сөләймәнов.- Фәлсәфәүи яҡтан тәрән уйланырға урын бар ине, әммә ҡатнашыусылар теләгән кимәлдә йырып сыға алманылар, әйтеш барышында проза менән яуап биреүселәр ҙә булды. Был беҙҙең борондан килгән сәсәнлек традицияларын, сәсәндәрҙең ижадын онота барыуҙан киләлер, тип уйлайым. Әйтергә кәрәк, һәр бер һөнәр эйәһе үҙен ошо эштә камиллаштырыу буйынса хәстәрлек күрергә тейеш. Бөгөн бында сәхнәгә сығыусылар ҙа киләсәктә үҙен камиллаштырыу, ҡанына һалынған сәсәнлек оҫталығын артабан үҫтереү юҫығында эшләһен, башҡорт халҡының боронғо эпос, ҡобайырҙарын, сәсәндәр ижадын өйрәнһен, тигән теләктә ҡалам.

"Аҡмулла вариҫы" ярышында ҡатнашыусыларҙы баһалаусы башҡа жюри ағзалары - "Шоңҡар" журналының баш мөхәррире Мөнир Ҡунафин, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, Республика халыҡ ижады үҙәгенең фольклор буйынса баш белгесе Гөлгөнә Баймырҙина, М. Аҡмулла исемендәге премия лауреаты Сәрүәр Сурина ла әйтеш ваҡытында отҡорлоҡ, тапҡырлыҡ, кинәйә менән һөйләү етеңкерәмәһә лә, киләсәктә үҫеш өсөн нигеҙ һалыныуын билдәләне. Мөнир Ҡунафин интернетта "Вконтакте" селтәрендә сәсәндәр өсөн айырым төркөм асып, шунда әйтеш, үҙ ижадың менән уртаҡлашыу мөмкинлеге биреләсәге тураһында һөйләне. Ә "Киске Өфө" гәзитендә "СМС-әйтеш" рубрикаһы киренән тергеҙеләсәк, СМС-хәбәрҙәр ебәреп һәр теләгән һүҙ оҫтаһы фекер алышыуҙа ҡатнаша аласаҡ.

"Аҡмулла вариҫы" сәсәндәр ярышында Хәнифә Әбүбәкерова (Әбйәлил районы) һәм Сафуан Сәйетғәлин (Салауат районы) беренсе урын яуланы. Хәнифә Әбүбәкерова был конкурстың төп әһәмиәтен балаларҙы йәлеп итеүҙә күрә, мәктәп уҡыусыларының Аҡмулланың ижад өлгөләрен яттан һөйләп, уға арнап яҙған үҙ шиғырҙарын сәхнәгә сығарыуы ҙур иғтибарға лайыҡ, тигән фекерҙә ул. "Бөтәһен дә уҡытып һәм өйрәтеп кенә сәсән итеп булмай, сәсән ул тыумыштан отҡор, йор һүҙле, аҡыллы кеше. Сәсәндәр ярышы үтә, тип, ҡапыл ғына фекерҙәрендә яҙып, сығыш яһап та булмай. Шулай ҙа әлеге Миәкәләге сәсәндәр ярышында күп балалар әйтештәрен алдан әҙерләп килеп, сәхнәгә сығыуы уларҙа сәм уятыр, дәртләндерер. Оло быуын кешеләренең сығыштарынан үрнәк һәм фәһем алырҙар", - ти сәсәниә.

Ысынлап та, борон да халыҡҡа кәрәкле һүҙ әйтерҙәй, аҡыл өйрәтерҙәй, кәңәш бирерҙәй һүҙ оҫталары бармаҡ менән генә һанарлыҡ булған. Сәхнәгә сыҡҡан балалар араһынан киләсәктә бер-нисәүһе генә халыҡ хәтерендә ҡалырлыҡ сәсәндәр булып китә алған осраҡта ла, бөгөн башланып ҡына торған сәсәнлек традицияларын кире тергеҙеү буйынса эштәр елгә осмаҫ ине. Сәсән - асып-ярып тураһын әйтеп йөрөүҙән бик, халыҡ аңларлыҡ итеп кенә кинәйәләп иҫкәртеп, мәрәкәләп көлдөрөп хәл айышына төшөндөрә белгән, аҡыллыға ишара яһап йөрөүсе кеше булырға тейештер, моғайын. "Мәктәптәрҙә сәсәндәр менән күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшеүҙәр булырға тейеш, дәрестәр кәрәк. Учалы, Әбйәлил, Баймаҡта ла сәсән телле кешеләр бар, әммә улар араһында халыҡ араһында үҙен таныта белгәндәре аҙ. Сәсәндәргә барып, аралашып, мөмкин тиклем рухи хазиналарыбыҙҙы өйрәнеп, отоп алып, һаҡлап ҡалырға кәрәк беҙгә. "Урал батыр" Сәсәндәр үҙәгенә теләгән һәр кем килә ала, киләсәктә сәсәндәр берлеген төҙөргә уйлайбыҙ, улар берләшһен, ойошһондар, тигән ниәттә эшләйәсәкбеҙ. "Аҡмулла нәсихәттәре" республика фольклор байрамы сиктәрендә "Аҡмулла вариҫы" сәсәндәр ярышын үткәреүҙе лә дауам итәсәкбеҙ, бынан тыш та ошо йүнәлештә эштәрҙе яйға һаласаҡбыҙ", - ти Республика халыҡ ижады үҙәге баш белгесе Гөлгөнә Баймырҙина.

*Әбйәлил районы сәсәниәһе Хәнифә Әбүбәкерова әйткәндәрҙән:*

*"Һайт!" тигәндә закондар үҙгәреп китә,*
*"Тайт!" тигәндә беҙҙе тағы ниҙәр көтә?*
*"Һайт!" тигәндә мәктәптәр асылып китә,*
*"Тайт!" тигәндә ҡыҫҡарып, ябылып бөтә.*
*"Һайт!" тимәгәс, бурҙары күбәйеп китә,*
*"Тайт!" тимәгәс, аҡсаларҙан елдәр иҫә.*
*"Һайт!" менән "Тайт!" араһында*
*Ҡайһы берәү һимереп китә.*
*"Һайт!" тигәндә тергеҙәләр,*
*"Тайт!" тигәндә емерәләр.*
*"Һайт!" менән "Тайт!" араһында*
*Кем дә булһа һимерәләр.*
*"Һайт" менән "Тайт" араһында буталабыҙ,*
*Белмәйбеҙ шул ҡайҙа барып туҡталабыҙ.*

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ана килә сәсәне,**
**Үрә тора сәстәре.**
**Үрә тормаҫ ине сәсе,**
**Унда бит ил хәстәре", - тигән һүҙҙәр әйтелгәйне "Аҡмулла вариҫы" сәсәндәр ярышы барышында. Ысынлап та, Тыуған илен хәстәрләгән, йөрәгендә халҡына ҡарата һөйөү йөрөткән кешенең бөгөнгө көндә сәстәре үрә торалыр ҙа, әммә буш яңғыраҡлы баҡыр кеүек булмаҫ өсөн һүҙен үлсәп, фекерен туплап һөйләү талап ителәлер. Киләсәктә башланған эшкә ҡар яуып өлгөрмәҫ борон халыҡ алдында абруйлы һүҙен әйтерлек сәсән телле йәштәребеҙҙе тәрбиәләргә, ошо матур ғәҙәтебеҙҙе онотмаҫҡа кәрәк. Шул осраҡта, бәлки, Хәнифә апай Әбүбәкерова әйткәнсә,"Һайт!" менән "Тайт!" араһында буталып йөрөүҙән туҡтап, ҡайҙа барып етеребеҙҙе күҙаллап, таҡыр һәм дөрөҫ юлға төшөп тә алырбыҙ әле.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**



## ИНТЕРНЕТТАН



# СОЦИАЛЬ СТАТУС...
## кәйефкә бәйле

■ Йәмғиәттә лә, ғаиләһендә лә абруйым ҙур, тип уйлағандар бәхетлерәк икән. Һәр хәлдә, Калифорния университеты ғалимдары үткәргән яңы һынауҙар күрһәтеүенсә, кешенең социаль статусы туранан-тура уның кәйефе менән бәйле. Хәүеф тойғоһо, депрессия кеүек күп кенә психологик ауырыуҙарҙың төбөндә кешенең үҙенә булған түбән йә юғары баһаһы ята. Йәғни, башҡаларҙың һине нисек ҡабул итеүе түгел, ә үҙеңдең үҙеңә ниндәй мөнәсәбәттә булыуың төп ролде уйнай. Һынауҙар барышында 600 үсмер төрлә һорауҙарға яуап биргән. Үҙенең уңыштарына ҡыуана белмәгәндәр депрессияға йышыраҡ бирелгән. Ә кемдең үҙбаһаһы артыҡ юғары, улар шулай уҡ нарцислыҡ кеүек ауырыуҙарға дусар булыуы асыҡланған.

■ Әгәр ҙә һеҙ диабет менән ауырымаһағыҙ, ябай кәнфит менән шоколадты фруктозаға алыштырырға ашыҡмағыҙ. Америка нейропсихофармакология колледжы ғалимдары билдәләүенсә, фруктоза асығыу тойғоһон тағы ла арттыра икән. Фруктоза глюкозаға ҡарағанда ике тапҡыр татлыраҡ, әммә ул энергияны әҙерәк бирә. Көньяҡ Калифорния университеты үткәргән һынауҙар күрһәтеүенсә, глюкозаны фруктозаға алыштырыу кәрәкмәй. Бынан тиҙерәк туймаясаҡһығыҙ ҙа, киреһенсә, тағы ашағы килеп тик торасаҡ. Ә даими рәүештә артығын ашау һимереүгә килтерә.

■ Америка ғалимдары билдәләүенсә, баланың үҙен гел гәйепле тойоуы уның баш мейеһенең бөләкәйләнеүенә килтерә. "Дөрөҫ" бала тәрбиәләргә ынтылып, балаға гел генә аҡыл өйрәтеүсе ата-әсәләр уға зыян килтереүеән белергә тейеш. Даими контроль аҫтында йәшәгән балаларҙың психикаһына баҫым яһаусы негатив тәьҫир депрессияға килтерә, ул баш мейеһе үҫешен тотҡарлай.

■ Телевизорҙы күп ҡараған балалар әйләнә-тирәһендәге кешеләрҙе аңлау һәләтен юғалта. Тәжрибә 1,5 йәштән 3 йәшкә тиклемге балаларҙа үткәрелгән. Уларҙың ата-әсәләре бала телевизор алдында күпме ваҡыт үткәрә, телевизор бүлмәнең ҡайһы урынында тора, тигән һорауҙарға яуап биргән. Бүлмәлә телевизор даими эшләп торһа, бала башҡа кешеләрҙең кәйефен һәм тойғоларын насарыраҡ аңлай икән. Артабан был аралашыуҙа ҙур проблемалар тыуҙыра. Психологтар әйтеүенсә, экранда барған ситуацияларҙағы геройҙарҙың тойғолары бары уйын ғына йәки артыҡ шаштырып ебәрелгән була.

■ Стресс ваҡытында ҡәһүә эсеү ҡатынҡыҙҙарға яҡшы тәьҫир итә. Ә бына ир-егеттәр бындай осраҡта үҙенең мейе әүҙемлеге тиҙлеген әкренәйтә генә, тип раҫлай Бөйөк Британия белгестәре. Independent News аныҡлауынса, был тикшеренеүҙәр барышында асыҡланған. Унда ҡатнашыусыларҙы ике төркөмгә бүлеп, береһе ябай, икенсеһенә кофеины булмаған ҡәһүә эсергә тәҡдим иткәндәр. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ябай ҡәһүә эсеүсе гүзәл заттарҙың мейе әүҙемлеге кофеинһыҙ ҡәһүә эсеүсе ханымдарҙыҡына ҡарағанда күпкә яҡшырған. Ә ир-егеттәр, киреһенсә, мәсьәләләрҙе ауырыраҡ һәм яйыраҡ сискән, мәғлүмәтте лә хәтерендә насарыраҡ ҡалдырған.

## ХЕҘМӘТ ҺАБАҒЫ

# АУЫЛДАРҘА...
## һуғым мәле башланды



**Көҙ - ауылдарыбыҙ өсөн муллыҡ, бәрәкәт мәле. Баҫыуҡырҙарҙан, баҡса-түтәлдәрҙән уңышты йыйып алыуға, ҡырпаҡ ҡар төшөү менән ҡаҙ өмәләре, һуғым осоро башланып китә. "Үҙегеҙҙең шәхси хужалыҡ, ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ туплау ниәттәрегеҙ хаҡында һөйләп китегеҙ әле", тип, Баймаҡ ҡалаһынан Рауза ХӘСӘНОВАға мөрәжәғәт иттек.**

- Хәҙерге ваҡытта ауыл ерендә генә түгел, ә ҡалала ла (мөмкинлек булһа инде) баҡса үҫтермәй, мал көтмәй донъя көтөү мөмкин түгел. Әлбиттә, был бик күп тырышлыҡ талап итә. Мал көтһәң, баҡса үҫтерһәң, ялдарҙы ла, байрамдарҙы ла оноторға тура килә. Көҙгөһөн мул уңыш алыуға әҙерлекте ҡышҡыһын уҡ башлап ебәрәм. Ғинуар, февраль айҙарында үҫентеләр ултыртам. Һатыуға сығарыр өсөн сәскәләр ҙә үҫтерәм. Яҙғыһын ошо үҫентеләрҙе һатып, ҡәҙимге генә аҡса эшләүгә өлгәшәм. Әлбиттә, төп табыш-ул мал, ҡош-ҡорттан килә. Апрелдә үк тәүге сығарылыш бройлер себештәре һатып алам. Улар бесән әҙерләү ваҡытына өлгәрә. Ит бөтөп киткәндә ярап ҡала. Бер нисәүһен баҙарға сығарып һатам. Артабан ҡаҙ, өйрәк, июль аҙағында бройлер себештәре өҫтәп һатып алам. Үҙем шулай ҡош итенә өҫтөнлөк бирәм. Беҙҙең ваҡ мал да күп: һауын кәзәләре, һарыҡ көтәбеҙ. Хәҙер кешеләр кәзә ҡымыҙын да ҙур теләк менән һатып ала. Был өҫтәмә килем. Һарыҡтарҙы йыл әйләнәһенә һуйып, аҡса эшләргә була. Ғаилә өсөн дә бик һәйбәт - иттән өҙөлмәйбеҙ.

**► Һуғымға мал инселәп ҡуйғандан һуң уны имен-аман көҙ еткереп, ҡарап-тәрбиәләү хәстәрлектәре байтаҡ көс, тырышлыҡ талап итә торғандыр?**

- Элегерәк, йәшерәк саҡта, йылҡы көтөп, шуны һуғымға инсеәләй торғайныҡ. Хәҙер быға хәл етмәй, сөнки йылҡы малы күп ҡош талап итә. Шуға күрә йыл һайын ике башмаҡты һуғымға әҙерләйбеҙ (йылҡы итен, өлөшләп, белгән кешеләрҙән һатып алабыҙ). Көндәр һалҡынайыу менән уларҙы бикләп ҡуйып ашатабыҙ. Шулайтһаң, һуғым һимеҙ була. Әлбиттә, йәйгеһен бесән әҙерләү бик мәшәҡәтле. Һуңғы йылдарҙа Баймаҡ районында "королоҡ булғас, күпереп үҫкән шифалы үлән тураһында күптән онотоҡ. Ямғырһыҙ йылдарҙа айырыуса ҡорорп үҫкән әремдең тәме һөткә лә сыға. Шуға күрә, был йәһәттән ауырлыҡтар бар. Ситтән килтереп һатылған бесән бик ҡиммәт. Ә бит элегерәк бесән шул тиклем мул була торғайны, ҡышҡыһын да унан хуш еҫ аңҡып торҙо, хатта араһынан кипкән еләктәрҙе сүпләп ашай торғайыҡ. Шулай ҙа бирешмәйбеҙ: бесән әҙерләп, һалам алып, ҡышты ҡаршылайбыҙ.

**► Һуғым йолаһы нисек башҡарыла? Ниндәй ырымдары бар уның? Был эште башҡарып сығыу өсөн ниҙәр белеү фарыҙ?**

- Һуғым һуйыу көнөн алдан билдәләйбеҙ. Балаларҙың буш булыуы ла кәрәк бит. Һуғымды һуйғас та уны өлөшләп балаларға бүләбеҙ. Ит бешеп сыҡҡансы, эсәк-ҡарынды таҙартып йөрәүселәргә ҡурлаҡ бешерәм. Ул малдың үпкә, бауыр, йөрәгенән ваҡ итеп тураҡлап бешерелә. Һурпаһына балдаҡлап тураҡлап күп итеп һуған һалырға кәрәк. Шул саҡта ҡурлаҡ тәмле була. Элек-электән мин өләсәйемдең, әсәйемдең һуғым һуйғандан һуң таҙартылған ҡарынға ит төрөп, элеп ҡуйғанын күҙәтә инем. Һуғым һуйылғандан һуң был төрөнсөк иң юғарыға элеп ҡуйыла торғайны. Яҙғыһын, ит бөткәс, уның асылыуын түҙемһеҙлек менән көтә торғайныҡ. Сөнки юғарыла эленеп торған ит, ҡаҡланып, ҡабатланмаҫ тәм ала ине. Әлбиттә, хәҙерге ваҡытта һәр йортта төрлө һыуытҡыстар, туңдырғыстар бар. Шулай ҙа мин дә бер нисә ҙур киҫәк итте яҙғылыҡҡа шулай элеп ҡуйыуҙы ғәҙәткә индергәнмен. Ә инде һыйырҙың баш итен быҡтырып, стерилләнгән банкаларға тултырам. Был ситтә эшләп йөрөгән балаларға, студент ейән-ейәнсәрҙәргә бик тә ярап ҡала.

Әлбиттә, һуғым һуйылған көндө уҡ ширлан (тултырма) бешерәбеҙ. Был тәмле ризыҡты әҙерләү өсөн кемдер малдың йөрәк, бауырын ит турағыс аша үткәрһә, мин һәр саҡ турап эшләйем, дөгө лә ҡушмайым. Минеңсә, туралған ширлан күпкә тәмлерәк була. Уға һуғанды ваҡлап өҫтәү, борос һалып тәмләү мотлаҡ. Ширланды, туңмаһын өсөн, эсе килеш ашарға кәрәк. Бер нисәүһен оло ҡунаҡ, аят уҡытыу өсөн, туңдырғысҡа һалып ҡуябыҙ.

**► Һуғым һуйылғас, башҡорт ауылдарында ғаиләләр ҡыш буйы тип әйтерлек һуғым ашына саҡырышып сыға. Бында ниндәй ғилләкүрәһегеҙ?**

- Эйе, һуғымға саҡырышыу йолаһы элек-электән бар. Бала сағымды иҫләйем: йыл ни тиклем ауыр булһа ла, кешеләр мотлаҡ бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөнө. Өҫтәлгә бишбармаҡ, ит, ҡорот, сәйгә бауырһаҡ, сәк-сәк кенә ҡуйылыр ине. Хәҙер ҙә һуғым аштарын шулай итеп үткәреү яҡлымын. Сөнки йәштәр төрлә салат-малат, башҡа төрлә һый әҙерләп, төп ризыҡ - бишбармаҡ иғтибарһыҙ ҡала. Һуғымға саҡырышыу - ул кешеләрҙең берҙәмлеген, татыулығын күрһәтә. Көҙгө мәшәҡәттәр бөткәс, йыйылышып, әңгәмәләшеп ултырып алырға сәбәп тә була. Сөнки эш менән мәшғүл булып, ҡайһы саҡта күрше-күләндең хәлен белергә лә ваҡыт ҡалмай китә.

**► Ҡунаҡтарға табын әҙерләү, бишбармаҡ бешереү серҙәрегеҙ менән уртаҡлашһағыҙсы?**

- Әйтеп үтеүемсә, һуғымға саҡырышҡанда башҡа төрлө ризыҡты артыҡ әҙерләргә кәрәкмәй. Сөнки итте күп итеп бешереһең, ширланды айырып бирергә кәрәк. Ә уның эргәһенә мотлаҡ иң эре картуфты, мул итеп ҡабеҫтә-кишерҙе бешереп ҡуяһын. Бишбармаҡ тәмле булһын өсөн бер нисә төрлө итте (һыйыр, йылҡы, ҡаҙ-өйрәк) ҡушып бешерәм. Бындай һурпа телде йоторлоҡ була. Һалманы ни тиклем йоҡа йәйһәң, шул тиклем тәмле. Һимеҙ һурпала бешерелгән картуф, ҡабеҫтә, кишер ҙә (был һурпаны бишбармаҡҡа ҡушырға ярамай) һәр кемдең күңеленә хуш килә. Әлбиттә, өҫтәлдә мотлаҡ эсе ҡорот булырға тейеш. Сөнки һуғым ите бик һимеҙ булыуы менән айырыла. Бындай саҡта ҡорот "Фестал" ролен башҡара инде. Ғөмүмән, өҫтәлдә ҡорот булған саҡта, кеше һуңынан ашҡаҙан эшләмәүенә зарланмай.

**► Ҡунаҡ һыйлауҙың ниндәй тәртиптәре онотолмаған әле?**

- Ҡунаҡтарҙы хужабикә булараҡ, ишек төбөнән, ә улдарым тышҡа сығып уҡ ҡаршы ала. Кешеләр өҫтәл артына ҡул йыуып ултырһа ла, тас-ҡомған менән ҡулдарын сайҙырып сығабыҙ. Был электән килгән йола. Ҡул сайҙырыусы мең сауап ала, тиҙәр. Ҡунаҡтарҙы өҫтәл артына мотлаҡ өлкәнләтә башлап ултыртырға кәрәк.

Хужабикә табаҡ менән табындың уртаһында торған бишбармаҡты ҡунаҡтарҙың алдындағы тәрилкәләргә үҙе һала. Шул уҡ ваҡытта ситкә өйөп ҡуйылған ҡаҙы, тултырма, һимеҙ ит киҫәктәре лә өлөшләп һәр ҡунаҡҡа бирелә. Бынан тыш, ит тағы бер нисә урынға ҡуйыла. Ҡунаҡтар ашап бөткәс, ғаилә башлығы һәр ҡунаҡтың ҡалағына бишбармаҡҡа ҡушылған ит киҫәге һала. Был һоғондороу өлөшө. Әлбиттә, элегерәк ғаилә башлыҡтары ҡул менән һоғондора торғайны. Хәҙер был матур йола юҡҡа сығып бара тиерлек. Ҡунаҡтарға ҡүстәнәс әҙерләгәндә, унда тәмлекәстәрҙән тыш, мотлаҡ һуғым ите лә булырға тейеш. Хуш итеүҙе иң өлкән ҡунаҡ ҡына башлап һорай ала. Йәштәр ни тиклем ҡабаланһа ла, өлкәндәрҙән алда табындан ҡуҙғалырға тейеш түгел. Йорт хужалары хуш итергә ризалыҡ биргәс кенә, ҡунаҡтар фатиһаһын биреп, урынынан ҡуҙғала.

**► Ҡалаларҙа аҙыҡ-түлек ҡытлығы булып киткәндә лә (Хоҙай күрһәтмәһен!), ауыл халҡы бер ҡасан да ас ултырмаясаҡ, тигән фекер менән килешәһегеҙме?**

- Эйе, заманалар үҙгәреп тора. Әммә ниндәй генә ҡыйынлыҡтар килмәһен, ялҡау булмаған ауыл кешеһе юғалып ҡалмаясаҡ. Тик бының өсөн үҙеңә лә тик ятмаҫҡа, балаларыңды ла эшкә өйрәтергә кәрәк. Сөнки ауыл кешеһенең төп байлығы - тупраҡ. Уны ҡуллана белһәң, ваҡытында сәсһәң, үҫтерһәң, йыйып алып, мөлендә эшкәртһәң - ас ҡалмаҫһың. Әлбиттә, хәҙер мал көтөү лә ауырлаша. Сөнки малдан табыш алыу өсөн уны күп итеп көтөргә кәрәк. Ә бының өсөн күпме көс түгәһең! Шул уҡ ваҡытта миҙгелле генә үҫтергән ҡош-ҡорттан да ҙур файҙа алырға була. Үҙең һуйып алып, балаларыңа еткереп, баҙарға сығарып һатырға ла мөмкин. Уйлап ҡараһаң, яҙғыһын баҙарҙа йәшел һуған һатып та (ә уны үҫтереү өсөн шул тиклем таһыллыҡ кәрәкмәй) килем алырға була. Беҙҙең яҡтарҙа ҡорот-эремсекте бик теләп алалар. Ҙур ҡалаларҙан, Силәбе яғынан күп һорайҙар. Баҡһаң, ҡоротто һәр районда ла эшләмәйҙәр икән. Ә беҙҙә уның туңдырылғаны ла, киптерелгәне лә бар.

Үҙ хужалығыңды тотоп, унан табышкилем алып йәшәү өсөн унған, өлгөр булырға, ҡояш менән бергә торорға (ә йәйгеһен унан да алдараҡ) һәм ятырға кәрәк. Шул саҡта ғаиләң һәр саҡ етеш йәшәр, балаларың ниндәйҙер химикаттар ҡушылған, ҡиммәтле аҙыҡты түгел, ә шифалы һәм файҙалы тәбиғи ризыҡ ашар. Эйе, һәр ерҙә, һәр заманда тик тырыштар ғына юғалып ҡалмай һәм етеш йәшәй. Тырыш булайыҡ!

**Гүзәл ИСӘНГИЛДИНА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Ләкин был йылда һаулыҡҡа, сирҙәрҙе иҫкәртеүгә айырыуса иғтибар бирергә тура килер. Аҡса мәсьәләһен даими контролдә тоторға, уны юҡ-барға туҙҙырмаҫҡа. Аҡсаны дөрөҫ файҙаланыу байығыуға килтерер.*



*ЫШАНҺАҢ - ЫШАН...*

**Яңы тыуасаҡ Ҡуй йылында ныҡышмалы эшләй белгән, хеҙмәт һөйгән кешеләргә уңыш йылмайыр. Етәксегеҙ тырышлығығыҙҙы күрер, һәм был һеҙҙең карьераға булышлыҡ итер. Айырыуса сәнғәт, әҙәбиәт һәм уйлап табыуҙар өлкәһендә шөғөлләнгән ижад кешеләрен уңыштар һәм яңы идеялар көтә. Уларҙың күбеһе тап ошо йылда танылыу яулар. Ҡатмарлы хәлдәрҙән сығыу юлын йә шуға ишараны Саяндар, Үлсәүҙәр һәм Ҡыҫалалар төштәрендә күрер - уяуыраҡ булығыҙ. Онотолмаҫ осрашыуҙар, яңы дуҫтар һәм романтик мөнәсәбәттәр өсөн уңай мәл. Шул уҡ ваҡытта ыҙғыш, янъялдар һәм айырылышыуҙар ҙа был йылды ситләтеп үтмәҫкә оҡшай. Уның ҡарауы, яңы ғаилә ҡороусылар ҙа байтаҡ булыр. Астрологтар моңһоҙ Бәрәндең аҡса туҙҙырып, типтереп йәшәү холҡон да белгәнгә күрә, бындай юлға баҫыуҙан иҫкәртә. Һаҡлаған бер аҙ аҡсағыҙ бар икән - кисекмәҫтән уны күсемһеҙ милеккә тотоноғоҙ. Киләһе йылда иң мөһиме - һаулыҡҡа иғтибар бүлеү. Үҙегеҙҙе йоғошло ауырыуҙарҙан аралау өсөн 2014 йыл аҙағында уҡ сирҙе иҫкәртеү сараларына, әйтәйек, спортҡа, тотоноғоҙ, табип кәңәштәрен тотоғоҙ.**
**Киләһе 2015 йылдың хужаһы күк төҫтәге ағас Ҡуй булғанлыҡтан, яңы йыл ҡаршылағанда, зәңгәр-күк йәки йәшел төҫтәге кейем һәм биҙәүестәрҙә булырға кәңәш ителә, ә Яңы йыл табынында итһеҙ ризыҡтарға - һәр төрлө йәшелсә салаттары, емеш-еләк, башҡа вегетариан ризыҡтарға өҫтөнлөк биреү хәйерле, тиҙәр. Ә хәҙер көнсығыш мөсәлдәге Ҡуй йылының кемгә нимә вәғәҙәләүен ҡыҫҡаса байҡап үтәйек.**

# ТИПТЕРЕП ЙӘШӘҮ ХОЛҠОНАН АРЫН



Педант **Сыҫҡандар** Ҡуй йылында бер аҙ ҡуҙғыусан һәм ярһыу булыр, сөнки кемдәрҙер даими рәүештә уларҙың ниәттәрен боҙор. Сыҫҡандарға йыл буйына үҙҙәренең хаҡлығын иҫбатлап, яуапһыҙ әҙәмдәр менән алышырға ла тура килер. Был билдә вәкилдәренә донъяны ҡайтанан ҡороп, үҙгәртеү ниәтенән баш тартып, ял итергә өйрәнергә кәрәк булыр, юғиһә, уларҙың көсөргәнешле хеҙмәте баһаланмай ҡалыуы ла бар. Ғаилә ҡорорға иҫәп тотҡан яңғыҙаҡтарҙы иһә йыл аҙағында романтик мөнәсәбәттәр көтә.

Тәүәккәл һәм ныҡыш **Үгеҙҙәр** алдарына ҡуйған бөтөн маҡсаттарға ла ирешер. Был йылда улар мөнәсәбәттәрҙе көйләргә, башҡалар фекеренә ҡолаҡ һалырға һәм үҙ ҡылыҡтарын анализларға өйрәнер. Эргәһендәгеләр Үгеҙҙең идеялары менән тоҡаныр, финанс хәлдәре көйләнер.

Маҡсатына ынтылышы һәм мәкерлелеге **Юлбарыҫты** һәр саҡ ниндәйҙер бәрелештәргә этәрер, ләкин был уның үҙ маҡсатына ынтылышын һәм тәүәккәллеген арттырасаҡ ҡына. Күңелһеҙлектәр Юлбарыҫтың ихтыярын ғына сыныҡтырасаҡ, уның ышанысты теләктәштәре барлыҡҡа килер.

**Ҡуяндарҙы** үҙгәрештәр көтә. Көтмәгәндә улар был тормошта үҙҙәрен уратып алған кешеләрҙең мөһимлеген аңлаясаҡ. Өйҙә лә, эштә лә улар менән яҡынайырға тырышыу файҙаға ғына булыр. 2015 йылда Ҡуяндарҙың ҡиммәттәрҙе ҡайтанан барлап-баһалауҙары тормошон яҡшыға үҙгәртер.

**Аждаһалар** йыл буйына үҙ абруйын күтәреү өсөн тырышасаҡ һәм уның был хеҙмәте матур емештәрен бирер. Күңелһеҙ хәлдәргә килтереп еткермәһен өсөн уларға хистойғоларын тыйыбыраҡ тотоу фарыз. Күп һанлы бәрелештәренән күпкә өйрәнер. Ниндәй хәлдәрҙә лә яҡындары һәм туғандары ярҙамына иҫәп тота ала.

Йондоҙ юраусылар 2015 йылды аҡыллы **Йыландар** өсөн иң яҡшы йыл булмаҡсы, тип вәғәҙәләй. Йылан йылы тыуғандар, ниһайәт, комплекстарынан арынып, яурындарын турайтыр һәм яңы ыңғай сифаттарға эйә була алыр. Улар яҡындарына булған үпкәләрен еңеп, уларҙы ғәфү итер, яңы таныштары менән мөнәсәбәттәрен яйлар. Шул арҡала шәхси тормоштары яҡшы яҡҡа тәгәрәр.

**Йылҡы** йылы тыуғандар яңы йылда тормоштан бөтәһен дә алып ҡалырға тырышыр. Тәбиғи энергетик ҡеүәте уларға ҡыйынлыҡтарҙы еңел йырып сығырға, дуҫтары ярҙамына иҫәп тоторға мөмкинлек бирер.Ҡуй йылы, яңы мауығыуҙар менән бәйле, Йылҡылар яҙмышында көтөлмәгән үҙгәрештәр әҙерләп ҡуймаҡсы.

Йыл хужаһы булараҡ, **Ҡуйҙарҙы** тормоштарында һәм донъяға ҡараштарында ҙур үҙгәрештәр көтә. Ләкин был йылда һаулыҡҡа, сирҙәрҙе иҫкәртеүгә айырыуса иғтибар бирергә тура килер. Аҡса мәсьәләһен даими контролдә тоторға, уны юҡ-барға туҙҙырмаҫҡа. Аҡсаны дөрөҫ файҙаланыу байығыуға килтерер.

**Маймылдар** яңы йылда ыңғайға көйләнер, шул арҡала йылды уңышлы үткәрер. Үҙ-үҙен эҙләү, донъя менән ярашып йәшәү теләге ауыр һәм күңелһеҙ мөнәсәбәттәрҙән, яратмаған эштән ҡотолорға ярҙам итер. Йыл сәйәхәттәр, күсенеүҙәр, яңы теләктәштәр табыу өсөн уңайлы.

Йондоҙлоҡ, зәһәрлектәренән ҡотола алмаһа, **Әтәс** йылы тыуғандарҙың яҡындары мәрхәмәтенән яҙыу ихтималлығын иҫкәртә. Башҡаларға ҡарата үҙҙәрендә түҙемлелек тәрбиәләй башламаһа, улар яңғыҙлыҡ һәм яҡлаусыһыҙ тороп ҡалыуҙың ни икәнлеген тулы ҡеүәтендә аңлаясаҡ.

Үҙгәрештәрҙән ҡурҡмаған, үҙ көстәренә ышанған **Эттәргә** йондоҙҙар киләһе йыл ҙур файҙа килтерәсәк, тип юрай. Яңы йылда улар алдына бик мөһим ҡарар ҡабул итеү кәрәклеге килеп баҫасаҡ. Эттәргә даими рәүештә яҡындарына ярҙам итеп йәшәргә тура килер, шәйт.

Тәүге ярты йыллыҡтағы уңышһыҙлыҡтар **Суҡаларға** тураһын уйлап, тура ярыуҙың һәр саҡ та яҡшыға килтермәүен аңларға ярҙам итер. Алдашыуҙың йә дөрөҫлөктө йәшереүҙең ҡайһы саҡ яҡшыраҡ була икәнен аңларҙар. Шул арҡала йылдың икенсе яртыһында үҙҙәре көс түккән өлкәләрҙә алдынғы урындарҙы яуларҙар. Тәүәккәл һәм һалҡын ҡанлылар лайыҡлы танылыу һәм эргәтирәһендәгеләр ихтирамын ҡаҙаныр.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Нисек итеп уңышҡа аяҡ салалар...

Дәүләт күҙлегенән ҡарағанда, йәмғиәттең иң хәүефле ағзаһы - яҡшы тәьмин ителгән, тормошта йышылған һәм үҙе тураһында хәстәрлек күрә алған кеше. Идеаль гражданға иһә һәр саҡ ярҙам кәрәк, сөнки ул ни тиклем дәүләткә мохтаж, шул тиклем уның менән идара итеүе еңел.

Әсе хәҡиҡәт шунан ғибәрәт - дәүләт һеҙҙең уңышлы булыуығыҙҙы теләмәй, уға һеҙҙең "бушлай сыр" өләшеү системаһына ярҙам итеү өсөн коллектив менән әрәмтамаҡланыуығыҙ кәрәк. Шулай итеп, һеҙ власть структураһын һаҡларға ярҙам итәһегеҙ. Шуға ла дәүләт менән теләһә ниндәй бәйләнеш атап үтелгән маҡсатҡа ярашлы программалауҙы күҙаллай икәненә инана алаһығыҙ.

## Кем менән аралашаһығыҙ...

Һеҙҙе иң ныҡ зарарлағаны - ул кире инаныста булған кешеләр. Уларҙы "ҡотҡарырға" тырышыуығыҙ тағы ла насарыраҡ һөҙөмтә биреүе мөмкин - улар һеҙҙе үҙ һаҙлығына тартасаҡ. Кемдер быны аңлы рәүештә эшләй, күпселек осраҡта ул аңһыҙ рәүештә башҡарыла. Әммә тап ошо кире программалау бигерәк тә насар.

Мин, ғаиләгеҙ йәки дуҫтарығыҙ һеҙгә ҡаршы тип әйтергә теләмәйем; уларҙың һәр ҡайһыһы үҙенсә һеҙгә яҡшылыҡ теләй. Ата-әсә балаларын, яҡшы эш табырға кәрәк, тип өйрәтә, уҡытыусылар "реалист" булырға өндәй, дуҫ-иш, һуңынан ҡыйын булмаһын өсөн, артыҡ күп талап итмәҫкә кәңәш бирә. Күпселек осраҡта былар барыһы, һеҙ ныҡ уңыш ҡаҙанып, башҡаларҙы ышыҡларһығыҙ, тип ҡурҡыуҙан, аңһыҙ рәүештә эшләнә. Ҡайһы бер осраҡта инде һеҙҙең уңышлы булыуығыҙҙы ысынлап та теләмәүсе яҡындарығыҙ ҙа булыуы мөмкин, сөнки, әгәр һеҙ сәләмәт, етеш һәм бәхетле булһағыҙ, улар үҙҙәренең ни өсөн шулай була алмауҙарына аҡланыу тапмаясаҡ.

Улар һеҙҙең бизнес-пландарығыҙҙы тәнҡитләйәсәк, хыялдарығыҙҙан көләсәк һәм маҡсаттарығыҙға шик белдерәсәк; әгәр пландарығыҙҙан ситләшеп, көндәлек тормошҡа кире ҡайтһағыҙ, еңелеүегеҙҙе: "Аҡса эшләү өсөн аҡса кәрәк", "Бай булыр өсөн йәнеңде һатырға кәрәк", "Уңышлы булыу өсөн яҡшы бәйләнештәр кәрәк", тигән кеүегерәк ябай аңлатмалар менән тынысландырасаҡтар.

Тормошоғоҙҙа, моғайын да, асыҡтан-асыҡ ағыулаусы кешеләр барҙыр: улар эргәһендә үткән ваҡытығыҙ һеҙҙең хыялдарығыҙ, өмөттәрегеҙ, маҡсаттарығыҙ өсөн ҡурҡыныс; улар һеҙҙең аңығыҙҙы ҡурҡыу, шикләнеү һәм билдәһеҙлек менән зарарлай. Һеҙ кире инаныуҙар йөтмәһенән һәм төрлөсә программалаштырыуҙан арынғас та әле бик көсһөҙ һәм инерция буйынса хәрәкәт итеүсән булып ҡаласаҡһығыҙ. Шуға күрә, күп осраҡта ниндәйҙер ваҡытҡа шундай таныштарығыҙ менән физик һәм эмоциональ арауыҡ һаҡлағыҙ.

Минең яратҡан кешеләрем бар һәм мин уларға һәр саҡ ярҙам итәм. Әммә уларҙың әле үк нимәлер эшләргә әҙер түгеллеген күрһәм, улар эргәһендә уҙғарған ваҡытымдың үҙем өсөн зыянлы икәнен аңлайым.

Әгәр һеҙ әле генә ярлылыҡтан арынып, үҫеш юлына баҫһағыҙ, бик уяу булырға тейешһегеҙ. Һеҙҙең өсөн иң мөһим ресурстар - аң һәм көйләнеш, уларҙы нисек кенә булһа ла һаҡларға кәрәк.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**



## 22 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское".
17.00, 02.50, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор". 9-я и 10-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15 "Вегас". Сериал (18+).
03.00 Новости.
03.40 "В наше время".
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Золотое дно Охотского моря". Док. фильм.
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". "Злой дух из санатория". Сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Братья по обмену-2". 1-4-я серии (12+).
00.45 "Краснодарский спрут. Коррупция по-советски".
01.50 "Улицы разбитых фонарей" (16+).
04.20 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Хазина" (6+)
15.00 Абдулла Солтанов. Концерт (6+)
20.00 "Тәмле" (6+)
21.00 Марсель Ҡотоев. Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Новости недели (на башк. яз.).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00, 16.15 "Замандаш" (6+).**
**11.15 Новости недели (на русск. яз.).**
**12.00 "Пятый угол" (12+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Йыйын в Биляне" (12+).**
**14.15 "Учим башкирский язык".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Живое село" (12+).**
**15.15 "Царь горы".**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Борсаҡ".**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.) (6+).**
**16.45 "КЛИО".**
**17.30 Новости культуры (на русск. яз.).**
**17.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**18.45, 20.00 "Телецентр" (12+).**
**19.45 "Сэнгелдэк".**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Время спорта" (6+).**
**23.30 "Новогодний брак". Фильм (6+).**
**01.30 "Бермудский треугольник" (12+).**

## 23 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Мажор". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет".
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 03.15 "Мужское/Женское".
17.00, 02.25, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Мажор". 11-я и 12-я, заключительная, серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Структура момента" (16+).
01.35 "Вегас". Сериал (18+).
03.00 Новости.
04.00 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (12+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". "Пропавший младенец". 17-я серия (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Братья по обмену-2" (12+).
23.50 "Своя земля". Фильм Никиты Михалкова. Фильм 1.
01.00 "Улицы разбитых фонарей". Сериал (16+).
03.40 "Бэкфайр", "Бьюти" и другие. Сто лет дальней авиации".
04.25 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Автограф". Айрат Ғайсин (6+)
15.00 Әлфиә Юлсурина. Концерт (6+)
20.00 "Дарман" (6+)
21.00 Ғәли Алтынбаев. Концерт (12+)

### БСТ

**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильм.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Зеркальце".**
**11.00, 16.15 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45 "Доктор Тырса". Сериал (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.435 "Йыйын в Биляне" (12+).**
**14.15 "Учим башкирский язык" (12+).**
**14.45 "Башкорттар".**
**15.15 "Семәр".**
**15.45 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.00 "Ғәләмәт донья".**
**16.45 "Дорога к храму".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**18.45, 20.00 "Телецентр" (12+).**
**19.45 "Сэнгелдэк".**
**21.00 "Полезные новости" (12+).**
**21.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Автограф" (12+).**
**23.30 "Главное - успеть". Худ. фильм (16+).**
**01.30 "Ирония судьбы Сергея Безрукова" (12+).**

## 24 ДЕКАБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Мажор". Сериал (12+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00, 03.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Под каблуком". 1-я и 2-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Политика" (16+).
01.25 "Вегас". Сериал (18+).
02.20 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.50 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Диктор Иванович. Солдат телевидения". Док. фильм (12+).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (12+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит" (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". "Строитель" (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Братья по обмену-2". 8-10-я серии (12+).
23.50 "Своя земля". Фильм Никиты Михалкова. Фильм 2.
01.00 "Колье Шарлотты".
03.30 "Диктор Иванович. Солдат телевидения".
04.15 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит". Юмор (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Замандаштар". Зөлхизә Илбәкова (6+)
15.00 "Арғымаҡ" төркөмө. "Йөрәктау" (6+)
21.00 "Турквижион-2014". Башҡортостан (12+)

### БСТ

**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00, 16.15 "Современник" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45 "Доктор Тырса". Сериал (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30 Новости (на башк. яз.) (16+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бэхетнэмэ".**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учим башкирский язык".**
**14.45 "Тәмле. Мударис Газетдинов" (12+).**
**15.15 "Физра" (6+).**
**15.45 "Шатлык йыры".**
**16.00 "Борсаҡ".**
**16.45 "Здоровое решение" (12+).**
**17.15 Позывной "Барс" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Авангард" (Омск) (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Автограф" (12+).**
**23.30 "Кушать подано! Или Осторожно, любовь". Худ. фильм (16+).**

## 25 ДЕКАБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.39 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Под каблуком". Сериал (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
22.00 "Под каблуком". 3-4-я серии (16+).
21.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "На ночь глядя" (16+).
01.20 "Вегас". Сериал (18+).
02.15 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.05 "Мужское/Женское" (16+).
03.50 "В наше время" (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". Сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Братья по обмену-2". Сериал (12+).
22.50 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Сухой". Выбор цели". Док. фильм.
01.30 "Колье Шарлотты". Сериал.
02.45 "Трофейная Германия" (12+).
03.35 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Һеҙ яраткан йырҙар" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Ҡуш беләҙек" (6+)
15.00 "Кис ултырып". Урал Иҙелбаев (6+)
21.00 Гөлсинә Мөхәмәҙиева һәм Марат Саҙрыев. Концерт (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Царь горы".**
**11.00, 16.15 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45 "Доктор Тырса". Сериал (16+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (16+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Башҡорт йыры" (12+).**
**14.45 "Үткән ғүмер" (12+).**
**15.15 "Шәп арба".**
**15.45 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.00 "Семәр".**
**16.45 "Алтын тирмә".**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**18.45, 20.00 "Телецентр".**
**19.45 "Сэнгелдэк".**
**21.00 "Наука 102" (12+).**
**22.00 "Аль-Фатиха".**
**23.00 "ФК "Уфа".**
**23.30 "Дорогие мои, Шурави!" (16+).**
**00.45 "Все говорят, что я люблю тебя". Худ. фильм.**

## 26 ДЕКАБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Под каблуком". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет".
16.00, 05.10 "Мужское/Женское".
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес" (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
22.40 "Вечерний Ургант".
23.35 "Голос". Музыкальный конкурс (12+).
01.50 "Соблазненные и покинутые". Док. фильм (16+).
03.40 "Влияние гамма-лучей на бледно-желтые ноготки". Худ. фильм (16+).
05.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.10, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
08.55 "Мусульмане".
09.10 "От всей души".
10.05 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (12).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Сердце звезды". Сериал (12+).
16.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". Сериал (16+).
18.30 "Прямой эфир".
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Специальный корреспондент" (16+).
23.00 "Кровь с молоком". Мелодрама (12+).
01.00 "Слон и Моська". Худ. фильм (12+).
02.40 "Горячая десятка" (12+).
03.40 "Комната смеха".
04.25 "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йома" (6+)
15.00 Ян Лира. Концерт (6+)
19.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
20.00 "Йондоҙло сәғәт" (6+)
21.00 "Кис ултырып". Рәис Низаметдинов (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан.**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильмы.**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00, 16.15 "Замандаш" (6+).**
**11.15, 17.45 "Орнамент".**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45 "Доктор Тырса" (12+).**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 00.45 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бэхетнэмэ".**
**13.45 "Учу башкирский язык".**
**14.45 "Автограф" (6+).**
**15.15 "Зеркальце".**
**15.30 "Гора новостей" (6+).**
**15.45 "Сулпылар".**
**16.00 "Байтус" (6+).**
**16.45 ФК "Уфа" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры (16+).**
**18.00 "Йома".**
**18.45, 20.00 "Телецентр" (12+).**
**19.45 "Сэнгелдэк".**
**21.00 "Полезные новости" (12+).**
**21.15 "История признания" (6+).**
**22.00 Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Дарман" (12+).**
**23.45 "Смелая музыка" (12+).**

## 27 ДЕКАБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Свой среди чужих, чужой среди своих". Худ. фильм (6+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Три жизни Эммануила Виторгана" (16+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10 "Собака на сене". Худ. фильм.
15.45 "Михаил Боярский. Один на всех" (12+).
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Ледниковый период".
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Финал (16+).
23.45 "Что? Где? Когда?" Финал года.
00.55 "Отпуск по обмену". Романтическая комедия (16+).
03.20 "Пожар". Худ. фильм (16+).
04.40 "В наше время" (12+).
05.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.45 "Одуванчик". Худ. фильм
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова.
08.50 "Планета собак".
09.25 "Субботник".
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.25 "Вести-Башкортостан".
11.35 "Честный детектив".
12.05, 14.35 "Продается кошка". Худ. фильм (12+).
14.00 "Вести".
14.25 "Вести-Башкортостан".
15.05 "Это смешно" (12+).
17.55 "Свадьбы не будет". Мелодрама (12+).
20.00 "Вести".
20.30 "Слабая женщина". 4 серии. Сериал (12+).
00.25 "Тариф "Счастливая семья". Худ. фильм (12+).
02.15 "Невеста". Худ. фильм (16+).
03.40"Планета собак".
04.10 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Һеҙ яраткан йырҙар" (6+)
12.15 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "20 йыл сәхнәлә". "Каруанһарай" төркөмө (6+)
18.00 Азат Биксурин. Концерт (2014й.) (6+)
21.00 "Сәк-сәк". Фильм (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05, 12.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.15 "Кукарача 3D". Анимационный фильм.**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (12+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт".**
**12.45 "Учу башкирский язык" (12+).**
**13.30 "Орнамент" (6+).**
**13.45, 19.30 "Весело живем" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (0+).**
**16.00 "Баик-2014" (6+).**
**17.00 Фестиваль спортивных единоборств и боевых искусств (12+).**
**18.15 "Хазина" (6+).**
**18.45 "Замандаш".**
**19.00 "Башкорттар".**
**19.45 "Сэнгелдэк".**
**20.00 "Юматово. Санаторию - 80 лет".**
**20.30 "Живое село" (12+).**
**21.00 "Бизнес-сфера" (12+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**22.00 "Попкорм" (16+).**
**22.30 Новости (на башк. яз.) (16+).**
**23.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**23.45 "Странный город" (12+).**
**00.45 "Письма к Джульетте". Худ. фильм (16+).**

## 28 ДЕКАБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Одиночное плавание". Худ. фильм (12+).
08.10 "Армейский магазин".
08.45 "Смешарики". "Пин-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Теория заговора".
13.15 "Черно-белое".
14.20 "Евгения Добровольская. Все было по любви" (12+).
15.25 "Голос". Финал (12+).
17.45 "Голос. На самой высокой ноте".
18.50, 22.30 "Золотой граммофон". Церемония вручения народной премии (12+).
21.00 "Воскресное "Время".
23.50 "Оз: великий и ужасный". Фэнтези.
02.15 "На самом дне". Худ. фильм (16+).
04.00 "В наше время" (12+).

### РОССИЯ 1

05.15 "Семь верст до небес". Худ. фильм (16+).
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Кулинарная звезда".
12.10 "Свадьба". Мелодрама (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Смеяться разрешается".
16.10 "Вопреки всему". Мелодраматический сериал. 4 серии (12+)..
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
23.50 "Пять лет и один день". Драма (12+).
01.50 "Стреляй немедленно!" Худ. фильм (12+).
03.30 "Моя планета" представляет: "Одна на планете. Исландия. Женский род".
04.20 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.05 "Кәмит" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йондоҙ. Ҡышҡы кистә көҙгө әкиәт". Фильм-концерт (6+)
19.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
20.00 "Йондоҙло сәғәт" (6+)
21.00 "Аҡ мондар". Концерт (6+)
23.00 "Юлдаш йыры-2013" (Гала-концерт) (12+)

### БСТ

**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.15 "Йома".**
**08.45 Мультфильмы.**
**10.00 "Физ-ра".**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Ал да гол" (6+).**
**11.00 "Шәп арба" (6+).**
**11.15 "Байтус" (6+).**
**11.30 "Сулпылар".**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню".**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Автограф" (12+).**
**17.00 "Историческая среда".**
**17.30 "Наука 102" (12+).**
**18.00 "История признания" (6+).**
**18.15 "Газпром трансгаз Уфа". Вестник (12+).**
**18.45 "Мои крылья - мои сыновья" (12+).**
**20.00 "Любимое дело".**
**20.30 Диспут-клуб "Пятый угол" (16+).**
**21.15 "Бизнес-обзор" (12+).**
**21.30 Новости недели (на русск. яз.).**
**22.15 "Полезные новости" (16+).**
**22.30 "Баик-2014" (12+).**
**23.30 "Вечер.com".**
**00.15 "Свидание с джазом" (16+).**

*✓ Быға тиклем төрлө профессиональ театрҙар тарафынан күп тапҡыр ҡуйылған спектаклде бөгөн һәүәҫкәр артистар уйнауында күреүе бик ҡыҙыҡ. Иң мөһиме, улар ихласлығы менән алдыра, тамашасыны нәҡ шул әсир итә.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# "ҠОРОС"ТОҢ НЫҠЛЫҒЫН...

## тамашасы һынаны



**XX быуаттың бөйөк шағирҙарының береһе, үҙен драматург, кинорежиссер, киноактер, рәссам булараҡ та күрһәтә алған Владимир Маяковский: "Театр - сағылдырыусы көҙгө түгел, ҙурайтыусы быяла", - тигән. Ошо көндәрҙә М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты башҡорт филологияһы факультеты эргәһендә эшләп килгән "Ҡорос" фольклор-театр коллективының Наил Ғәйетбаев пьесаһы буйынса ҡуйылған "Ауылға ҡыҙҙар килде" спектакле әҙиптең фекере менән килешмәү мөмкин түгел икәненә төшөндөрҙө.**

- "Ҡорос" - коллектив ныҡлы, ҡаҡшамаҫ булһын, тигән теләктә ҡушылған исем, - тине үҙ сығышында "Ҡорос"тоң етәксеһе М. Кәрим исемендәге БР Милли йәштәр театры актеры Илнур Лоҡманов. - Бөгөн беҙ ансамблдең исеменә есеме тап килеүен күрҙек, 2012 йылда ойошторолған түңәрәк, ниһәйәт, нығынды, ҡорос кеүек сыныҡты, фольклорҙан күренештәр сәхнәләштеүҙән тәүге спектаклен ҡуйыуға тиклем үҫте. Бөгөн зал тулы тамашасы, мәртәбәле ҡунаҡтар алдында студенттар бер аҙ ҡаушабыраҡ киттеләр, шулай ҙа күңелдәрен һалып, үҙҙәренсә тырышып уйнанылар. Йәштәр үҙҙәрендә актерлыҡ һәләтен үҫтерһә, мин бында уларҙы өйрәтеп кенә ҡалмайым, өйрәнәм дә. Бөтә ролдәрҙе бер ҡалыпҡа һалып, яһалма итеп башҡармаҫ өсөн актер һәр ваҡыт эҙләнергә тейеш, мин студенттарға ҡарап багаж йыям...

"Ҡорос" фольклор-театр коллективы сәхнәләштергән "Ауылға ҡыҙҙар килде" спектаклен М.Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның ректоры Раил Әсәҙуллин, БР Яҙыусылар Союзы рәйесе, драматург Наил Ғәйетбаев, "Киске Өфө" гәзите баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, "Ватандаш" журналы баш мөхәррире Азамат Юлдашбаев, танылған боксер Хәбир Сөләймәнов, БДПУ-ның филология факультеты деканы Луиза Сәмситова тамаша ҡылды. Әйткәндәй, Луиза Хәмзә ҡыҙы факультетта белем алыусы студенттарҙың был түңәрәктә бик теләп шөғөлләнеүҙәрен билдәләне: "Егеттәр һәм ҡыҙҙарҙың актерлыҡ буйынса юғары белеме булмаһа ла, үҙ ролдәрен шул тиклем оҫта башҡарыуҙарын күреү ҡыуаныслы, киләсәккә өмөттәр уята. Был студенттарға тарихыбыҙҙы, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе белеү, һаҡлау, киләсәк быуынға еткереү, башҡорт телен, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен бүтән милләттәр алдында тейешле кимәлдә күрһәтеү, пропагандалауға булышлыҡ итә", - тине ул.

Уйнап әйткәндә лә уйлап әйт, тигәндәй, Наил Ғәйетбаевтың пьесаһы буйынса ҡуйылған "Ауылға ҡыҙҙар килде" комедияһы тамашасыны көлкө аша ауылдағы төп проблемаларҙың нигеҙе тураһында уйландыра. Автор ауыл кешеләренең күңел төшөнкөлөгөн, элек гөрләп торған тормоштоң хәҙер емерек ҡоймаларға ҡайтып ҡалыу сәбәбен ҡыҙҙарҙың ситтән бәхет эҙләүенә бәйләй. Ауылда ҡалған егеттәр ғаилә ҡороп йәшәп китер, мәктәптәр ҙә ябылмаҫ, хужалыҡтар ҙа емерек хәлгә етмәҫ, йәштәр ҙә эсмәҫ ине, тик бындағы дарманлы егеттәрҙең дәртен күтәрерлек ҡыҙҙар бөтәһе лә ҡалаға бәхет эҙләп сығып киткән. "Пьеса нигеҙенә һалынған фекер, ҡыҙғаныста күрә, бөгөн дә актуаллеген юғалтмаған. 1998 йылда тасуирланған хәл-ваҡиғалар һаман да дауам итә, ҡыҙҙар ҡалаға ашыға, ир-егеттәр ауылда тормоштарын яйлай алмай аптырана. Быға тиклем төрлө профессиональ театрҙар тарафынан күп тапҡыр ҡуйылған спектаклде бөгөн һәүәҫкәр артистар уйнауында күреүе бик ҡыҙыҡ. Иң мөһиме, улар ихласлығы менән алдыра, тамашасыны нәҡ шул әсир итә. Киләсәктә йәштәр тағы ла нығыраҡ оҫтарыр, етешһеҙлектәрен төҙәтер. Уңыштар ғына теләргә ҡала", - тип баһаланы Наил Ғәйетбаев.

Тамашасы өсөн бар күңелен һалып уйнаған һәүәҫкәр артистар иһә, был ролдәрҙе башҡарыу еңел бирелмәүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. Ауылдың клуб мөдире Әхтәм ролен башҡарыусы Азамат Нурғәлин: "Һәр ролдең үҙенсәлеге була, геройыңдың үҙен тотошонан алып, эске кисерештәренә тиклем тамашасыға асып биреү өсөн үҙеңде икенсе кешегә әйләндерергә кәрәк. Етди проблемаларҙы көлөп башҡарыуы еңел түгел", - тип һөйләне. Һәүәҫкәр артистар әйтеүенсә, спектаклгә әҙерлек бер ай тирәһе генә барған. Был ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ниндәйҙер һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн репетициянан һуң да уйланырға, эҙләнергә, геройҙарының тотош-ҡыланышына кинолар, тирә-яҡтағы кешеләргә ҡарап өйрәнергә тура килгән.

"Ҡорос" фольклор-театр коллективында әлеге көндә 3 егет һәм 6 ҡыҙ шөғөлләнә. М.Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның филология факультеты доценты, филология фәндәре кандидаты Зәки Әлибаев ансамблдең студенттар өсөн оло әһәмиәткә эйә булыуын билдәләне: "Элек тә студенттар өсөн ошондай театр түңәрәктәре эшләй торғайны, был онотолоп барған ғәҙәткә яңынан йән өрөү килеп сыҡты. Һәләттәрен төрлө яҡлап асырға теләгән кешегә мөмкинлектәр булдырылған. Үҙешмәкәр театр булһа ла, Илнур Лоҡманов етәкселегендә ул студенттарҙы уҡыуҙа ғына түгел, сәхнәлә лә һынап ҡарарға, яңы һыҙаттарын күрергә ярҙам итә. Әле спектаклдә Әмир ролен башҡарыусы Илһам Теләүбаев исемле егет, мәҫәлән, урыҫ телле ине. Бөгөн сәхнәлә ул тулыһынса үҙенең башҡортлоғон шул тиклем матур итеп еткерә ала, тимәк, башҡорт рухы бар. "Ҡорос" фольклор-театр коллективы һәләттәрендe асыуҙан тыш, башҡорт рухын уятыуҙа ла бик уңайлы майҙансыҡ", - тине Зәки Арыҫлан улы.

Тамашасыларҙы "Ҡорос" фольклор-театр коллективы артистары һоҡландырҙы ла, аптырашта ла ҡалдырҙы. "Әлеге "Ҡорос"тарҙың тамашаһына үтә лә төшөнкө генә кәйеф менән барғайным: "йә, йәнәһе, нимәләр ҡылған булырһығыҙ". Юҡҡа ғына. Төшөнкөлөк шунда уҡ юҡҡа сыҡты. Афарин, егеттәр һәм ҡыҙҙар. Ихласлығығыҙ менән арбанығыҙ. Ышандырманығыҙ, әммә "эләктерҙегеҙ". Ҡиммәттәрҙе гигабайттар, гигагерцтар һәм мегапикселдәр менән үлсәй торған быуын вәкилдәре булһағыҙ ҙа, ҡәлбегеҙҙә нур бар. Шул нурҙарҙан усаҡ ҡабыҙҙығыҙ сәхнәлә. Шул усаҡтан тамашасыларҙың, шул иҫәптән минең дә, күңелемә яҡтылыҡ йүгерҙе, йәнемә осҡон үрләне. Рәхәтләнеп көлдөк. Тик, ваҡыт-ваҡыты менән был көлөү күҙ йәштәре аша ине. Сәнғәттең көсө лә шундалыр, моғайын", - тине "Ватандаш" журналының баш мөхәррире Азамат Юлдашбаев спектакль һуңынан тәьҫораттары менән бүлешеүҙе һорап мөрәжәғәт иткәс. Ысынлап та, йәш артистар тамашасыларҙы ихласлығы, тырышлығы, ябайлығы менән арбаны. БДПУ-ның проректоры Венер Шәйәхмәтов та студенттарға яңы ижади үрҙәр теләп, киләсәктә бындай шәп спектаклде "ҡумтаға" һалып ҡуймаҫҡа, Башҡортостан буйлап гастролдәр ойошторорға, сит өлкәләрҙә үткәрелгән төрлө фестиваль, конкурстарҙа ҡатнашырға кәрәк, тигән теләк белдерҙе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тормоштағы һәр нәмәне театр ҙурайта, ниндәйҙер күренештәргә кеше иғтибарын йәлеп итә икән, "Ҡорос" фольклор-театр коллективы "Ауылға ҡыҙҙар килде" спектакле ярҙамында борсоған проблемаларға лупа аша ҡараш ташлауҙан тыш, йәштәр менән эшләүҙең бер ысулын да күрһәтте. Спектакль тамамланғандан һуң БДПУ ректоры Раил Әсәҙуллин да филология факультеты студенттарының таланттарын күреп, һоҡланыуын белдерҙе: "Уҡытыусы, ректор кеше өсөн студенттарының ошондай юғары кимәлдәге сығыштарын ҡарау иң оло бәхеттер, моғайын. Бәлки, белгестәр уларҙы барыһын да дөрөҫ башҡармауҙа ғәйепләп, тәнҡитләр. Әммә иң мөһиме - уларҙың бөгөн ҙур зал йыйып, ихлас сығыш яһауы менән бөтә университет ғорурланырға тейеш", - тине ул. Талантлы студенттарҙы ваҡытында күреп, һәләттәрен үҫтерергә ҡуш ҡуллап ярҙам итергә әҙер тороусы остаздар булғанда, "Ҡорос" фольклор-театр коллективында шөғөлләнеүсе студенттарға тик тырышлыҡ, яңы ижади үрҙәр генә теләргә ҡала.**

**Камилә ҒӘЛИЕВА.**

## КОТЛАЙБЫҘ!

Декабрь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Өфө ҡалаһынан** Әлфиә Мырҙағәлина, Марина Ихсанова, Н. Насирова, **Ейәнсура районы** Малай Муйнаҡ ауылынан Гөлнара Аҡбашева, Аҡдәүләт ауылынан Хөснулла Айсыуаҡов, Иҫәнғол ауылынан Мөршиҙә Дауытова, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Зөһрә Ҡарамырҙина, Хәҙисә Мырҙаҡаева, Үрге Иҙрис ауылынан Юлай Мостафин, Рәмзиә Мостафина, **Благовещен ҡалаһынан** Раушания Миңлеәхмәтова, Неля Сәлимова, **Әбйәлил районы** Асҡар ауылынан Зөһрә Йәғәфәрова, Зөһрә Шөғөрова, **Байым ауылынан** Мәрзиә Юламанова, **Стәрлетамаҡ районы** Рощинский ауылынан Гөлназ Аҫылгәрәева, Дыуан районы Арый ауылынан Йәмил Нуриев, **Хәйбулла районы** Иләҫ ауылынан Фазылйән Шәрипов, **Ғафури районы** Бәләкәй Үтәш ауылынан Әлфиә Рафиҡова, **Күмертау ҡалаһынан** Вәсилә Ғәбитова, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Ишғәле Нурғәлин һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ! Гәзитебеҙҙең тоғро дуҫтарына киләсәк һәр көнөгөҙ муллыҡта, һаулыҡта, ҡайғы-хәсрәтһеҙ, күңел тыныслығы менән именлектә үтһен, тип теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**20 декабрь "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия

**21 декабрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

**22-26 декабрь "Итекле бесәй"** (Ш. Перро, В. Ганзенко), әкиәт. Башлана 11.00, 13.00, 15.00

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**20 декабрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 12.00, 15.00

**21 декабрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 12.00, 15.00, 17.00

**22-24 декабрь "Аладдин"** (И.Казакова), әкиәт. Башлана 10.00, 12.30

**25, 26 декабрь "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. Башлана 10.00, 12.30, 15.00

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**23-26 декабрь "Яңы йыл музейы"**, Яңы йыл тамашаһы. Башлана 10.00, 13.00, 15.00

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Декабрь (Сәфәр - Рабигел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, ақшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 22 (30) дүшәмбе | 8:10 | 9:40 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 23 (1) шишәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:18 | 16:48 | 18:18 |
| 24 (2) шаршамбы | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:19 | 16:49 | 18:19 |
| 25 (3) кесе йома | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:20 | 16:50 | 18:20 |
| 26 (4) йома | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:21 | 16:51 | 18:21 |
| 27 (5) шәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:22 | 16:52 | 18:22 |
| 28 (6) йәкшәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:23 | 16:53 | 18:23 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙән алынды.*

АФАРИН!

# БАШҠОРТ ТЕАТРЫБЫҘ...

## заман менән бергә атлай



**Ошо көндәрҙә М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры үҙенең 95 йыллыҡ оло юбилейын билдәләй. Театрына ҡарап, дөйөм милләттең мәҙәниәте тураһында һүҙ йөрөтөргә була, тиҙәр. 100 йыллыҡ юбилейына биш миҙгел генә ҡалған театрҙың бөгөнгө йөҙө ниндәй һуң? Ошо һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ.**

**Олег ХАНОВ, театрҙың художество етәксеһе:** Бөгөнгө көндә илдә барған сәйәси ваҡиғалар һәр кемдең күңелендә бер аҙ хәүеф тойғоһо уята торғандыр. Театр барлыҡҡа килгән 1919 йыл да тарихи күҙлектән бик ҡатмарлы осор була. Дәүләт королошондағы һынылыш һөҙөмтәһендә кешеләрҙең аңында, уларҙың донъяға ҡарашында һынылыш барлыҡҡа килә. Ошо ваҡиғаларҙың киҫелешендә торған театрҙың эшмәкәрлегендә лә сағыла был дәүер. Башҡорт театрына нигеҙ һалыусы Вәлиулла Мортазин-Иманский, Шәйехзада Бабич, Бәҙәр Йосопова, Мәкәрим Мәһәҙиев һәм башҡаларҙың, һуңғараҡ Башҡорт дәүләт сәнғәт техникумын тамамлап килеүсе Булат Имашевтарҙың яҙмышына ла ил тарихы үҙенең эҙен һала. Театрҙың 1930 йылда Мәскәүҙә СССР халыҡтары мәҙәниәте Олимпиадаһында ҡатнашыуы, унда ошо осорҙа барған реформалар театр үсешенә ҙур өлөш индерә.

Ысынлап та, театрҙың үткәне илдең тарихы менән тығыҙ бәйле. Артыҡ тарих һөйләү менән мауыҡмайынса, ҡыҫҡаса шуны әйтергә була: бөгөн урамда 2014 йыл, 21-се быуат, ә башҡорт театры бар һәм уның киләсәге лә яҡты. Беҙҙең бөгөнгө төп бурыстарыбыҙҙың иң мөһиме - туған телде, уның дөрөҫ яңғырашын һаҡлау, тип иҫәпләйем. Икенсенән, һәр театр үҙ заманы талаптарына яуап бирергә һәм заманды сәхнә әҫәрҙәрендә сағылдырырға тейеш. Гел генә фольклор, тарихи темалар, тамашасы өсөн бигерәк яҡын булған классик музыкаль әҫәрҙәр менән генә сикләнергә ярамай. Театр даими эҙләнеү юлында булырға тейеш. Тәжрибәләр яһарға, тамашасы яратҡан әҫәрҙәргә икенсе күҙлектән ҡарауҙан ҡурҡырға ярамай. Мәҫәлән, был миҙгелдә Айрат Абушахмановтың Мәжит Ғафури әҫәре буйынса ҡуйған "Ҡара йөҙҙәр" спектаклендәге төп проблемалар бөгөнгө көнгә лә ауаздаш. Һаҙанлыҡ, ғилемһеҙлек ята күп бәләләр нигеҙендә. Ҡасандыр бөйөк мәғрифәтсе Аҡмулла "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!" тип оран ташлаһа, бөгөн дә был бик көнүҙәк мәсьәлә. Ни өсөн минең халҡым аҙаҡҡылар рәтендә булырға тейеш әле? Был материал бына ошо проблеманы художестволы рәүештә бик яҡшы итеп күрһәтә алды. "Мин - ҡатын-ҡыҙ" спектаклен (Туфан Миңнуллин) йәш режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаев яңыса ҡараш менән сәхнәләштереп, ҡатын-ҡыҙҙың ерҙәге әсәлек асылы тураһындағы әҫәрҙә дөйөм кешелек юғарылығына күтәреп яңғырата алды.

Ошо ике генә миҫалдан сығып, театр заман менән бергә атлай, тип ышаныслы әйтергә була. Мәҙәниәт йылында, башҡорт театры менән һәр саҡ тығыҙ хеҙмәттәшлек итеп йәшәгән Мостай Кәримдең тыуыуына 95 йыл тулғанда, театрҙың да юбилейын билдәләү үҙе бер мәртәбә, был ваҡиғаларҙың тап килеүендә лә ниндәйҙер хикмәт барҙыр, моғайын.

**Альбина ИСХАҠОВА, тамашасы:** Башҡорт театры менән тәүге танышыуым Өфөгә интернатҡа уҡырға килгәс, 10-12 йәштәр тирәһендә булды. Ул замanda актерҙарға бөйөк шәхестәр итеп ҡарай инек, яндарына барыу, һүҙ ҡушыу тураһында уйламайһың да. Борон драма театры ла Башҡорт опера һәм балет театры бинаһында урынлашҡайны, бер көн опера, бер көн балет, икенсе көндә драма спектаклдәре ҡуйыла ине. Унда инәһең дә, мөғжизәле бер донъяға сумаһың. Тамашасы гардеробта сисенә, мотлаҡ рәүештә алмаш туфлиҙар кейә, антракт ваҡытында ҡара төлкә тире яғаларын индәрәнә һалған оло-оло апайҙар бер-бер артлы теҙелеп, баштарын текә генә тотоп йөрөй. Беҙ, бала-саға, уларҙың артынан эйәреп, улар булып атлап ҡарай торғайныҡ. Беҙҙең мәктәптең егеттәре театрға массовкала уйнарға йөрөйҙәр ине. Артистарҙан Арыҫлан Мөбәрәков хәтергә уйылып ҡалған, иҫ киткес мөғжизәле кеше, һоҡланғыс актер булды ул. Ул сәхнәгә килеп сыҡһа, сәхнәне тултырып, уға йәм, дәрт өҫтәй ине. Әнғәм Атнабаевтың "Ул ҡайтты" спектаклендә уйнағанын илай-илай ҡарай торғайныҡ. Спектаклдәрҙең йырҙарын йырлап йөрөй инек.

Театр менән бергә теге быуаттан бер быуатҡа атланыҡ, өсөнсө быуын актерҙарын да танып беләм. Беҙҙең менән бергә театрыбыҙ ҙа олпатланды, тәжрибә тупланы. Бөгөнгө йәш актерҙар ҙа шундай һәләтле, спектакль ҡараған һайын һоҡланып бөтә алмайым. Әлбиттә, күп нәмә ябайлашты хәҙер, декорацияларҙы элеккеләре менән сағыштырырлыҡ түгел. Ҡатмарлы, көтөлмәгән алымдар уйлап табыла, тамашасыны "Аһ" иттерерлек спектаклдәрҙе йыш ҡуялар. Беҙ, өлкәнерәк быуын тамашасылары, ҡайһы бер нәмәләрҙе оҡшатмай ҙа ҡуйған булабыҙ, шулай ҙа был театр һаман да элеккесә уйнарға тейеш, тигәнде аңлатмай. Театр заман менән бергә үҙгәрергә лә бурыслы. Әгәр ҙә сәхнәлә рух бар һәм ул халҡына һаман да тоғро икән, бындай театрҙың киләсәге тағы ла өмөтләрәк буласаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Заманалар менән бергә тамашасыларҙың да, хатта театрҙың үҙенең дә үҙгәреүенә ҡарамаҫтан, башҡорт драма театры бер ҡасан да үҙ юлынан, үҙ маҡсатынан тайпылғаны юҡ. Һуңғы ваҡытта премьера спектаклдәренә билеттар табып булмаған осраҡтар йыш була, тимәк, үҙенең рухы, эстетик өҫтөнлөктәре, тәбиғәте буйынса башҡорт театры заманға яраҡлаша ала тигән һүҙ. Ошо сәхнәлә ҡасандыр уйнаған бөйөк легендар шәхестәр, бөгөн уларҙың эшен дауам итеүсе йәштәр бар саҡта, милләт мәҙәниәтенең йөҙөн күрһәтеүсе башҡорт театрының 100 йыллыҡ юбилейын тағы ла лайыҡлыраҡ ҡаршылар өсөн бөтөн мөмкинлектәре бар.**

Ләйсән ДАЯНОВА
яҙып алды.

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

## БЕЛГӘН ЙОҪОҠҠА, ОНОТОП БАРАБЫҘ...

**Беҙҙең Салауат районында йәшәгән башҡорттар һөйләшендә урын алған ҡайһы бер һүҙҙәр:**

**Индек** - кәртәләп алынған урынға, кереп-сығып йөрөр өсөн, ҡулайлаштырылған алынмалы кәртәлек

**Муйынсаҡ** - яңы тыуған быҙауға сепрәктән, ҡорамалап, муйынына тағыр өсөн тегелгән әйбер; этте сиплән ҡуйғанда, муйынына кейҙерелгән ҡайыш ҡулайлама

**Коршау һукмагандар ҙа** - берәү ҙә тыймаған, рөхсәт алыу кәрәкмәй

**Бумала** - йүкә ҡайырынан һыҙырылған һалабашты, өлөштәргә бүлеп, бөкләп, бер нисә урындан ыҡсым итеп бәйләп, өй аҡлау өсөн эшләнгән ҡулайлама.

Миңһылыу АБДУЛЛИНА.
(Дауамы бар).

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ЭТЕҢДЕ БАУҘА ТОТ...

## теленде бәйҙә тот

Үҙ телем - үҙ ҡылысым, атайҙан ҡалған ҡоросом, илдә-көндә тынысым.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙенең буйы етмәгәнгә үрләгәндәр иртәме-һуңмы ул бейеклекте күрә алмаҫ хәлгә етәсәк.

**(Макс Бирбом).**

Сәйәсәт - ул теге йәки был хәл-торошҡа яраҡлашыу һәм хатта үҙең өсөн ытырғаныс булған нәмәләрҙән дә файҙа көсәү сәнғәте.

**(Отто фон Бисмарк).**

Ысын патриотлыҡ иң тәүҙә зыялы булыуҙы, шунан ғына патриот булыуҙы күҙаллай.

**(Эдмунд Берк).**

Ғәҙәт-ҡылыҡтарҙан да ҡурҡыныслыраҡ хаким юҡ, һәм кеше уларға ҡаршы тора алмай икән, тимәк, азат та була алмай.

**(Каролина Бови).**

Тарих - беҙҙең хәтерҙе киләсәккә илтер юлға йүнәлтеүсе кәмә ул.

**(Стефан Спендер).**

Мөхәббәт хакимлыҡ иткән урында Көстөң хакимлығына урын ҡалмай, ҡайҙа Көс хакимлыҡ итә, унда Мөхәббәткә урын юҡ.

**(Карл Юнг).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер бик фәҡир кеше иртән торғас, өйөндә бер ҡабым да ризыҡ юҡлығын күрә һәм астан үлмәҫ өсөн күршеләргә байға инеп, бер көмөш тәңкә биреүен үтенә. Әммә бай күрше бик һаран була һәм ярлы күршеһенә былай ти:**

**- Ә һин миңә бер айҙан кил һәм шул саҡта мин һиңә утыҙ тәңкә бирермен. Ул саҡта һин бер ай буйы бер ҡайғыһыҙ йәшәрһең. Бына мин ниндәй изге күңелле - һин бер тәңкә һорайһың, ә мин һиңә утыҙ тәңкә бирергә ризамын...**

**- Юлда килгәндә кибеп барған ҡоҙоҡта бер балыҡ тыпырсыныуын күрҙем, - ти ярлы кеше. - Ул һыуһыҙлыҡтан үлер сиккә килеп еткән һәм минән яҡындағы ҡоҙоҡтан бер силәк биҙрә һыу алып килеп һибеүемде үтенде. Ә мин балыҡҡа: "Бер биҙрә һыу һиңә оҙаҡҡа етмәҫ. Бер аҙна ғына көтөп тор. Минең буш ваҡытым булыу менән мин һинең ҡоҙоғоңа утыҙ биҙрә һыу килтереп ҡойормон", - тинем. Ә балыҡ шулай тип яуапланы: "Әле мине күрше ҡоҙоҡтағы бер биҙрә һыу ҙа ҡотҡара аласаҡ. Бер аҙнанан бер океан һыуы ла ҡотҡара алмаясаҡ..."**

**- Ә ниңә һин миңә быларҙы һөйләйһең? - ти аптырап һаран бай.**

**- Һиңә үлгәндәргә түгел, ә тереләргә ярҙам итергә кәрәк икәнде аңлатыр өсөн", - ти ярлы кеше моңһоу ғына..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 19 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4700
Заказ 4725